

КИТАП

БАШКОРТ ТЕЛЕ

4

З. Ғ. Нафикова, Ф. Ф. Мортазина

БАШКОРТ ТЕЛЕ

4


Һүҙ төркөмдәре
үҙ аллы
ярҙамсы
исем
сифат
ҡылым
алмаш
һәм
менән
ләкин
ла/лә
да/дә
алма
малай
мәктәп
ҡыҙыл
аҡыллы
зәңгәр
уҡый
эшләй
йүгерә
мин
һин
ул


яңғыҙлыҡ
уртаҡлыҡ
килеш
эйәлек заты
кем?
нимә?
Исем
кемдәр?
нимәләр?
һан
берлек
күплек


яһалма
тамыр
ҡушма
ниндәй?
Сифат
ни төҫлө?
ҡайһы?
дәрәжә
төп
сағыш-
тырыу
артыҡлыҡ
аҙһытыу


I зат
II зат
III зат
зат
барлыҡ
юҡлыҡ
ни эшләй?
һан
берлек
күплек
ни эшләне?
Ҡылым
ни эшләйәсәк?
заман
үткән
хәҙерге
киләсәк

З. Ғ. Нафиҡова, Ф. Ф. Мортазина

БАШҠОРТ ТЕЛЕ 4

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.161.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Н28

Шартлы тамғалар

— парлашып йәки төркөмдә эшләү

— ҡағиҙә

— хәтереңә һал

— үҙ аллы эш

— ятлау өсөн шиғыр

— ижади эш

— тексты күсереп яҙ

— ҡатмарлы эш

Схемалар билдәһе



Нафиҡова, З. Ғ., Мортазина, Ф. Ф.

Н28 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. — 2-се баҫма / З. Ғ. Нафиҡова, Ф. Ф. Мортазина. — Өфө : Китап, 2017. — Һүрәттәре менән 176 бит.

ISBN 978-5-295-06801-0

УДК 373.161.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш

ТП – 2017

ISBN 978-5-295-06801-0

© Нафиҡова З. Ғ., Мортазина Ф. Ф., 2016
© Мөхтәруллин А. Р., һүрәттәр, 2016
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

I бүлек. Танышыу

1. Хәйерле көн!

1. Уҡы. Һин кемдәр менән һаулыҡ һорашаһың?

Хәйерле көн һеҙгә, хәйерле көн,
Хәйерле көн, дуҫтар, туғандар!
Хәйерле көн һеҙгә, донъя йөгөн
Йөкләп барған ирҙәр, уландар!
Хәйерле көн һеҙгә, сос ҡатындар —
Донъя күркә — изге әсәләр!
Хәйерле көн һеҙгә, эшсән ҡыҙҙар,
Ер биҙәге — алһыу сәскәләр!
Хәйерле көн һеҙгә, һәр ваҡытта
Кеше булып ҡалған кешеләр!

(Зәйнәб Биишева)

● Ҡалала һәм ауылда һаулыҡ һорашыу бер-береһенән айырыламы?



2. Уҡы. Ни өсөн был һүҙҙәрҙе «тылсымлы һүҙҙәр» тип атайҙар? Шул һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө.

Һаумыһығыҙ! Рәхмәт. Хәйерле көн! Рәхим итегеҙ! Зинһар өсөн, ғәфү итегеҙ. Һау булығыҙ! Осрашҡанға тиклем! Тыныс йоҡо! Хәйерле төн! Хушығыҙ!

3. Тексты уҡы.

Һаулыҡ һорашыуҙың дөйөм ҡағиҙәләре бар: беренсе булып йәштәр оло кешеләрҙән һаулыҡ һораша. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе булып ир-ат һаулыҡ һорай. Әгәр ҙә бүлмәлә, фатирҙа, өйҙә бер нисә кеше булһа — ул саҡта тәүҙә хужабикә, аҙаҡ ҡалған ҡатын-ҡыҙҙар менән, шунан һуң ғына хужа һәм башҡа ир-ат менән һаулыҡ һорашалар. Бүлмәгә, эш урынына ингәндә, кемдең кем булыуына ҡарамаҫтан, инеүсе беренсе булып һаулыҡ һорай, ә сыҡҡанда — китеүсе беренсе булып хушлаша.

(«Мәктәп календары»нан)

● Ролдәрҙе бүлешеп, диалог ҡороғоҙ:

1) йәш кешеләр булып; 2) оло кешеләр булып; 3) өй хужабикәһе һәм ҡунаҡ ролендә.

4. Уҡы. Уҡытыусыға кемдәр осраған?

Мәктәпкә китеп барғанда уҡытыусы менән:

— Һаумыһығыҙ! — тип иҫәнләшкән бер төркөм. Бер аҙ бара биргәс, бер кеше:

— Йә, нихәл, һау ғынамы? — тип һораған.

— Сәләм! Күптән күргән юҡ, ниңә килеп сыҡмайһығыҙ? — ти икән берәү.

— Хәйерле иртә, Марат Сәлимович! — тигәндәр уға, мәктәпкә килеп инеү менән.

2. Яҡшы һүҙ матурлай донъяны

Тәмле һүҙҙәр

1. Тексты уҡы.

Тимер әсәһенең үҙенә әйткән яратыу һүҙҙәрен хәтерләне: ҡолонсағым, бәпесем, ҡояшым, күҙ нурым, үҫкәнем, аҡыллым, йән киҫәгем. Уларҙы тыңлағанда, Тимергә шул тиклем рәхәт булып китә: ауыҙы ҡолаҡтарына етә лә ҡуя. Кәнфитең ары торһон!

Туҡта әле, Тимер үҙе лә белә бит уларҙы.

— Алтыным, — тине ул, әсәһенең муйынына һарылып. — Байрам менән ҡотлайым һине, ҡәҙерлем!

Әсәһенең йөҙө балҡып китте. Өлкәндәр ҙә бик ярата икән тәмле һүҙҙәрҙе.

— Улым ҡалай ҙур үҫкән, ниндәй яғымлы, — тип һөйөндө ул. — Тағы ҡабатла әле.

Тимер теҙеп алып китте:

— Әсәкәйем, әсәкәйгенәм, матурым, гөлөм, һандуғасым, берҙән-берем, йондоҙом...

— Кешеләргә йөҙөң яҡты, һүҙең һәр ваҡыт тәмле булһын, ҡолонсағым, — тине әсәһе.

(Факиһа Туғыҙбаеванан)

● **1.** Текстан «тәмле һүҙҙәр»ҙе күсереп яҙ. Һуҙынҡыларҙың аҫтына — бер, тартынҡыларҙың аҫтына ике һыҙыҡ һыҙып билдәлә. **2.** Текст буйынса һорауҙар төҙө. **3.** Текстың планын төҙө һәм һөйләргә әҙерлән. **4.** Телмәрҙең ниндәй төрҙәрен ҡулландың? **5.** Атайыңа ниндәй «тәмле һүҙҙәр» әйтәһең? **6.** Текстан иң оҙон һүҙҙе табып, уны ижеккә бүлеп яҙ.

Факиһа Туғыҙбаева — Башҡортостандың халыҡ шағирәһе, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Оҙаҡ йылдар «Аҡбуҙат» журналының баш мөхәррире булып эшләй. Балалар өсөн «Шаҡмаҡлы дәфтәр», «Яңы күлдәк», «Ялан сәскәләре» тигән китаптар яҙған.

● Интернет селтәренән Факиһа Туғыҙбаева тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт табып уҡы.



2. Тексты уҡы, исем бир. Планын төҙө.

Ҡояш сыға. Йылғаның тулҡындары, ҡояшты сәләмләп, йырларға тотона:

— Һаумы, ҡояш!

— Хәйерле иртә! — ти ҡояш, көлөп, һәм тағы ла юғарыраҡ күтәрелә башлай. — Хәйерле иртә, гүзәл йылға! Бик һикермәгеҙ һеҙ, тулҡындар! Балалар һыу инергә теләй. Көн бөтә кешеләргә лә һәйбәт булһын!

Йылға тыныҫланды. Матур иртә башланды.

(Миңлейәр Дилмөхәмәтов)

● Йылға, ҡояш тураһында ниндәй йомаҡтар беләһегеҙ?

3. Татлы һүҙ — йән аҙығы

Тылсымлы һүҙ

1. Тексты уҡы.

Сал һаҡаллы ҡарт эскәмйәлә ултыра ине.

— Шылығыҙ, — тине лә уға Павлик, эскәмйәгә ултырҙы.

Ҡарт уға:

— Һиңә ни булды? Ҡысҡырғанһың, илағанһың, кем менәндер һүҙгә килешкәнһең...

— Мин тиҙҙән бөтөнләй өйҙән сығып китәм!

— Ҡасаһыңмы?

— Ҡасам! Шул Ленка арҡаһында. Бер буяуын да бирмәй! Ә үҙенеке күпме!

— Бирмәй? Уның өсөн генә ҡасырға кәрәкмәҫ.

— Өләсәйем дә бер кишер өсөн аш бүлмәһенән ҡыуып сығарҙы... Мине бер кем дә йәлләмәй! Ағайым кәмәлә йөрөргә бара, мине алмай.

— Ни өсөн алмай һуң һине ағайың?

— Ни эшләп неҙ һорашаһығыҙ ҙа һорашаһығыҙ?

— Мин һиңә ярҙам итергә теләйем. Шундай бер тылсымлы һүҙ бар... Яҡын кил, әйтәм. Ул һүҙҙе шым ғына, кешенең күҙҙәренә ҡарап ҡына әйтергә кәрәк.

— Ярай, әйтеп ҡарайым, — тип, Павлик өйгә табан йүгерҙе.

Ул неңлеһе янына килеп:

— Лена, зинһар... миңә бер буяуыңды бир әле...

— Һиңә ниндәйе кәрәк?

Лененан буяуҙы алғас, Павлик аш бүлмәһенең ишеген асты:

— Өләсәй, зинһар, миңә бәлеш бир әле.

— Ҡайнарын... ҡайнарын ғына ашағыһы килгән минең улымдың!

— Тылсымлы! Тылсымлы! — тип ҡабатланы Павлик эстән генә, ҡартты иҫенә төшөрөп.

Аш артында Павлик, ағаһы кәмәлә йөрөргә барыуын әйткәс, шым ғына һораны:

— Мине лә ал әле, зинһар.

— Эх һин, сәйәхәтсе! Йә, ярай, йыйын!

(Валентина Осееванан)

● **1.** Текстың планын төҙө. Уны ниндәй өлөштәргә бүлерһең? **2.** Текста телмәрҙең ниндәй төрҙәрен осраттың? **3.** Текстағы диалогтарҙы ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

2. Текстарҙы уҡы, төрҙәрен билдәлә. Һәр тексҡа исем бир.

1. Әсәйем миңә бесәй балаһы бүләк итте. Ул бәләкәй, үҙе йомшаҡ, күҙҙәре зәңгәр. Түшендә аҡ тамғаһы бар. Арҡаһынан һыйпаһаң, яғымлы мырлай.

2. Ҡышын ҡоштарға ауыр. Һыуыҡ. Елдәр иҫә. Бөтә ерҙә ҡар. Ҡайҙан аҙыҡ табырға? Ҡоштарға ярҙамға балалар килә. Улар тағараҡтар эшләп, ем һалып, ағастарға элә̆ләр.

3. Ҡояш нығыраҡ йылыта. Көндәр оҙайҙы. Ағастар япраҡ яралар. Ҡоштар оя яһайҙар. Ер йәшәрә башланы.

● Ошо текстарға оҡшатып, ҙур булмаған хикәйә уйлап яҙ.



4. Иғтибарлы булыу — үҙе изгелек

1. Уҡы. Текст буйынса һорауҙар төҙө.

Гөлнара менән Айгөл, йорт алдында ултырған әбейҙәр менән һаулыҡ һорашып, подъезға инделәр. Улар артынан шау-гөр килеп, әбейҙәргә иғтибар бирмәй, подъезға бер төркөм малайҙар үтте. Шәмсинур инәй: «Һай, заманалар! Ата — улды, әсә ҡыҙҙы танымай!» — тип көрһөнөп ҡуйҙы.

Минең бала сағым күҙ алдына килеп баҫты. Беренсе уҡытыусым Мәрзиә апай: «Балалар, һәр көндө һаулыҡ һорашып ҡаршы алығыҙ. Һаубуллашып оҙатығыҙ! — ти торғайны.

Һуғыштан яралы ҡайтҡан атайыма дарыу алыр өсөн, аҙна һайын яҡындағы Белорет ҡалаһына йөрөй инем. Бер көн ҡала урамындағы ҡарт-ҡоро менән һаулыҡ һорашып арып бөттөм. Хәл йыйырға тип

туҡтап артыма әйләнһәм, мин һаулыҡ һорашып үткән әбей, бабайҙар минең яҡҡа ҡарап: «Был ҡайһы таныштың улы булды һуң әле?» — тип, хәтерләргә тырышалар ине.

Мин әле лә һәр яңы көндө: «Һаумыһығыҙ, кешеләрем!» — тип ҡаршы алам. Кистәрен: «Тыныс төн!» — тип оҙатам.

(Әхмәҙин Әфтәх)

● **1.** Текстың планын төҙө, план буйынса һөйләргә әҙерлән. **2.** Текстың төп фекерен, төрөн билдәлә. **3.** Һиңә хикәйәләге ҡыҙҙар оҡшанымы әллә малайҙармы? **4.** Телмәрҙең ниндәй төрҙәрен ҡулландың?

★★ **2.** Уҡы. Һөйләм аҙағында ниндәй тыныш билдәләре ҡуйырһың?

Матур көн

Иң матур көн ниндәй көн
Ҡояш балҡып торған көн
Иң матур көн ниндәй көн
Ләйсән ямғыр яуған көн
Иң матур көн ниндәй көн
Сәскәгә бал ҡунған көн
Иң матур көн ниндәй көн
Хеҙмәт менән уҙған көн

(Марат Кәримов)

● Һинеңсә, иң матур көн ниндәй көн?

3. Был мәҡәлде уҡыр өсөн алфавитты иҫеңә төшөр. Һандар алфавиттағы хәрефтәрҙең урыны менән тап килә.

13 37 16 37 31 28 7

26 1 34 26 37 12 23 8 26 8 23.

II бүлек. Минең мәктәбем

5. Мәктәпкә тәү барған көн

1. Уҡы. Текстың төп фекерен, төрөн билдәлә.

1 сентябрь көнө Миләүшә әсәһе менән мәктәпкә ашыҡты.

Миләүшәнең әсәһе ҡыҙына ҡарап:

— 1 сентябрь көнөн тағы нисек әйтәләр? — тип һораны.

— Белем көнө тигәйнең дә? — Ҡыҙыҡай әсәһенә аптырап ҡарап, әллә үҙенең әйткәнен үҙе онотҡанмы, тип уйланы.

Шулай тәүге көн үтеп тә китте. Икенсе, өсөнсө көндө лә Миләүшә мәктәпкә шатланып барҙы. Дүртенсе көндө:

— Әсәй, ҙур байрам ҡасан бөтә? — тип һораны.

— Ҙур байрам бөттө, ҡыҙым. Хәҙер ҙур эшкә тотондоҡ.

— Мин эшләйемме ни? — Миләүшә аптыраны. — Өлкәндәр генә эшләй бит.

— Тырышып уҡыу — ысын эш ул, балам. «Уҡыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу» тигән боронғолар.

(Нажиә Игеҙйәнованан)

● 1. Һинең тәүге көнөң нисек үтте? Класс алдында һөйлә. 2. Текстан мәкәлдәрҙе табып, дәфтәреңә яҙ, мәғәнәһен аңлат. 3. Телмәрҙең ниндәй төрҙәрен ҡулландың?

2. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуй.

Беренсе сентябрь етте мәктәп алдында уҡытыусы уҡыусыларҙы ҡаршы алды

— Һаумыһығыҙ, балалар

— Һаумыһығыҙ, Әлфиә Сәлимовна

— Һеҙҙе яңы уҡыу йылы башланыу менән, Белем көнө менән ҡотлайым

— Рәхмәт, һеҙҙе лә ҡотлайбыҙ

● 1. Текста ниндәй «тылсымлы һүҙҙәр» осраны? 2. Өндәш һүҙҙәр бармы? Улар һөйләмдең ҡайһы урынында килгән? 3. Һөйләмдәрҙе ниндәй интонация менән уҡының?

Өндәш һүҙ телмәрҙең кемгә, нимәгә төбәлгәнен белдерә. Һөйләмдең башҡа киҫәктәренән өтөр менән айырыла.

Өн. һ., ——, ——, —— ? — Юлдаш, һеҙгә нисә йәш?

——, өн. һ., ——, ——? — Һеҙгә, Юлдаш, нисә йәш?

——, ——, ——, өн. һ.? — Һеҙгә нисә йәш, Юлдаш?

3. Шиғырҙы уҡы.

Сентябрь етте

Мәктәп ишеген асҡан
Сентябрь етте.
Аҙмы уны шат балалар
Ашҡынып көттө.
Миләгә лә ете тулды,
Уҡырға бара.

Урамға сыҡҡас та, бер аҙ
Аптырап ҡала.
— Ниндәй күп икәнбеҙ, — ти ул,
Йылмая үҙе.
Ашыға-ашыға атлай,
Эй ғорур йөҙө.

(Кәтибә Кинйәбулатова)

● Һин мәктәпкә нисек әҙерләндең? Ошо хаҡта һөйлә.

Кәтибә Кинйәбулатова — балалар яҙыусыһы, Башҡортостан Республикаһының Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Оҙаҡ йылдар «Башҡортостан ҡыҙы» журналының баш мөхәррире булып эшләгән. Балалар өсөн «Тәүге сәскәләр», «Алтын тояҡ — аҡ кәзә», «Әнисә», «Бөркөт», «Партизан ейәнсәре» тигән китаптар яҙған.

● Кәтибә Кинйәбулатова тураһында Интернет селтәренән өҫтәлмә мәғлүмәт табып уҡы.

6. Мәктәп — белем усағы

1. Тексты уҡы.

Ҡуян ҡыҙҙары дәрестә

Ҡуянбикә сығып киткәс, Сураман ҡыҙҙарға дәрес өйрәтә башланы.

— «Ҡ» хәрефле һүҙҙәр менән һөйләм төҙөгөҙ. Йә, кем яуап әҙерләне?

— Кәзә кишер кимерә, — тине ҡуяндың бәләкәй ҡыҙы.

— Дөрөҫ түгел. Һин, матурым, «к» хәрефен ҡалын «ҡ» менән бутайһың.

— Ҡырмыҫҡа ҡара ҡарғаны ҡурҡытты.

— Бик яҡшы, хәҙер математиканы тикшерәйек. Ҡуян балаһының ике алғы аяғына ике артҡы аяғын ҡушһаң, нисә була?

— Бергәме? — тип һораны ҡуяндың оло ҡыҙы.

— Эйе.

— Биш.

— Нисек биш?

— Шулай. Алғы ике аяҡ, артҡы ике аяҡ һәм мин — биш була!

Ҡуянбикә балаларын алырға килгәс:

— Сураман, минең ҡыҙҙар нисек? Беләм, ныҡ башлылар. Баҡсаның бөтә кишерен «һә» тигәнсе һанап сығалар...

— Ҡыҙҙарығыҙ математиканы бик һәйбәт белә. Һау булығыҙ!

— Сәләмәт йәшә, Сураман!

(Фәнис Янышевтан)

● **1.** Текстың төрөн билдәлә. **2.** Телмәрҙең ниндәй төрҙәрен ҡулландың? **3.** Текста ниндәй «тылсымлы һүҙҙәр» осраны? **4.** Өндәш һүҙҙәр бармы? Улар һөйләмдең ҡайһы урынында тора? **5.** Ҡуян балалары Сураман батырҙың мәсьәләләрен дөрөҫ сискәнме? **6.** Уҡыу, белем алыу тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһең?

● Тексты сәхнәләштерегеҙ.

Эйә менән хәбәр — һөйләмдең баш киҫәктәре (һөйләмдең нигеҙе). Һөйләмдең төп мәғәнәһен белдерә. Йыйнаҡ һөйләмдәр булып килә.

2. Уҡы. Тексҡа исем бир. Төп фекерен әйт.

Бына беренсе сентябрь етте. Уҡыусылар матур кейенеп мәктәпкә килделәр. Мәктәп матур биҙәлгән.

— Бөгөн балалар изге юлға сыға. Һәр кешенең тормош юлы мәктәптән башлана. Белемле, тәрбиәле, һөнәрле кеше яҡшы эшләй һәм йәшәй. Бөтә уҡыусыларға һәм уҡытыусыларға уңыштар теләйбеҙ, — тип мәктәп директоры беҙҙе тәбрикләне.

1. Текстағы һөйләмдәрҙән йыйнаҡ һөйләмдәр төҙөп дәфтәреңә яҙ. **2.** Беренсе абзацтағы һүҙҙәрҙе ижектәргә бүл.

3. Башватҡысты дөрөҫ сисһәң, матур шиғыр уҡырһың.

Ысҡығараҡ, әмин нағлуб:
Талуб йейеб, аналташ;
Кесин едни әкҫәмейеб,
Уыҡу ылый аналшаб!

(Зариф Зәкиев)

7. Белем — хазина

1. Текстың төп фекерен әйт. Өндәш һүҙҙәрҙе тап.

— Хәйерле иртә, Ҡояш апай! — тип сәләмләй Розалия ҡояшты.

Олатаһы уны арҡаһынан һөйөп:

— Тамағыңды туйҙыр ҙа, урамға сығып йөрөп инәйек, иртәнге саф һауа шифалы ул, — тине.

— Бынығы күгәрсендәр өсөн күстәнәс, бер юлы уларҙы ла һыйларһығыҙ, — тине өләсәһе бер төргәк бирәп.

Ҡоштар күтәрмә тирәһенә йыйылып өләсәйҙең күстәнәсен ашайҙар. Ашап туйғас, туғыҙ ҡатлы йорттоң түбә ситенә ҡунаҡлап, рәхмәт әйткәндәй, гөр-гөр киләләр.

— Ҡоштар оса. Ә ниңә кешеләр осмай? — тип һораны Розалия.

— Улар ҙа оса, ҡыҙым, үрҙәргә күтәрелә.

— Кешеләргә лә ҡанат үҫәме ни, олатай?

— Эйе, кешеләр ҙә ҡанатлы була.

— Ул ҡанат ҡул урынына сығамы әллә?

— Юҡ, ҡыҙым, ҡанаттар кешенең күңелендә үҫә, — тип аңлатты олатаһы.

— Күңелендә?! Нимә һуң ул күңел?

— Күңел — ул кешенең хисе, аң биреүсе эске донъяһы. Иң ҙур хазина ул күңел. Күңелдә ҡанаттар үҫһен өсөн күп уҡырға, донъяны өйрәнергә кәрәк. Шунда ғына кеше ҡанатлы була. Ә кешеләр ҡоштарҙан да бейегерәк оса ала, — тине олатаһы.

(Барый Ноғомановтан)

● **1.** Һинеңсә, иң ҙур хазина нимә ул? Һуңғы һөйләмде нисек аңлайһың? **2.** Текстан ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылы бишәр һүҙ табып яҙ.

Эйәрсән киҫәктәр баш киҫәктәрҙе асыҡлап килә. Бындай һөйләм **тарҡау һөйләм** тип атала.

2. Һүҙҙәрҙән тарҡау һөйләмдәр төҙөп яҙ. Уларҙан текст төҙө. Эйәгә — бер, хәбәргә — ике, эйәрсән киҫәктәр аҫтына тулҡынлы һыҙыҡ һыҙ.

уҡытыусы, уҡыусы, байрам, мәктәп, күңелле, сәскәләр, ҡыңғырау

3. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлат.

1. Белеме барҙың ҡәҙере бар. 2. Белемле белеменә таяныр, белемһеҙ беләгенә таяныр. 3. Белемһеҙ кеше — ҡанатһыҙ ҡош. 4. Белем алыу — әнә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу.

● Яңғырау тартынҡыларҙың аҫтына һыҙ.

4. Кем һөйләмгә эйәрсән киҫәктәрҙе тиҙерәк һәм күберәк өҫтәр?

1. Зөфәр ҡайтты. 2. Кисә Зөфәр ҡайтты. 3. ... 4. ... 5. ...

8. Китапханала

1. Текстың төрөн билдәлә.

Китапханала китаптар, дәреслектәр, журналдар, газеталар һаҡлана. Унан китапты өйгә алырға йәки уҡыу залында шөғөлләнергә мөмкин.

Китапханала ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк:

1. Ҡысҡырып, хатта шыбырлап та һөйләшеү тыйыла.

2. Кеҫә телефонын һүндереү һорала. Әгәр ҙә шылтыратырға кәрәк икән, коридорға сығырға тәҡдим ителә.

3. Торғанда йәки ултырғанда ултырғысты тауышһыҙ шылдырырға кәрәк.

4. Сумканан әйбер алғанда йәки ҡайтырға йыйынғанда тауышһыҙ, тын ғына эш итеү талап ителә.

5. Китап биттәрен бөкләү, йыртып алыу — насарлыҡ билдәһе.

6. Китапхананан алған китаптарҙы ваҡытында кире ҡайтарырға кәрәк.

(«Мәктәп календары»нан)

● **1.** Текстан ниндәй файҙалы мәғлүмәт алдың? **2.** Үҙегеҙҙең мәктәп китапханаһы тураһында һөйлә.

Аныҡлаусы — әйәне асыҡлай — эйәрсән киҫәк

предметтың билдәһен, иҫәбен белдерә

ниндәй? ҡайһы? күпме? нисә? нисәнсе? кемдең? нимәнең?

һорауҙарына яуап бирә

2. Исемдәргә **ниндәй?** һорауына яуап биргән һүҙҙәр уйла, һөйләмдәр төҙөп яҙ. Әйә, хәбәр, аныҡлаусыларҙың аҫтына һыҙ.

китап, китапхана, уҡытыусы, уҡыусылар, китапханасы

3. Текстан аныҡлаусыларҙы тап. Уларға һорау бир.

Тәүге китаптар булып Вавилон дәүләтенең Ниппур ҡалаһы һарайҙарында табылған балсыҡ табличкалар һанала.

Фирғәүен Рамзес II һалдырған китапхана ла боронғолар иҫәбендә. Бында 20 000 самаһы папирус йыйылған. Папирус-китаптарҙы йәшниктәрҙә, балсыҡ көршәктәрҙә, махсус футлярҙарҙа һаҡлағандар.

(«Мәктәп календары»нан)

Һеҙҙең өйҙә китапхана бармы? Унда ниндәй китаптар бар?

4. Китапхананан ниндәй китап алғаның бар? Ул нимә тураһында? План буйынса һөйлә.

1. Әҫәрҙең исеме һәм авторы. **2.** Унда ниндәй ваҡиғалар һүрәтләнә? **3.** Китаптағы геройҙарҙы һанап сыҡ. Кем нығыраҡ оҡшаны? Ни өсөн?

9. Мәктәп ашханаһы

1. Уҡыусының иншаһын уҡы. Уға оҡшатып, үҙегеҙҙең мәктәп ашханаһы тураһында яҙ.

Беҙҙең мәктәп ашханаһында бик тәмле ашаталар. Һәр көн төрлө ризыҡ бирәләр: дүшәмбе көн — котлет менән макарон, шишәмбе — ҡарабойҙай менән гуляш, шаршамбы — дөгө менән тауыҡ, кесаҙна — картуф менән балыҡ, йома көндө — туҡмаслы аш. Йәшелсә салаттарын һайлап алырға була.

Ашханала буфет та эшләй. Бында тәмле ваҡ бәлештәр һәм бәрәмәстәр, төрлө кәнфиттәр, татлы һуттар һатыла.

Беҙ ашханала ашарға яратабыҙ. Бигерәк тә милли ҡамыр аштары оҡшай. Көн дә ашнаҡсы апайҙарға рәхмәт әйтәбеҙ.

● **1.** Текстан аныҡлаусыларҙы тап. **2.** Телмәрҙең ниндәй төрөн ҡулландың?

2. Ашханала үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен белә(һе)ңме? Иң мөһимдәрен дәфтәреңә күсереп яҙ.

1. Өҫтәл өҫтөнә сумканы һәм уҡыу кәрәк-яраҡтарын һалма.

2. Ашханала дежур уҡыусыларҙың талабын үтә, үҙеңде әҙәпле тот.

3. Ашханала ашау ҡағиҙәләрен үтә: ризыҡты ашыҡмай сәйнә, һөйләшмә, шаярма, күршеңә ҡамасаулама.

4. Ашағандан һуң һауытты йыуыу урынына алып барып ҡуй.

5. Ашап бөткәс, ашхана хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт әйт.

● Был ҡағиҙәләрҙе үтәйһеңме? Өҫтәп нимә әйтерһең?

3. Уҡы. Тексҡа исем бир. Аныҡлаусыларҙы һорауҙары менән күсереп яҙ.

Тәртипле баланың ҡулъяулығы, үҙенә башҡа айырым тарағы булыр. Үҙ ҡулъяулығына битен, ҡулын һөртөр, үҙ тарағы менән сәсен тарар. Аяҡ өҫтө ашап йөрөгән кешенең икмәк валсыҡтары ергә төшөп тапалыр ҙа, ул ҙур гонаһлы булыр. Шуға тәрбиәле бала һис бер ваҡытта аяҡ өҫтө ашап йөрөмәҫ. Тәртипле бала үҙ эшен үҙе эшләр. Кейемдәрен бысратһа, үҙе таҙартыр.

(Ризаитдин Фәхретдин)

● Текста һаңғырау тартынҡыларҙан ғына торған һүҙҙәр бармы? Уларҙы уҡып ишеттер.

4. Мәҡәлдәрҙе уҡы. Оҡшағандарын ятла һәм яттан яҙ.

1. Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт. 2. Хур иткән дә ғәҙәт, ҙур иткән дә ғәҙәт. 3. Тоҙҙай әсе булма, балдай татлы булма.

● Беренсе һөйләмде ижектәргә бүлеп яҙ.

10. Сәғәт нисә?

1. Сәғәт буйынса ваҡытты билдәлә.

1. Сәғәт һигеҙ.
2. Сәғәт унынсы ярты.
3. Ун икенсе ун биш минут.

1. Иртәнге һигеҙ.
2. Туғыҙ сәғәт утыҙ минут.
3. Ун бер сәғәт ун биш минут.

1. 8.00 сәғәт.
2. 9.30 сәғәт.
3. 11.15 сәғәт.

2. Тәржемә ит. Һандар менән яҙ.

1. Сәғәт беренсе ярты. Ноль сәғәт утыҙ минут. Ун ике сәғәт утыҙ минут.

2. Сәғәт һигеҙенсе ярты. Ете сәғәт утыҙ минут. Ун туғыҙ сәғәт утыҙ минут.



3. Шиғырҙы уҡы.

Сәғәт нимә һөйләй?

Сәғәт әйтә: «Келт, келт, келт...
Бушҡа үтмәһен ваҡыт.
Белгең килһә донъяны,
Мең китапты уҡып сыҡ».
Сәғәт әйтә: «Келт, келт, келт...
Ғүмер ҡыҫҡа, көл, уйна.
Уҡы, эшлә, аҡыл йый, —
Киләсәк көндө уйла».
Сәғәт һүҙе: «Келт, келт, келт...
Әйтмәгеҙ, — ти, —
көт, көт, көт.
Ғүмер үтер ҙә китер,
Эшеңде эшләп бөт, бөт!»

(Муса Ғәли)

- Һөйләмдәргә тултырыусылар өҫтәп яҙ.

Сәғәт ... әйтә. Мин ... уҡыным. Муса Ғәли ... яҙған.



Муса Ғәли — шағир, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Балалар өсөн яҙған китаптары: «Юл башы», «Өмөт йондоҙо», «Йүкәләр сәскә ата», «Ҡыңғыраулы аттар» һәм башҡалар.

- Интернет селтәренән Муса Ғәли тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт табып уҡы.

11. Мәктәп алды майҙансығы

1. Текстың төрөн билдәлә. Өлөштәргә бүл. Һөйләп ҡара.

Бөгөн мәктәп янында хоккей майҙансығы асылды. Был көндө Таһир ҙа түҙемһеҙләнеп көттө. Ул элек хоккей уйнар өсөн алыҫҡа йөрөгән. «Хәҙер ваҡыт булһа, мин гел майҙансыҡта хоккей уйнайым», — ти йәш хоккейсы.

Хоккей майҙансығында кейенеү-сисенеү, конькиҙы үткерләтеү урындары бар.

— Майҙансыҡта тәжрибәле тренерҙар эшләйәсәк, уҡыусыларҙы конькиҙа шыуырға, хоккей уйнарға өйрәтәсәк. Уҡыусылар өсөн мәктәпкә ҡырҡ пар коньки һатып алынған. «Балалар араһында хоккейсылар, фигуристар артасаҡ», — ти мәктәп директоры.

● **1.** Текстан өс тултырыусыны тап, һорауҙары менән күсереп яҙ. **2.** Һеҙҙең мәктәптә спорт майҙансығы бармы? Һөйлә.

Гимнастика

Бер-ике-өс, бер-ике-өс,
Беҙҙә дәрт һәм беҙҙә көс.
Гимнастика яһамаһаң,
Сәләмәт булмаҫһың һис.
Аяҡ, ҡул хәрәкәт иткәс,
Яҡшыраҡ эшләй баш та.
Көндө файҙалы үткәрһәң,
Тәмлерәк була аш та.

(Зөһрә Ҡотлогилдина)

Зөһрә Ҡотлогилдина — яҙыусы, журналист. Баязит Бикбай исемендәге әҙәби премия лауреаты. Балаларға бағышланған «Йырсы Гөлдәр», «Витамин ҡайҙа үҫә?» китаптарын яҙған.

● Интернет селтәренән Зөһрә Ҡотлогилдина тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт табып уҡы.

2. Тексты уҡы. Йыйнаҡ һөйләмдәр төҙөп яҙ.

Беҙҙең мәктәп алдында спорт майҙансығы бар. Бында физкультура дәрестәре үтә. Көҙөн һәм яҙын беҙ физик күнекмәләр яһайбыҙ, йүгереү менән шөғөлләнәбеҙ һәм хәрәкәтле уйындар уйнайбыҙ. Ҡыш көнө саңғыла йөрөйбөҙ, хоккей уйнайбыҙ.

(«Йәншишмә» газетаһынан)

? **3.** Һөйләмдәрҙе уҡы. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлат. Улар нимәһе менән оҡшаш? Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып киләләр?

1. **Сик** буйында **кис**. 2. **Тағараҡ** та бар, **ҡарағат** та бар. 3. **Шуҡ** малайға эш **ҡуш**. 4. Ул **ҡабат табаҡ** һораманы.

● Үҙең шундай ҡыҙыҡ һөйләмдәр төҙөп ҡара.

4. Һөйләмдәргә тултырыусылар өҫтәп яҙ.

1. Мин _____ мәктәпкә килдем. 2. _____ туп уйнарға саҡырҙым. 3. _____ көрәш менән шөғөлләнеү оҡшай. 4. _____ ярыш бара.

12. Мәктәп баҡсаһы

1. Тексты уҡы. Һеҙҙә мәктәп баҡсаһы бармы? Уның тураһында һөйлә.

Мәктәп баҡсаһында яҙ көнө эштәр күп. Бөгөн беҙ түтәлдәрҙе таҙарттыҡ. Кипкән сыбыҡтарҙы, япраҡтарҙы йыйҙыҡ. Сейә, ҡарағат төптәрен йомшарттыҡ. Ҡыҙҙар алмағастарҙың олонон ағарттылар. Малайҙар тупраҡҡа ашлама индерҙеләр. Йәшелсәләр өсөн түтәлдәр әҙерләнек. Баҡса матурланып, йәмләнеп ҡалды.

Баҡсала тәжрибә майҙансығы бар. Йыл һайын унда бойҙай, һоло, тары, көнбағыш сәсәбеҙ. Быйыл кукуруз һәм етен сәсергә йыйынабыҙ.

Баҡсала шулай уҡ ҡыяр, кишер, сөгөлдөр, картуф һәм сәскәләр үҫтерәбеҙ. Йәй көнө түтәлдәрҙе утайбыҙ, һыу һибәбеҙ.

● **1.** Хәлдәрҙе һорауҙары менән күсереп яҙ. **2.** Ҡылымдар нимәй һорауға яуап була? Заманын билдәлә. **3.** Билдәләнгән һөйләмде юлдан юлға күсерерлек итеп, ижектәргә бүлеп яҙ.



2. Ребусты сисһәң, мәкәл уҡырһың. Мәғәнәһен аңлат.



13. Минең мәктәбем (инша яҙыу)

1. Тексты уҡып сық. Үҙеңдең мәктәбең тураһында һөйлә.

Мин Өфө ҡалаһының 5-се мәктәбендә уҡыйым. Беҙҙең мәктәп өс ҡатлы, ҙур һәм яңы.

Беренсе ҡатта — ашхана, медпункт, спорт залы, сисенеү бүлмәһе, икенсе ҡатта китапхана, тамаша залы урынлашҡан. Уҡыу кабинеттарын һәр ҡатта күрергә була.

Беҙҙең мәктәптә балалар ике сменала уҡыйҙар. Беренсе сменала дәрестәр иртәнге һигеҙҙән, икенсе сменала көндөҙгө икенән башлана.

Мәктәп янында спорт һәм тәжрибә майҙансыҡтары бар.

2. Һорауҙарға яуап бир.

1. Һеҙҙең мәктәп ҡайҙа урынлашҡан? 2. Мәктәбегеҙ нисә ҡатлы? 3. Мәктәптә ниндәй бүлмәләр бар? (сисенеү бүлмәһе, ашхана, китапхана) 4. Тамаша залы, спорт залы бармы? Улар ҡайҙа урынлашҡан? 5. Ниндәй кабинеттар бар? 6. Һеҙҙең мәктәптә бассейн, музей бармы? 7. Ниндәй түңәрәктәр эшләй? 8. Мәктәп алдында ниндәй майҙансыҡтар бар?

● Һорауҙарҙы һәм терәк һүҙҙәрҙе ҡулланып инша яҙ.

Терәк һүҙҙәр: тәнәфес, дәрестәр, башланғыс класс кабинеттары, бейеү, спорт, шахмат түңәрәктәре, мәктәп баҡсаһы, спорт майҙансығы, тәжрибә майҙансығы, тамаша залы.

14. Ялғанлыҡ алға алып бармай

1. Уҡы. Текстың планын төҙө, һөйлә.

Зилә менән Дилә — игеҙәктәр. Уларҙы бер кем дә айыра алмай.

Өләсәйҙе бер көндө күршегә ҡунаҡҡа саҡырҙылар. Ҡайтҡанда уға күстәнәскә тип ике алма, ике кәнфит, ике әфлисун бирҙе хужабикә инәй.

— Өләсәй, күстәнәс алып ҡайттыңмы? — тине Зилә, өләсәһе ҡайтҡас.

— Алып ҡайттым, балаҡайҙарым, ҡайҙа һуң бересеҙ?

— **Дилә тышта уйнай!** — тине Зилә, өләсәһенә һыйынып.

— Мә, ҡыҙым, быныһы һиңә! — тине өләсәй Зиләгә бер алма, бер кәнфит, бер әфлисун биреп.

Зилә тышта эскәмйәгә ултырып, күстәнәстәрен ашаны. Күстәнәстәр тиҙ бөттө. Дилә ҡайтҡас, тәмле күстәнәс ашаясаҡ, ә уныҡы — юҡ! Зилә күңелһеҙләнеп, өйгә кире инеп китте.

— Ҡайҙа йөрөйһөң, ҡыҙым? Мә, һиңә лә күстәнәс! — тип өләсәһе күстәнәстәрҙе тағы ла Зиләгә бирҙе. Зилә өндәшмәне. Ул күстәнәстәрҙе әкренләп ашап бөттө.

— Өләсәй, күстәнәс алып ҡайттыңмы? — тип Дилә йүгереп килеп ингәс, өләсәй:

— Бәй!.. Мин икегеҙгә лә бирҙем дә инде?! — тине.
Ҡып-ҡыҙыл булған Зилә башын аҫҡа эйҙе.

(Рәмзәнә Әбүталипова)

● **1.** Хикәйә нимә тураһында? Игеҙәктәр менән булған ошондай хәлдәрҙе күҙәткәнең бармы? **2. Кайҙа? ҡасан?** һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе тап. **3.** Билдәләнгән һөйләмдәрҙә баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе табып, аҫтына һыҙ. **4.** Әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр осраны?

2. Бирелгән һүҙҙәргә һорауҙар ҡуй. Улар ниндәй мәғәнә белдерә? Дүрт һөйләм төҙөп яҙ.

кисен, майҙанда, ҡапыл, балыҡта, иртәгә, шым ғына, кисләтеп, табаҡта, маҡтанып, ауырығас, умарталыҡта

? **3.** Ижектәрҙән һүҙҙәр төҙөп уҡы. Ниндәй мәҡәл килеп сыҡты?

ту	то	лор,	то	то
ра	ҡо	ал	кән	лор.
әйт	кән	дап	әйт	

15. Ялҡауҙың зиһене лә тарҡау

1. Уҡы. План төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

Беҙҙең көндәрҙә ауылда йәшәгән, ти, бер ялҡау малай. Ул уҡырға ла йөрөмәгән, өйҙә лә бер ниндәй эш эшләмәгән. Көнө буйы ашаған да йоҡлаған, телевизор ҡараған.

Йылдар үтеп, малай егет булған. Бер ваҡыт ул сәйәхәткә сығып киткән. Ҡайҙа ғына барһа ла, кешеләр менән матур, әҙәпле һөйләшә белмәй, ти. Ашарына бөткәс, эш эҙләп ҡараған, ти. Ләкин уны эшкә алмағандар, сөнки ул бер нәмә лә эшләй белмәгән, ти. Асығып, хәле бөтөп, урамда ултыра, ти. Тирә-яҡта ишектәрендә матур яҙыуҙар яҙылған, тәҙрәләрендә, стеналарында төрлө уттар янған йорттар күренә, ти. Уҡый белмәгәс, унда кешеләрҙең нимә эшләүҙәрен аңлай алмай, ти. Тамам аптыраған егет бер кешенән:

— Мин ҡайҙа? Был ниндәй урын? — тип һораған.

— Ҡустым, үҙеңдең ҡайҙа йөрөгәнеңде лә белмәгәс, кем һуң һин? Һин ҡалала, — тигән теге ағай.

Егет уйға ҡалған: «Ысынлап та, мин кем? Уҡый белмәйем, һөнәрем, йәшәргә өйөм юҡ. Кем мине ашатыр, кейендерер? Атайым да, әсәйем дә ҡартайҙылар. Нимә эшләргә артабан?» — тип уйлаған.

Егет кире ауылға ҡайтҡан, ата-әсәһенән ғәфү үтенгән. Тырышып, эшкә, үҙ аллы уҡырға өйрәнгән.

— Әх-х, ялҡаулыҡ арҡаһында күпме ваҡытты юғалтҡанмын! — тип уйлаған егет һәм тырышып йәшәй башлаған.

(Альбина Рамазанова)

● **1.** Беренсе абзацтан аныҡлаусыларҙы, икенсеһенән хәбәрҙәрҙе һәм хәлдәрҙе тап. Улар ниндәй һорауҙарға яуап бирәләр? **2.** Текстан тиң киҫәктәрҙе тап. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып киләләр? **3. Ялҡау, тамаҡ туйҙырыу** һүҙҙәренә синонимдар уйлап әйт.

Һөйләмдең баш һәм әйәрсән киҫәктәре тиң була ала. Тиң киҫәктәр бер-береһенән өтөр менән айырыла.

2. Мәҡәлдәрҙең ҡайһылары әкиәткә тап килә? Яуабыңды аңлат.

1. Уҡырға бер ваҡытта ла һуң түгел. 2. Үткән эш кире ҡайтмаҫ. 3. Ялҡау баҫып йоҡлай, ултырып эшләй. 4. Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма.

16. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Уҡыусы ниндәй булырға тейеш?

Кеше әйберенә теймә, үҙеңдекен һаҡла.

Һораған әйберҙе бирep тор.

Сәбәпһеҙ ҡул күтәрмә.

Бушҡа үпкәләмә.

Уйынға саҡырһалар — уйна, саҡырмаһалар — үҙең ҡушыл.

Намыҫлы, ғәҙел, ҡыйыу бул.

Насар билдә алһаң — илама, уны нисек төҙәтеүҙе уйла. Билдә өсөн уҡытыусы менән бәхәсләшмә, уға үпкәләмә.

Иптәшеңде ошаҡлама, унан көнләшмә.

Өҫ-башыңды бөхтә, таҙа, матур тот.

«Дуҫ булайыҡ», «бергәләп уйнайыҡ», «өйгә бергә ҡайтайыҡ», «ғәфү ит», «рәхмәт» һүҙҙәрен йышыраҡ ҡабатла.

Тәкәббер, маҡтансыҡ булма. Һин тиҫтерҙәреңдән яҡшыраҡ та, насарыраҡ та түгел. Мәктәп йылдары һиңә шатлыҡтар ғына килтерер, ысын кеше булып үҫергә ярҙам итер.

● **1.** Ҡайһы ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәйһең? **2.** Һөйләмдәрҙән ҡылымдарҙы күсереп яҙ, уларға һорау бир. **3.** Тултырыусыларҙы, аныҡлаусыларҙы, хәлдәрҙе тап.

2. Телмәр төрҙәре тураһында һөйлә. Уларҙың ҡайһыһы йышыраҡ ҡулланыла?

3. Текстарҙың төрөн билдәлә.

1. Бөгөн — беренсе сентябрь. Уҡыусылар мәктәпкә бара. Ата-әсәләр ҙә мәктәпкә киләләр. Яңы уҡыу йылы башлана.

2. Ҡуян — ҡыр хайуаны. Уның ҡолаҡтары оҙон, күҙҙәре ҡылый. Ул шәп йүгерә. Ҡуян ҡышын аҡ, ә йәйен һоро тун кейә.

3. Тумыртҡа — бик файҙалы ҡош. Ул көслө һәм оҙон суҡыштары менән ағас ҡабығын тишеп, ҡоротҡостарҙы сүпләй. Тумыртҡа ҡышын бер көн эсендә генә ҡабыҡ ҡуңыҙы менән зарарланған ҙур ҡарағай ағасынан ун меңгә яҡын ҡортто соҡоп ашай. Шуға ла уны «урман докторы» тип атайҙар.

4. Схемаға таянып һөйләм тураһында һөйлә.



? **5.** Ниндәй яҙыусылар, шағирҙар менән таныштың?

6. Ҡоротҡостар һүҙендәге хәрефтәрҙе ҡулланып, яңы һүҙҙәр уйлап яҙ. Улар менән ике һөйләм төҙө.

III бүлек. Минең республикам

17. Нимә ул Ватан?

1. Уҡы. Нимә ул Ватан?

— Ватан — ул, ҡыҙым, Тыуған ил,
Бына беҙ торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән
Атай-бабайҙар борон.

Беҙҙең Ватан, ҡыҙым, матур:
Ҡояштай балҡып тора,
Тауҙары, зәңгәр болоттай,
Күктәргә ҡалҡып тора.

(Рәшит Ниғмәти)

● **1.** Шиғырҙа өндәш һүҙҙәр бармы? **2.** Тиң киҫәктәрҙе тап. **3.** Беренсе дүрт юллыҡты күсереп яҙ, һүҙҙәргә баҫым ҡуй. **4.** Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе әйт.



Рәшит Ниғмәти — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Уның поэзияһында Тыуған илгә һөйөү, халыҡтар дуҫлығына дан йырлана. Шағир илдең, халыҡтың патриоты булырға, ил дошмандарына ҡаршы көрәшергә саҡыра. Балалар өсөн ижад иткән китаптары: «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар», «Киләсәккә сәйәхәт».

● Интернет селтәренән Рәшит Ниғмәти тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт табып уҡы.

2. Кәңәштәрҙе уҡы, үҙеңдә шундай сифаттар тәрбиәләргә тырыш.

— Минең йәш дуҫтарым! Һеҙ — Ватандың киләсәге, өмөтө. Ил өмөтөн, халыҡ ышанысын аҡлағыҙ. **Атайҙарығыҙҙың** һәм **олатайҙарығыҙҙың** хәрби һәм хеҙмәт данын үҫтерегеҙ! **Еребеҙҙең** күркен һаҡлағыҙ. **Тәбиғәт** йәмен боҙмағыҙ. Илебеҙҙең байлығын арттырығыҙ!

(Терентий Мальцевтан)

● **1.** Әйтелеү маҡсаты буйынса текста ниндәй һөйләмдәр ҡулланылған? **2.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе таблица буйынса тикшер.

һүҙ	ижек	хәреф	өн	һуҙынҡы		тартынҡы	
				ҡалын	нәҙек	яңғырау	һаңғырау

Һүҙбәйләнеш төп (әйәртеүсе) һәм әйәреүсе һүҙҙәрҙән тора. Улар һөйләм була алмай, һөйләм төҙөү өсөн материал ғына булып һанала.

ниндәй?
көҙгө урман
x

3. Р. Ниғмәти шиғырынан һүҙбәйләнештәрҙе тап. Төп һүҙҙән әйәреүсеһенә һорау ҡуйып, бер нисәһен күсереп яҙ.

4. Һүҙҙәрҙән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ. Уларҙы ҡулланып, хикәйә төҙө.

Башҡортостан, республика, Өфө, баш ҡала, трамвай, автобус, бер-бер артлы, яҙлы-көҙлө, күл, урман, тау, йылға

18. Беҙ үҙебеҙ башҡорттар

1. Текстың төрөн билдәлә. Һөйлә.

Борон **заман**да ата-бабаларыбыҙ бер урындан икенсе урынға көтөү-көтөү малдары менән күсеп йәшәгәндәр. Шулай бер ваҡыт мал үрсетеү өсөн һутлы үләнле, мул һыулы ер эҙләп, улар юлға сыҡҡандар. Арыу ғына ер үткәс, улар ҙур бүре **өйөрөнә** тап булғандар. Баш бүре өйөрҙән айырылып сыҡҡан да, каруан алдына төшөп, уға юл күрһәтеп, алдан киткән.

Кешеләр баш бүре артынан бик матур тәбиғәтле урынға килеп сыҡҡандар. Ошо урында баш бүре **туҡтаған**. **Ырыу** ҡарттары кәңәшләшеп, был урынды үҙҙәренә **төйәк** итеп һайлағандар. Шул ваҡыттан ата-бабаларыбыҙ үҙҙәрен баш бүре артынан килгән кешеләр, йәғни «башҡорттар», тип йөрөтөр булғандар. Борон бүрене ҡорт тип йөрөткәндәр. «Баш ҡорт артынан килеүсе халыҡ», тип әйтеү — «баш бүре артынан килеүсе» тигәнде аңлата.

(«Башҡорт халыҡ ижады» китабынан)

● **1.** Текстан аныҡлаусыларҙы, тултырыусыларҙы, хәлдәрҙе тап. **2.** Текстағы иң оҙон һүҙҙә нисә хәреф, нисә өн? **3.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән уҡып аңлат.

2. Тексты уҡы. Темаһын, төп фекерен әйт.

Башҡорттар борон-борондан ҙур майҙанда, Волганан Тубыл йылғаһына, Каспий диңгеҙенән Пермь яғына тиклемге ерҙә йәшәгәндәр. Улар биләгән ерҙең тәбиғәте төрлө булғанлыҡтан, һөнәр-шөғөлдәре лә төрлөсә үҫешкән. Урманлы урындарҙа башҡорттар һунарсылыҡ,

солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән. Дала яғында йәшәүселәр малсылыҡ менән көн күргән.

(Артур Иҙелбаев)

● **1.** Текстан һүҙбәйләнештәрҙе тап. Төп һүҙҙән әйәреүсеһенә һорау ҡуйып, бер нисәһен күсереп яҙ. **2.** Ырыуыңды беләһеңме? Белмәһәң, атай-әсәйеңдән, олатай-өләсәйеңдән һорашып кил.



Һәр бер телдең һүҙҙәре уның һүҙ байлығын тәшкил итә. Һүҙ нимә булһа ла аңлата, йәғни уның лексик мәғәнәһе була. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һүҙлектәрҙә аңлаталар.

3. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән һайлап, 5 һүҙҙе мәғәнәһе менән күсереп яҙ. Иптәштәреңә уҡып ишеттер. Улар төп башҡорт һүҙҙәреме әллә үҙләштерелгән һүҙҙәрме?

● Ниндәй һүҙлектәр була? Был турала мәғлүмәт әҙерлә.

19. Башҡорт йыры

1. Текстан тиң киҫәктәрҙе тап. Ниндәй һөйләм киҫәге булып килеүен әйт.

Йыр! Күпме шиғыр, моң, дәрт, илһам шишмәһе унда! Кем генә яратмай йырҙы ла, кем генә йырламай!

Йыр — кешенең бөтмәҫ хазинаһы ул. Уның өсөн алыҫ аралар ҙа, сиктәр ҙә, кәртәләр ҙә юҡ. Йыр кешене шатландыра, уҡырға дәртләндерә.

(Зәйнәб Биишеванан)

● **1.** Текстан 6 һүҙбәйләнеш күсереп яҙ. Төп һүҙҙән әйәреүсе һүҙгә һорау ҡуй. **2.** Ниндәй башҡорт йырҙарын һәм йырсыларҙы беләһең? **3.** Бер йырсы тураһында мәғлүмәт әҙерлә.

Һүҙ бер йәки күп мәғәнәле була. Бер мәғәнәле һүҙ бер лексик мәғәнәне, күп мәғәнәле һүҙ ике йәки бер нисә лексик мәғәнәне аңлата.
Ҡайын, өҫтәл — бер мәғәнәле, **йөҙ, юл, тел** — күп мәғәнәле һүҙҙәр.

2. Тексты уҡы.

Башҡортостан — йырҙар иле

Башҡорт ер-һыу атамалары ниндәй генә йырҙа йырланмаған, ҡайһы ғына яҡҡа барып етмәгән! Күгәреп ятҡан Урал тауҙары, Ағиҙел, Ашҡаҙар, Дим, Һаҡмар, Танып, Ык йылғалары йөҙҙәрсә башҡорт йырҙарында йырлана. Һәр кем уларға бағышлап йырҙар ижад итә.

Башҡортостан — ул йырҙар бишеге, көйҙәр иле, музыка шишмәһе, шиғыр баҡсаһы!

(Луиза Ихсанова)

● **1.** Ни өсөн ҡайһы бер һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙылған? **2.** Текстан тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Һөйләмдең ниндәй киҫәге икәнен билдәлә. **3.** Текстан 5 һүҙ һайлап алып, һүҙлек ярҙамында уларҙың мәғәнәһен аңлат. **4.** Күп мәғәнәле һүҙҙәр бармы? Табып уҡы.

3. Һүҙҙәрҙе иғтибар менән уҡып сыҡ. Улар ниндәй телдән ингәндәр? Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуй.

адр...с, к...нверт, к...нцерт, ф...тир, п...ртрет, орд...н, ок...ан, муз...й, м...тро, м...взолей, план...тарий, г...рбарий, г...ктар, ц...нтнер, к...никул, фам...лия

4. Уҡы. Улар тураһында нимә беләһең? Һөйлә.

Башҡортостанда йыл һайын «Башҡорт йыры», «Гәлсәр һандуғас», «Урал моңо», «Оҙон көй», «Ирәндек моңдары» йыр конкурстары үткәрелә. Уларҙа ололар ҙа, балалар ҙа әүҙем ҡатнаша.

● **1.** Яратҡан йырсың бармы? Уның ниндәй йырҙарын йырлайһың? **2.** Шул турала иптәшең менән диалог ҡор.

20. Башҡорт бейеүе

1. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, ниндәй телдән ингәнлеген һүҙлек ярҙамында табып аңлат. Улар бер мәғәнәлеме, күп мәғәнәлеме?

Башҡорттарҙы элек-электән йырсы һәм бейеүсе **халыҡ** тип йөрөтәләр. Оҙон йыр менән ҡурай милләт өсөн **опера**ны алмаштырһа, башҡорт халыҡ бейеүе **милли балет**тың нигеҙе булып ҡала.

Башҡорт моңо, башҡорт йыры, башҡорт бейеүе бөтә Ер шарын урап сыҡты. Башҡортостанда тыуып үҫкән бөйөк бейеүсе Рудольф Нуриев **балет сәнғәте** өлкәһендәге ҡаҙаныштары менән бөтә Ер шарына билдәле. Рәшиҙә Туйсина, Әнүәр Ишбирҙин, Риф Ғәбитов кеүек танылған халыҡ бейеүе оҫталары ла етерлек. Һәр төбәктә күпме йәш **талант**тар үҫә!

(Рәис Әфләтунов)

● **1.** Тиң киҫәктәр бармы? Ниндәй һөйләм киҫәге булып киләләр? **2.** Текстан ике һөйләмде күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

Күп мәғәнәле һүҙ тура һәм күсмә мәғәнәлә була. Тура мәғәнәле һүҙ предметтың үҙенә төбәлә: **карап йөҙә.** Күсмә мәғәнәле һүҙ тура мәғәнәне башҡа предметҡа күсерә: **болоттар йөҙә.**

2. Тексты уҡы. Һорауҙар төҙөп, иптәшең менән фекер алыш.

Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәйзи Әҙһәм улы Фәскәровты Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең «атаһы» тиҙәр.

Фәйзи Фәскәров Мәскәүҙәге Ҙур театр эргәһендәге хореография техникумында уҡый. 1928–1932 йылдарҙа данлыҡлы балетмейстер Игорь Моисеев класында һабаҡ ала, артабан Ленинград хореография училищеһында уҡыта.

1934 йылда Фәйзи Фәскәров иң талантлы башҡорт балаларын һайлап алып, Ленинградҡа уҡырға алып бара. Улар араһында Зәйтүнә Насретдинова, Хәләф Сафиуллин, Фәүзи Саттаров, Майя Таһирова кеүек киләсәктәге данлыҡлы сәхнә йондоҙҙары була.

Фәйзи Фәскәров ауылдарға йөрөп, башҡорт халҡының йолаларын, көнкүрешен, милли музыканы өйрәнә. Ансамблгә һәләтле йәштәрҙе йыя. 1939 йылда Башҡортостандың бейеү ансамбле ойошторола. Уны Фәйзи Фәскәров етәкләй. Ижади коллективтың даны бөтә донъяға тарала. 1988 йылда Башҡорт дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленә Фәйзи Фәскәров исеме бирелә.

(«Мәктәп календары»нан)

● **1.** Текстан күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе тап. **2.** Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. Улар нимәне аңлата? **3.** Һин ниндәй бейеүселәрҙе беләһең? **4.** Халыҡ бейеүҙәре ансамбле башҡарған ниндәй бейеүҙәрҙе күргәнең бар? **5.** «Байыҡ» телевизион бейеү конкурсы тураһында мәғлүмәт әҙерлә.

3. Һүҙбәйләнештәрҙе уҡы. Улар ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған?

йомшаҡ күңел, ныҡ ихтыяр, еңел һөйәк, арыҫлан йөрәкле, ялҡынлы бейеү, осҡон сәсрәй, аяғы ергә теймәй, күҙ эйәрмәй

● Ошо һүҙбәйләнештәрҙе индереп, бейеү сәнғәте тураһында һөйләмдәр, һөйләмдәрҙән текст төҙө.

21. Башҡорт балы

1. Текстан бал ҡортоноң иң яратҡан үҫемлектәренең исемдәрен күсереп яҙ. Был үҫемлектәр һеҙҙең яҡта үҫәме? Уларҙы күргәнең бармы?

Башҡортостан тәбиғәте умартасылыҡты үҫтереү өсөн бик уңайлы төбәк. Урмандарҙа йүкә, саған, муйыл, балан, тал ағастары, баҫыуҙарҙа ҡарабойҙай, көнбағыш үҫә. Сәскәнән сәскәгә ҡунып, бал ҡорттары уларҙан татлы һут, һеркә йыйып, бал, ҡорт елеме, ҡорт һөтө эшләйҙәр. Уларҙың бөтәһе лә кеше өсөн бик файҙалы.

Йүкә балы айырыуса үҙенең хуш еҫе, татлы тәме, аҡһыл төҫө менән юғары баһалана. Дала яҡтарында умарталыҡтарҙан ҡарабойҙай балы алына. Ул ҡыҙғылт төҫтә. Был балдың составында тимер, аҡһым

башҡа балдарға ҡарағанда күберәк була. Туғай үҫемлектәренән, ҡарабойҙайҙан, көнбағыштан алынған ҡатнаш бал да бик шифалы һәм тәмле.

(Василий Власовтан)

● **1.** Умарта тотҡан кешеләрҙе беләһеңме? Уларҙан һорашып, йәки Интернет селтәре аша бал ҡорттары тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт яҙ. **2.** Ниндәй ауырыуҙарҙы дауалағанда бал ҡулланалар?

2. Нимә ул синоним, антоним, омоним? Һүҙҙәрҙе өс төркөмгә бүлеп яҙ.

аҡ, ҙур, гигант, ауыр, онтау, урау, ысын, оло, йөҙ, ҡара, ялҡау, тапҡыр, уңған, отҡор, хаҡ, ялған, кесе, алтын, киң, тырыш, тоғро, һаҡсы, ваҡлау, егәрле, тар, тура, ҡыйын, еңел

3. Тексты һөйләргә әҙерлән.

Боронғо Грецияның **атаҡлы** математигы Пифагор балдың кеше **ғүмерен** оҙайтыуы тураһында яҙған. Балды үҙе **йыш** ашаған һәм 90 йәшкә тиклем **йәшәгән. Боронғо** грек философы Демокрит та 100 йылдан артыҡ йәшәгән, балдың сәләмәтлек өсөн **файҙалы** булыуын яҙып ҡалдырған. Атаҡлы табип Әбүғалисина йәшлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән.

Балда 60-ҡа яҡын файҙалы матдә бар. Уның бөтә төрҙәрендә лә глюкоза менән фруктоза **күп.** Бал витаминдарға ла бик бай.

Балды сирләгәндә лә ҡулланалар. Уны йылы һыуҙа иретеп, ауыҙҙы сайҡаһаң, ауыҙ эсендәге күп кенә

микробтар юҡҡа сыға. Бал менән ашҡаҙан ауырыуҙарын да **дауалайҙар.**

(«Аманат» журналынан)

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙең синонимдары, антонимдары, омонимдары бармы? Миҫалдар яҙ. Һүҙлектәр ҡуллан.

22. Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы!

1. Йырҙың яҙмаһын тыңлағыҙ. Йыр һиндә ниндәй тойғолар уятты?

Ҡадир Даян шиғыры, Заһир Исмәғилев музыкаһы

Кемдәр һауа бейәләрҙе,
Әллә Һаҡмар ҡыҙымы?
Көс тә бирә, дәрт тә бирә,
Һай, ҡымыҙы, ҡымыҙы!

Ҡушымта:

Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы ла,
Был ҡымыҙға ни етә!
Күңелдәрҙе елкендереп,
Йырлата ла бейетә.

2. Текстың планын төҙө һәм һөйләргә өйрән.

Ҡымыҙ

Ҡымыҙ — бейә һөтөн әсетеп әҙерләнгән, күпереп торған аҡ төҫтәге эсемлек. Ҡымыҙ эшләү ысулын элек сер итеп һаҡлағандар.

Өй шарттарында ҡымыҙ яһарға теләһәгеҙ, уны ҙур быяла банкала бешергә (болғатырға) мөмкин. Әсегән бейә һөтөн банкаға һалып, уға яңы һауылған һөт ҡушып болғаталар. Банканы йылы урынға ҡуйып, туҡтауһыҙ бешәләр. Ҡымыҙҙың өҫтөнә һыуы сыҡҡас, уға бер-ике аш ҡалағы шәкәр ҡомо ҡушып, тағы болғаталар.

Ҡымыҙ бешеү өсөн ағас күнәк, бешкәк булһа, эсемлек бигерәк тә уңыр. Ҡымыҙ һаулыҡҡа файҙалы булған иң шифалы эсемлек булып һанала.

(«Башҡортостан» энциклопедияһынан)

● **1.** Ҡымыҙ тураһында ниндәй файҙалы мәғлүмәт белдең? **2.** Ҡымыҙҙың наградалары бармы? Интернет селтәренән мәғлүмәт эҙлә. **3.** Синонимдарға, антонимдарға текстан миҫалдар килтер.

? **3.** Һүрәттәр нимә аңлата? Уларға синонимдар, антонимдар, омонимдар уйлап буламы?





23. Моңло ҡурай, серле ҡурай

1. Уҡы. Әкиәттең төп фекерен әйт.

Ҡурай

Борон заманда ҡара урман эсендә әбей менән бабай йәшәгән, ти. Ашарҙарына икмәктәре, кейерҙәренә кейемдәре булмаған. Уларҙың улдары **донъяға килгән,**

ти. Ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бала бик көслө һәм батыр егет булып үҫкән, ти. Ҡартайған ата-әсәһен ул үҙе ҡарай башлаған, ти. Һунарға йөрөгән, йәнлектәрҙең тиреһен икмәк-тоҙға алмаштырған. Шулай итеп улар **көн күргәндәр.**

Бер заман илгә ҙур бәлә килгән, ти. Күрше батша һуғыш аса. Уға берәү ҙә ҡаршы тора алмай, ти. Батшалыҡтың бик күп **батыр**, көслө егеттәре **баштарын һалғандар**, ти. Бына беҙҙең егеткә лә яуға китергә ваҡыт еткән, ти. Китер алдынан атаһы уға ҡурай биргән:

— Дошман ғәскәре яҡыная башлағас, ошо ҡурайҙа уйнарһың, — тигән.

Бына дошман ғәскәре килә, ти. Егет ҡурайын уйнап ебәргән. Уның тауышын ишеткән дошман ғәскәре ҡапыл туҡтап ҡалған. Ҡурай тауышында халыҡтың ҡайғыһы, тыуған яҡтың матурлығы сағылған сихри моң дошман һалдаттарының, хатта һуғыш башлаусы батшаның да йөрәгенә үтеп ингән. Батша үҙенең ғәскәренә кире боролоп ҡайтырға ҡушҡан, ти.

Һуғыш тамамланыуға халыҡ бик **һөйөнгән**. Ҡурай ярҙамында егет һуғышты туҡтатҡан. Уның ата-әсәһен батша үҙ янына алдырған. Улар ғүмерҙәренең һуңғы көнөнә саҡлы батша һарайында матур **ғүмер иткәндәр**, ти.

(Башҡорт халыҡ әкиәте)

● **1.** Билдәләнгән һүҙҙәргә синонимдар уйла. **2.** Текстан күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе күсереп яҙ.



Бер тамырҙан яһалған һүҙҙәр тамырҙаш һүҙҙәр була.

2. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙ.

өй, ҡыш, өйлөк, дымлы, өйгә, ҡышлыҡ, өйҙәгесә, дымһыҙ, ҡышҡылыҡҡа, дымла, ҡышла, ҡышын, дымлама, йәм, урманлы, елһеҙ, елле, йәмле, урмансы, ел, йәмлелек, урманһыҙ, елкән, урман, йәмһеҙ

3. Түбәндәге һүҙ яһаусы ялғауҙарҙы ҡушып, яңы һүҙҙәр уйлап тап. Уларҙы төп һүҙ итеп, һүҙбәйләнештәр төҙө.

Өлгө: баш+лыҡ, ғәскәр башлығы.

-лыҡ/-лек, -ҡыс/-кес, -сы/-се, -лы/-ле, -даш/-дәш

24. Телең барҙа — илең бар

1. Уҡы. Илен һөйгән кеше ниндәй булырға тейеш?

Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
Бал ҡортондай, ынйы йыямын,
Йыямын да йәнле ынйыларҙан,
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел —
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..
Халҡым теле миңә — хаҡлыҡ теле, —
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

(Рәми Ғарипов)

● Шиғырҙан һүҙбәйләнештәр күсереп яҙ.

Рәми Ғарипов — Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. «Йүрүҙән», «Таш сәскә», «Һабантурғай йыры» китаптарын тыуған тәбиғәтенә, яҡташтарына арнай. «Осоу», «Аманат», «Миләш-кәләш» йыйынтыҡтарында халыҡтың тарихи яҙмышы, быуындарҙың рухи бәйләнеше тураһында уйланыуҙар, туған телдең һәм мәҙәниәттең киләсәге өсөн борсолоу төп темалар булып тора.

2. Текст нимә тураһында? Интонация буйынса ниндәй һөйләмдәр осраны? Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауын әйт.

Атай, әсәй, икмәк, ҡояш... Ниндәй матур һүҙҙәр! Әйтеү менән үк күңелде **шатлыҡ** солғай. Башҡортостан, Салауат батыр, Урал, Ағиҙел... Нисек ҡәҙерле улар!

«Ҙур үҫ, кеше бул!» — ти атаң-әсәң. Изге **теләкте** улар туған телдә әйтә. Һин — атаң-әсәң балаһы. **Атайың** менән әсәйең — үҙ халҡының балалары.

Халыҡ бер ил булып йәшәй, ә милләт — бер телдә һөйләшкән халыҡ. Тел — **халыҡтың** иң ҙур хазинаһы.

(Хәсән Назар)

● **1.** Биш һүҙбәйләнеш күсереп яҙ. **2.** Биш һүҙҙең тамырын һәм ялғауын билдәлә.

3. Мәҡәлдәрҙе уҡы. Исемдәрҙе бәйләнеп килгән һүҙҙәре менән күсереп яҙ.

1. Тел — күңел көҙгөһө. 2. Тел ташты иретә. 3. Йөрәктән сыҡмаған һүҙ йөрәккә кермәҫ. 4. Кешенең белемен һүҙенән аңларһың.



4. Һүҙҙең тамырын ялғауынан һыҙыҡса аша айырып яҙ.

Өлгө: ҡош-со.

ҡошсо, сөгөлдөрсө, аҡыллы, белемле, күлһеҙ, осло, көслө, аҡлыҡ, йүкәлек, белгес, белем, һыулы, һыуһыҙ, аҙналыҡ

5. Яһаусы ялғауҙар ҡушып, яңы һүҙҙәр төҙөп яҙ.

-сы/-се, -ҡыс/-кес, -даш/-дәш

25. Йәмле Ағиҙел буйҙары

1. Тексты өлөштәргә бүл, планын төҙө.

Ағиҙел Учалы районы Яңы Хөсәйен һәм Байһаҡал ауылдары эргәһендә бәләкәй генә **шишмәнән** башлана. Ул башланған ерендә бала-саға ла атлап сығырлыҡ тар ғына. Шул тиклем һыуҙы ҡайҙан ала һуң? Күп йәшәгән, күпте белгән бабай:

— Һеңлеләренән ала уны, — ти. — Һеңлеләре бик күп уның. Өс йөҙләп булыр... Ә апаһы берәү генә — Иҙел... Ағиҙел шул апаһын эҙләп бара.

Беҙҙә **батырлыҡты** — Урал менән, **матурлыҡты** Ағиҙел менән сағыштыралар.

(Әнғәм Атнабаевтан)

● **1.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауын күрһәт. **2.** Синонимдарға, антонимдарға текстан миҫалдар тап.

2. Шиғырҙы уҡы. Ул һиндә ниндәй тойғолар уятты?

Төйәгемә күҙ ташлаһам,
Хәсрәттәрем ҡуҙғала,
Зифа ҡамышын һарғайтып,
Һыуҙар кәмей йылғала.
Эсер һыуҙар ҙа ҡороһа,
Донъябыҙҙан ни ҡала?

(Абдулхаҡ Игебаев)

● Һеҙҙең яҡта ниндәй йылға аға? Уға тиреҫ түкмәйҙәрме? Ағыулы ашламалар аҡмаймы? Ағас, сүп-сар йыйылып ятмаймы? Әгәр шулай булһа, иптәштәрең менән тиҙ арала эшкә тотон! Ололарҙы ла был эшкә йәлеп итегеҙ! Йылғаны бергәләп таҙартығыҙ! Патруль ҡуйығыҙ!

Һүҙ төҙөлөшөнөң схемаһы башҡорт телендә түбәндәгесә була.

тамыр + яһаусы ялғау + үҙгәртеүсе ялғау

3. Түбәндәге һүҙҙәрҙең тамырын, нигеҙен, ялғауын билдәлә.

һандыҡта, күҙәтеүсе, халҡыңды, яҙыусылар, станцияһына, мәктәпкәсә

4. Бирелгән тамырҙан тамырҙаш һүҙҙәр төҙөп яҙ. Һөйләмдәр уйла.

таны, бүл, уй, бел, һыу, батыр

26. Шүлгәнташ мәмерйәһе

1. Уҡы. Һорауҙар төҙө. Иптәшең менән диалог ҡор.

Шүлгәнташ мәмерйәһе — Башҡортостандың Бөрйән районында Ағиҙел йылғаһы ярында урынлашҡан.

Мәмерйәнең ғалимдар өйрәнгән өлөшөнөң оҙонлоғо 3 саҡрымдан ашыу. Унда таш араһынан эзбизташлы һыу тамып барлыҡҡа килгән сталактиттар, сталагмиттар, ҙур залдар, ер аҫты йылғаһы, күлдәр бар.

Мәмерйә өс ҡатлы. Беренсе ҡатын һыу баҫҡан, унан Шүлгән йылғаһы аға. Икенсе һәм өсөнсө ҡатта ҙур залдар бар. Улар ер аҫты күленә барып тоташа.

Шүлгән йылғаһы мәмерйә эсендә ер аҫтына инеп юғала һәм шишмә булып, шаулап мәмерйә ауыҙынан килеп сығып, Ағиҙелгә ҡушыла. Ул ҡышын да туңмай.

Мәмерйәнең һәр ҡатында үҙенә генә хас температура, дымлылыҡ режимы һәр саҡ һаҡлана. Шуға мәмерйәлә боронғо һүрәттәр юғалмаған. Һүрәттәр ҡыҙҙырылған майҙа иҙелгән ҡыҙыл һәм һары буяу менән яһалған.

(«Мәктәп календары»нан)

● **1.** Был мәмерйәлә булғаның бармы? Һеҙҙең яҡта ниндәй мәмерйәләр бар? **2.** Мәмерйәлә ниндәй ҡағиҙәләрҙе һаҡларға кәрәк? **3.** Текстан ҡушма, тамыр, яһалма һүҙҙәргә миҫалдар табып яҙ.



2. Тәүҙә яһалма, һуңынан ҡушма һүҙҙәрҙе һайлап яҙ.

1. Боҙлауыҡ, боҙло. 2. Ашҡаҙан, ашлама, ашлыҡ, ашъяулыҡ. 3. Алмағас, ағаслыҡ, ҡарағас, ағасһыҙ. 4. Ҡанатлы, ҡыҙылғанат, ярғанат.

● Ҡушма һүҙҙәрҙән торған ер-һыу атамаларын иҫеңә төшөрөп әйт.

? **3.** Башватҡыстан ҡушма һүҙҙәрҙе тап. Улар менән һөйләмдәр төҙө. Үҙең дә шундай башватҡыстар төҙөп ҡара.

1)

2)

3)

4)

27. Асылыкүл — Башҡортостан ынйыһы

1. Уҡы. Легенданы һөйләргә әҙерлән. Ер-һыу атамаһы менән бәйле ниндәй легендалар беләһең?

Был күл элек булмаған. Буранғол ауылы аша Асылы тигән йылға аҡҡан. Ул Сәрмәсәнгә барып ҡойған. Күл **урынында** Ташлытау исемле тау ҡалҡып торған. Бөтә тирә-яҡты ҡара урман ҡаплаған булған.

Бер нисә мең йыл элек, йәйге **көндәрҙең** береһендә, тау артынан ҡара болот ҡалҡҡан. Күк күкрәп, дауыл уйнап, көслө ямғыр ҡоя башлаған. Ямғырҙан һуң Асылы йылғаһы ташып, ауылды баҫып киткән. Төнөн тағы ла көслөрәк күк **күкрәгән,** йәшен йәшнәгән. Бөтә ер һелкенеп торған. Кешеләр һәм **хайуандар** ҡурҡыуҙан ни эшләргә белмәгәндәр.

Иртәгәһен ҡараһалар, Ташлытауҙың уртаһы убылған да, шул урында ҙур күл барлыҡҡа килгән. Асылы йылғаһы ағышын бороп, шул күлгә ҡоя башлаған. Күлде Асылыкүл тип атағандар.

● **1.** Ҡушма һүҙҙәрҙе тап. Улар нисек яһалған? **2.** Биш һүҙбәйләнеш күсереп яҙ. Төп һәм эйәреүсе һүҙҙе билдәлә. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын, нигеҙен, ялғауын әйт.



2. Ҡушма һүҙҙәрҙе уҡы. Яһалыу ысулы буйынса төркөмдәргә бүлеп яҙ.

Аҡъяр, Ҡыҙылъяр, БДАУ, Турғай күле, мал-тыуар, тимер-томор, Таңатар тауы, тирә-яҡ, аҙыҡ-түлек, тимгел-тимгел, кейем-һалым, аш-һыу, төньяҡ, улаҡ-улаҡ, БДУ, аң-белем, көнсығыш, көнбайыш, ҡырғаяҡ, буй-буй, Аҡбаш ауылы, РФ

3. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуйып яҙ.

ҡул...яулыҡ, аш...яулыҡ, ал...япҡыс, ар...яҡ, бир...яҡ, Аҡ...яр, Ҡыҙыл...яр, төн...яҡ, көн...яҡ, Ҡара...ош, ҡара...ас, алма...ас, бал...алаҡ, Гөл...ямал, Аҡ...юл, А...иҙел, Хәбиб...ямал

● Был һүҙҙәрҙе яҙыр өсөн ниндәй ҡағиҙәләрҙе белергә кәрәк?

28. Талҡаҫ күле

1. Текстың төрөн билдәлә.

Юлдаш менән Ҡыҙырас, күл янына килеп еткәс, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙолар. Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.

Яр ситендәге ҡуйы ҡамыштар өҫтөндә ҡыр өйрәктәре өйөрөлә. Аҡсарлаҡтар, сыр-сыу килеп, күл уртаһында әйләнә, суртандан ҡасып, өҫкә һикергән балыҡтарҙы аулай. Күлдең уртаһында, алыҫта, күкһел томан эсендә, бәләкәй генә ҡара нөктә булып, Уртаташ күренеп ята.

Малайҙар һыу инеп алдылар ҙа, кәмәгә ултырып, Уртаташҡа ҡарай йөҙөп киттеләр.

Кәмә Уртаташтың ослайып сығып торған гранит ҡаяһына килеп төртөлдө. Уға кәмәне бәйләп ҡуйҙылар ҙа Уртаташ утрауын күргә булдылар. Уртаташ — өҫтө-өҫтөнә өйөлөп ятҡан гранит таштарҙан торған ҡая ине. Малайҙар уны буйға ла, арҡырыға ла йөрөп сыҡтылар. Ҡаяның урындыҡ һымаҡ йәйелеп ятҡан киң, яҫы ташына баҫып, күл өҫтөнә оҙаҡ ҡарап торҙолар.

(Зәйнәб Биишеванан)

● **1.** Текстан ҡушма һүҙҙәрҙе күсереп яҙ, нисек яһалыуын аңлат. **2.** Беренсе абзацтағы һәр һүҙҙең ижек, өн, хәреф һанын әйт. **3.** Яһалма һүҙҙәргә миҫалдар килтер. **4.** Һеҙҙең яҡта ниндәй күлдәр бар?

Зәйнәб Биишева — Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, прозаик, шағирә, тәржемәсе. Замандаштары тураһында повестар һәм хикәйәләр, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн пьесалар һәм әкиәттәр авторы. Балалар өсөн «Партизан малай», «Көнһылыу», «Дуҫ булайыҡ» повестарын, «Серле ҡурай», «Ел-ел арбам» әкиәттәрен ижад иткән.

● Зәйнәб Биишева тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте Интернет селтәренән табып уҡы.

2. Юғарыла уҡылған текстан нәҙек һуҙынҡылы, ҡалын һуҙынҡылы; яңғырау тартынҡылы һәм һаңғырау тартынҡылы бишәр һүҙ күсереп яҙ. **Е, ю, я** хәрефтәре осраған һүҙҙәрҙе табып уҡы. **ь, ъ** хәрефтәре булған һүҙҙәргә миҫал килтер.

3. Өндәр һәм хәрефтәр тураһында ошо схемаға таянып һөйлә.



? **4.** Һулдан уңға, уңдан һулға бер төрлө уҡылған һүҙҙәр **палиндромондар** тип атала. Һин шундай һүҙҙәр беләһеңме? Класта ярыш ойоштороғоҙ. Кем күберәк һүҙ табыр икән?

Өлгө: ата, сос, кәрәк.

29. Аҡкүл

1. Текстың планын төҙө, һөйләргә әҙерлән.

Беҙҙең ауылдан ике генә саҡрым алыҫлыҡта ай кеүек түңәрәк, көмөш тәңкә кеүек ялтырап ятҡан бер күл бар. Аҡкүл тип йөрөтәләр уны. Күлдең киңлеге 5—6 саҡрым, уның бер яғынан икенсе яғында булған нәмәләр күҙгә саҡ-саҡ күренәләр ине.

Йәй көндәрендә күлдең тирә-яғы йәшел үләндәр менән ҡаплана. Алыҫ түгел тау башынан ҡарағанда, был күл йәшел балаҫ өҫтөндәге түңәрәк көҙгө кеүек ялтырап ята.

Май айы етеү менән, күлдең тирә-яғында кешеләр ҡайнаша башлайҙар. Бында тирә-яҡтағы ауылдарҙан әллә ни тиклем халыҡ йыйыла. Улар шунда уйнап-көлөп, ял итеп көн үткәрәләр.

Кисен күл тирәләй үскән ҡамыштар, талдар араһында төрлө ҡоштар бөтә туғайҙы яңғыратып һайрайҙар.

Күл яны йәй буйына шулай йәмле, күңелле булып торһа ла, көҙ яҡынлашып һалҡын елдәр иҫә башлау менән, йәнлелек юғала. Күл тынып, моңһоуланып ҡала. Ҡыр өйрәктәре һәм башҡа ҡоштар йылы яҡҡа китәләр.

Аҡкүл был саҡта көньяҡҡа китеп барыусы ҡоштарҙың туҡтап, ял итеп китә торған урынына әүерелә. Ҡоштар өйөр-өйөр булып килеп төшәләр, йыуыналар, хәл йыялар һәм тағы ары осоп китәләр. Уларҙың ҡаңғылдашҡан тауыштары ғына Аҡкүлгә йәм биреп тора.

(Мәжит Ғафури)

● **1.** Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡыларҙан, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙан торған һүҙҙәрҙе тап. **2.** Ҡушма һүҙҙәрҙе күсереп яҙ, яһалыу юлын аңлат. **3. Е, ю, я** хәрефтәре осраған һүҙҙәрҙе табып яҙ. Һүҙҙәрҙә улар нисә өн аңлаталар?



Мәжит Ғафури — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә күп көс һала. Үҙенең шиғырҙарында халыҡты азатлыҡҡа, тормошто үҙгәртеү өсөн көрәшкә өндәй. «Ҡара йөҙҙәр», «Тормош баҫҡыстары», «Шағирҙың алтын приискыһында» повестарын ижад итә. Уның исемен хәҙер урамдар, Өфөнөң төп ҡала мәҙәниәт һәм ял паркы, Башҡорт дәүләт академия драма театры йөрөтә.

● Мәжит Ғафури тураһында Интернет селтәренән тулыраҡ мәғлүмәт тупла, китаптары менән таныш.

2. Таблицаны ҡара. **Е, ё, ю, я** хәрефтәре һүҙҙең ҡайһы урынында килгән? Улар ниндәй өн белдерәләр? Һығымта яһа.

Һүҙ башында	Һүҙ уртаһында	Һүҙ аҙағында
ебәк	дәреслек	егерме
ёлка	шофёр	мумиё
юлбарыҫ	салют	меню
ял	ҡуян	буя

3. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып, күсереп яҙ. Шул һүҙҙәр менән ике һөйләм төҙө.

...меш, акт...р, но...брь, шахт...р, ок...ан, ...корь, рак...та, ...лдаш, донъ..., ...рған, ба...ғы, ...рамал, ...билей, г...ктар, и...нь, в...лосипед, ҡа..., к...ш...ләр, самол...т, сал...т, щ...тка, ...лбаҫар

30. Гүзәл Дим йылғаһы

1. Уҡы. Һөйләм киҫәктәрен әйтеп сыҡ.

Урманлы тау итәге. Йәшел ағастар һәм сәскәле үләндәр менән ҡапланған уйһыулыҡ. Сутылдашып һандуғастар һайраша. Саф һауа күкрәктәрҙе киңәйтә. Бына ошо ерҙә гүзәл Дим йылғаһы башлана ла инде. Башҡортостандың Фёдоровка районынан байтаҡ ер ағып, Дим ҙур йылғаға әйләнә лә Ырымбур өлкәһенә сыға. Уға башҡа шишмәләр һәм йылғалар ҡушыла. Дим Башҡортостандың Бишбүләк, Миәкә, Әлшәй,

Дәүләкән, Шишмә, Өфө райондарын үтеп, Ағиҙелгә килеп ҡоя.

(«Башҡортостан» газетаһынан)

● **1.** Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе табып яҙ. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып тора? **2.** Картанан Дим йылғаһын табып, уның аҡҡан юлын өйрән. Уға ниндәй йылғалар ҡоя? **3.** Текста күсмә мәғәнәләге һүҙҙәр бармы?

2. Ҡайһы бағаналағы һүҙҙәргә һорау ҡуйып булмай?

кеше, ҡош, йылға, аға,	менән, өсөн, да, дә, та,
уралып, шәп, сылтырай	һәм, ләкин

3. Тасуири уҡырға өйрән.

Мин Димдәге балыҡтар менән әңгәмәләшергә яратам. Һөйләшеү күберәк Тирәк аҫты тигән урында була. Бында төрлө-төрлө балыҡтар йыйыла. Ҡорбан да, ҡушбаш та, ҡарағанат та бар унда. Вағыраҡтары ситтә генә урала. Әрерәктәре эстәрәк йөҙә. Ә суртан менән һыла тәрән ерҙе байҡай. Мин яр башына киләм дә:

— Шәпмеһегеҙ, балыҡтар! — тим.

— Сәп, сәп, сәп! — тип сәпелдәй бәләкәстәр. «Ш» өнөн әйтә белмәй шул улар.

— Шәпбеҙ, шәпбеҙ! — тип шаптырлап алалар ҙурыраҡтары.

— Һиңә шатбыҙ! Һиңә шатбыҙ! — тип сәләмләйҙәр әре суртандар, һыуҙан шамбыр-шомбор һикерешеп.

(Мостай Кәрим)

● **1.** Зәңгәр төҫ менән ярҙамсы һүҙҙәр бирелгән. Улар ни өсөн кәрәк? **2.** Текстың тәүге өлөшөн күсереп яҙ, ярҙамсы һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ.

Мостай Кәрим — Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.



Ул бик күп шиғырҙар, проза һәм драматургия әҫәрҙәре авторы. Балалар уның «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Өс таған» повестарын яратып уҡый.

● Мостай Кәрим тураһында тулыраҡ мәғлүмәт тупла, китаптары менән таныш.

Иң, бик, ныҡ, үтә, ифрат, бигерәк, өсөн, сөнки, ғына, генә, да, дә, ҙа баһа, дә баһа, ләкин, хатта — ярҙамсы һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәр айырым яҙыла, уларға һорау биреп булмай. Уларҙы ялғауҙар менән бутарға ярамай.

31. Ирәндек

1. Әкиәтте уҡы. Текстың планын төҙө, һөйләргә әҙерлән.

Борон заманда бабай менән әбей йәшәгән, ти. Уларҙың Оморҙаҡ исемле улдары булған. Бабай үлеп киткән. Әбей улы менән тороп ҡалған. Оморҙаҡ бер байға ялсы булып эшкә ингән. Аҙна буйы бай уға бер эш тә ҡушмай, ти.

— Тик ятыу ялҡытты бит әле, бай ағай. Берәй төрлө эш булмаҫмы? — тип һораған Оморҙаҡ.

— Бар, көтөүҙән бер ҡыҙыл быҙауҙы һуйып, тиреһен һыҙырып алып ҡайт, — тигән бай. Был эш үтәл-

гәс, бай өс тоҡ табып **килтерергә** ҡушҡан. Шунан улар ат егеп, тауға сығып киткәндәр, ти.

Ҡаятауға барып еткәс, аттан төшөп, бай тирене ергә һалып Оморҙаҡҡа тирегә төрөнөп ятырға ҡушҡан. Бай тирене ҡайыш менән тиҙ генә уратып бәйләп ҡуйған.

Күп тә үтмәгән тау башынан ҙур бөркөттәр килеп сыҡҡандар ҙа, **тырнаҡтары** менән тирене әләктереп, Ҡаятау башына күтәрелгәндәр. Улар тирене өҙгөләй **башлағандар**. Тире эсенән кеше килеп сыҡҡас, бөркөттәр осоп киткәндәр.

— Ниңә ҡатып тораһың? Аяҡ аҫтындағы алтын-көмөштәрҙе, аҫыл таштарҙы ташла бында, — тип ҡысҡырған бай.

Оморҙаҡ аҫыл таштарҙы ташлаған, бай тоҡтарға тултырған:

— Мин һине аҙна буйы эшләтмәй **ашаттым**, был таштарың шуның өсөн булыр. Тирә-яғыңа ҡара әле — унда һинең кеүектәрҙең **һөйәктәре** тулып ята, — тип ҡысҡырған бай.

Оморҙаҡ Ҡаятауҙан төшөр юл эҙләп ҡараһа ла, уңайлы урын таба алмаған. Өс көн, өс төн үткән, арып, хәлдән тайып йығылған. Шул саҡ ике бөркөт бер бүрене алып менгәндәр, уны өҙгөләй башлағандар. Бөркөттәрҙе ҡурҡытып, бүренең тиреһен тунап, уға уранып ятҡан Оморҙаҡ.

Күп тә үтмәй, теге ике бөркөт яңынан осоп килгәндәр, тирене өҙгөләй башлағандар. Оморҙаҡ ҡулдарын сығарып, бөркөттәрҙең **аяҡтарынан** әләктереп алған. Бөркөттәр ҡурҡып осоп киткәндәр ҙә, Уралдың бер бейек еренә килеп ҡунғандар. Оморҙаҡ ҡыуанысынан:

«Хәҙер инде Өйрәндек!» — тип ҡысҡырып ебәргән, ти. Шул көндән башлап был тауҙы Ирәндек тип атағандар.

● **1.** Әкиәт нимәгә өйрәтә? Төп фекерен әйт. **2.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер. **3.** Текстан ярҙамсы һүҙҙәрҙе табып уҡы. **4.** Зәңгәр төҫ менән бирелгән өҙөктө күсереп яҙ, һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ. **5.** Текстан тамыр, яһалма, ҡушма һүҙҙәрҙе тап. Уларҙа ижек, өн, хәреф һанын әйт.

2. Бирелгән һүҙҙәргә өлгөгә ярашлы анализ эшлә.

Өлгө: Урал [У-рал] — 4 хәреф, 4 өн, 2 ижек.

У [у] — һуҙынҡы, ҡалын, баҫымһыҙ.
р [р] — тартынҡы, яңғырау, парһыҙ.
а [а] — һуҙынҡы, ҡалын, баҫымлы.
л [л] — тартынҡы, яңғырау, парһыҙ.

тире, бейек, аяҡ, Ҡаятау

3. Тексты уҡы, һөйләргә әҙерлән.

Донъяның иң бейек нөктәһе Гималай тауҙарында Джомолунгма түбәһе. Уның бейеклеге 9 километр самаһы. Рәсәйҙә иң бейек нөктә — Эльбрус тауы. Ул Кавказда урынлашҡан. Бейеклеге биш ярым километрҙан ашыу. Башҡортостанда иң бейек нөктә — Ямантау. Ул Урал тауҙары теҙмәһенә инә. Бейеклеге 1640 метр. Ул Белорет районында урынлашҡан.

● **1.** Текстан ярҙамсы һүҙҙәрҙе тап. **2.** Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе табып уҡы. **3.** Был тауҙарҙы картанан ҡара. Улар тураһында күберәк мәғлүмәтте Интернет селтәренән ҡарап бел.

32. Шихандар — тәбиғәт һәйкәлдәре

1. Тексты уҡы.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендә Йөрәктау, Ҡуштау, Шахтау һәм Торатау исемле тауҙар — шихандар бар. Улар үҙенсәлекле тәбиғәт ҡомартҡылары. Борон был урындарҙа диңгеҙ булған. Белгестәр әйтеүенсә, шихандар 260 миллион йыл элек һыу аҫтында барлыҡҡа килгән һәм әлегә тиклем һаҡланып ҡалған коралл рифтары.

Дүрт шихандың иң тәпәше, ләкин иң текәһе Йөрәктау, уның оҙонлоғо бер километр. Икенсе шихан — Ҡуштау, оҙонлоғо 3 км 500 метр. Был тауҙы тулыһынса тиерлек урман ҡаплаған. Әлеге ваҡытта унда ял йорттары урынлашҡан. Өсөнсөһө — Торатау шиханы. Дүртенсе шихан — эзбизташы алынып бөткән Шахтау. Бөгөнгө көндә тау урынында таш карьер ғына ҡалған.

Был тауҙарҙа башҡа ерҙә булмаған үҫемлектәр һәм бөжәктәр бар. Шунлыҡтан уларға дәүләт тарафынан тәбиғәт ҡомартҡыһы исеме бирелгән һәм улар махсус һаҡлауға алынған.

(«Башҡортостан» энциклопедияһынан)

● **1.** Шихандар ҡайҙа урынлашҡан? Был тауҙарҙа булғаның бармы? Уларҙы нисек һаҡларға кәрәк? **2.** Һүҙ төркөмдәренә өҫәр миҫал яҙ.

2. Таблицаны ҡара. Һүҙ төркөмдәре менән таныш. Миҫалдар килтер.



3. Һүҙ төркөмдәренә бүлеп яҙ.

шифахана, беҙ, әкиәт, бөҙрә, йылы, ҡала, өс, ҙә, бигерәк, ошо, сәпелдәй, тота, йәшел, сәскәле, шахтёр, көньяҡ, тау, йыл, менән, йүгерә, асыулана, ҡарт, халыҡ, меңдәрсә, егет, ярата, һуҡыр, төйәк, илай

4. Легенданы уҡы. Һөйләргә әҙерлән.

Айһылыу исемле ҡыҙ менән Ханбулат исемле егет бер-береһен яратҡандар. Иң уҫал, иң һаран, иң ҡанһыҙ Типтеғол бай яусы ебәргәс, ҡыҙҙың атаһы уны бишенсе бисәлеккә бирергә риза була.

Туй алдынан Ханбулат ҡыҙҙы урлап ҡаса. Типтеғол бай ныҡ асыулана, егеттең йөрәген һурып алып, эткә ашатам, тип ант итә.

Ҡыҙ менән егет йәй буйы тау-таш араһында ҡасып йәшәй. Һыуыҡтар башланғас, йәшерен генә ауылға ҡайталар. Типтеғолдоң ҡуштандары Ханбулатты тотоп алып байға илтәләр. Ул тау итәгендә егеттең йөрәген соҡоп ала. Бер бөркөт килеп сығып йөрәкте үҙ төйәге — бейек тауҙарға алып китә.

Айһылыу һөйгәнен эҙләп таба. Өс төн, өс көн илай. Ул үҙенең йөрәген һурып алып, Ханбулаттың күкрәгенә һала. Егет терелә. Үҙе һәм һөйгәне өсөн үс ала. Бына шуға күрә Йөрәктау тип исем биргән халыҡ был тауға.

(«Башҡорт халыҡ ижады» китабынан)

● **1.** Текстан үҙ аллы һүҙ төркөмдәренә өсәр миҫал яҙ. **2.** Синонимдарға, антонимдарға, омонимдарға текстан миҫалдар эҙлә. **3.** Ҡушма һүҙҙәрҙе тап. Улар нисек яһалған? **4.** Яһалма һүҙҙәргә миҫалдар килтер.

33. Янғантау — шифалы тау

1. Уҡы. Текстан исемдәрҙе күсереп яҙ.

Янғантау **шифахана**һы тәпәшәк кенә бер тауҙа урынлашҡан. Тауҙың **бейеклеге** ни бары 413 метр. Бынан күп йылдар элек унан эҫе газ һәм пар сыға башлаған. Башта, **эҫелек** бик көслө булғанда, унда юнысҡы ташлаһаң, ул ялҡынланып яна башлаған. Хәҙер инде эҫелеге 35 градустан артмай.

Тауҙың шифалы булыуын борон бер **көтөүсе** ҡарт асҡан. Уның аяҡтары нык һыҙлаған, ошо тау буйында көтөү көткәндә, **һыҙлауына** түҙә алмайынса, аяҡтарын газ һәм пар сыҡҡан ергә ҡуйып йылыта торған булған. Шулай ул көн дә, көтөүен ошо тау битенә ебәреп, аяҡтарын тау ярығында йылытҡан. Оҙаҡламай аяҡтарының һыҙлауы баҫылған.



1937 йылда бында шифахана асылған. Кешеләр унда дауаланып, **һауығып** ҡайталар.

(Ғәйнан Әмириҙән)

● **1. Йылдар, юнысҡы** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа. **2.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер. **3.** Ике һөйләмде күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәрен билдәләп, аҫтына һыҙ. **4.** Һеҙҙең ауылдан (ҡаланан) Янғантау шифаханаһына нисек барып була? Картанан ҡарап, маршрут төҙө.

Яңғыҙлыҡ исемдәргә кеше исемдәре, фамилиялары, хайуан ҡушаматтары, ер-һыу, район, ҡала атамалары, газета-журнал исемдәре һәм башҡалар инә.
Уртаҡлыҡ исемдәргә бер төрлө предметтарҙың, күренештәрҙең, йән эйәләренең дөйөмләштерелгән атамаһы инә.

2. Тексты уҡы. Һорауҙар төҙөп, иптәшең менән әңгәмә ҡор.

Янғантау шифаханаһынан йыраҡ түгел ерҙә Ҡорғаҙаҡ йылғаһы аға. Был сығанаҡ ҡышын да туңмай. Ундағы һыуҙың температураһы йыл әйләнәһенә 16—18 градус була. Һыуы шифалы: ашҡаҙан, эсәк һәм бөйөр ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланыла.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Исем тураһында белгәндәреңде иҫкә төшөр. **2.** Һеҙҙең яҡта ниндәй шифалы шишмәләр бар? Уларҙы һаҡлау өсөн ниндәй эштәр ойоштороlған?

3. Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе иғтибар менән уҡы. Ҡушма һүҙҙәр нисек яһалған? Диктант яҙырға әҙерлән.

Башҡортостан, республика, баш ҡала, нефть, хазина, Ағиҙел йылғаһы, Ҡариҙел йылғаһы, Ишембай һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары, Ирәмәл һәм Ирәндек тауҙары, Бишҡайын һәм Дүртөйлө ауылдары, Йоматау һәм Янғантау шифаханалары, Ҡандракүл, Асылыкүл

4. Исем һәм ҡылым һүҙ төркөмдәренә ҡараған омонимдарҙы тап. Иптәшең менән ярыш ойоштор. Мәҫәлән: ат — ат.

34. Уралып ятҡан Уралда...

1. Билдәләнгән һүҙҙәр нимә менән үҙгәргән? Нисәнсе затта тора?

Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау,
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Уралтау.
Сыңыр-сыңыр сыңраған
Йылҡыһы күп Уралтау,
Мөңөр-мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Уралтау.

(Ҡобайырҙан өҙөк)

2. Тексты уҡы.

Сәсәндәр

Сәсәндәр элек-электән тәрән аҡыллы, тура һүҙле, ҡыйыу кешеләр булғандар. Ябай халыҡ уларҙа үҙенең яҡлаусыһын да, кәңәшсеһен дә, тәрбиәсеһен дә күргән. Халыҡ уларҙың һүҙҙәрен һәм йырҙарын йотлоғоп тыңлаған, фәһем алған, уларға ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән.

Сәсән һөнәрен, ижадын наҡлау өсөн сәсәндәр бәйгеһе үткәрелгән. Тарихта башҡорттоң Ҡобағош сәсән менән ҡаҙаҡ аҡыны Бисәнбайҙың әйтеше тураһында мәғлүмәт бар. Был бәйгелә Ҡобағош сәсән еңеп сыҡҡан. Ул һүҙ оҫтаһы ғына түгел, йырсы ла, ҡурайсы ла булған.

Данлыҡлы сәсәндәр халҡыбыҙҙың бай һәм героик тарихын сағылдырған «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола» һәм башҡа ҡобайырҙарын телдән телгә,

быуындан быуынға еткереп, бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлап алып ҡалғандар. Сәсәндәр булмаһа, беҙ бөгөн бындай ҡиммәтле мираҫ менән таныша алмаған булыр инек.

(Берйән Байымовтан)

● **1.** Текстан һүҙ төркөмдәренә өсәр миҫал күсереп яҙ. **2.** Ярҙамсы һүҙҙәр бармы? **3.** Исемдәрҙең күплек ялғауҙарын хәтереңә төшөр. Күплектә торған исемдәрҙе табып уҡы.

3. Тейешле күплек ялғауҙарын ҡуйып ҡобайырҙан өҙөктө уҡы.

Был донъянан кем ҡалыр?

Сәсән...ҙән тел ҡалыр,
Яҡшы...ҙан зат ҡалыр,
Яҡшы затлы ат ҡалыр,
Батыр...ҙан дан ҡалыр,
Һөйләп халыҡ таң ҡалыр.

● **1.** Билдәләнгән һүҙҙәргә антонимдар уйла. Уларға фонетик анализ яһа. **2.** Китапхананан «Башҡорт халыҡ ижады» сериянынан китап алып, ҡобайырҙар менән таныш.

35. «Урал батыр» эпосы

1. Уҡы. Текстың планын төҙө.

«Урал батыр» эпосы — башҡорт халҡының һоҡланғыс ауыҙ-тел ижады өлгөһө, бөйөк **ҡомартҡыһы**.

«Урал батыр» эпосы өс өлөштән, туғыҙ бүлектән тора. Ул бөтә донъяны һыу баҫыу осоронан алып **кешеләрҙең** йәшәйешен һүрәтләгән иң ҙур ҡобайыр. Тәү кешеләр — Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡтың

тормошо, уларҙың улдары Урал һәм Шүлгән тураһында, артабан Урал һәм Шүлгәндән тыуған тоҡомдоң тормош юлы тасуирлана. Яҡшылыҡтың яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшен, яуызлыҡҡа ер йөҙөндә урын юҡлығын һәм уның еңелеүен иҫбатлай. **Башҡорттарҙың** төйәге булған Уралтауҙың барлыҡҡа килеүе тураһында ла һөйләй.

Мөхәмәтша Буранғолов «Урал батыр» эпосын 1910 йылда хәҙерге Башҡортостандың Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылында мәшһүр сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып ала. «Урал батыр» эпосы төрлө йылдарҙа рус, инглиз, немец, венгер, төрөк, фин, абхаз, әзербайжан телдәренә тәржемә ителеп баҫылған.

(«Башҡортостан» энциклопедияһынан)

● **1.** Текстан антонимдарҙы табып яҙ. **2.** Тиң киҫәктәр бармы? Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгәндәр? **3.** Ниндәй яңғыҙлыҡ исемдәр осраны? Улар нимә аңлаталар? **4.** Яһалма һүҙҙәргә миҫалдар әҙлә. **5. Шүлгән, Урал** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа. **6.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер.

2. Таблицаны ҡара. Эйәлек затының берлектә үҙгәреүен күҙәт.

Исемдәрҙең эйәлек заты менән берлектә үҙгәреше					
		һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
1-се зат минең	һүҙ	а, о, у, ы	о — о	ә, ө, ү, и, е (э)	ө — ө
	тарт. бөтһә	атай-ым	ҡо-лон-ом	әсәй-ем	өй-өм
	һуҙ. бөтһә	алма-м	борғо-м	сейә-м	бөрө-м

2-се зат һинең	тарт. бөтһә	атай-ың	ҡолон-оң	әсәй-ең	өй-өң
	һуҙ. бөтһә	алма-ң	борғо-ң	сейә-ң	бөрө-ң
3-сө зат уның	тарт. бөтһә	ата-һы	ҡолон-о	әсә-һе	өй-ө
	һуҙ. бөтһә	алма-һы	борғо-һо	сейә-һе	бөрө-һө

- **Һомай, Самрау, Ҡояш, Ай, Иҙел, Яйыҡ, Аҡбуҙат** һүҙҙәренә зат ялғауҙары ҡушып яҙ.

Предметтарҙың кемдеке йәки нимәнеке булыуын **эйәлек заты** белдерә.

3. «Урал батыр» эпосынан өҙөктө уҡы. Эйәлек заты ялғауы булған һүҙҙәрҙе тап.

Ҡулым тейгән мөгөҙөң
Кәкерәйгән көйөнсә,
Тешең төшкән ауыҙың
Өҫкө тешең үҫмәйсә,
Айырылған тояғың
Һис тә берекмәйенсә,
Үҙең түгел, балаң да
Мәңге ҡалыр шул көйсә.
Кеше көсөн күрҙең һин,
Хәлһеҙлегең белдең һин,
Кешегә мөгөҙ сайҡама,
Еңермен тип уйлама!

36. Башҡортомдоң улы

1. Уҡы. Салауатты һин ниндәй кеше итеп күҙ алдыңа килтерҙең?

Салауат ҡыш башында яугирҙарға өйҙәренә таралышырға ҡушты. Үҙе ҡатыны һәм улы менән хушлашты:

— Халыҡ ныҡ йонсоно, яҙ еткәс, көрәште яңыртырбыҙ. Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, мин тиҙҙән ҡайтырмын, — тип, саңғыһын кейҙе лә, Урал урмандарына табан юл алды.

Салауат урманда кейек аулап, яҙын яңынан байҙарға ҡаршы көрәшкә әҙерләнеп, йәшенеп йәшәне. Ләкин уны батша һалдаттары һәм шымсылар артынан ҡалмай эҙәрләнеләр. Хатта мәмерйәлә йәшәү ҙә уны ҡотҡара алманы. Бер ваҡыт уны һалдаттар ҡамап алды. Салауат уларға ҡаршы ныҡ һуғышты. Тик яңғыҙы күп һанлы һалдаттарға ҡаршы тора алманы.

Салауатты атаһы менән бергә хөкөм иттеләр. Ҡайһы ерҙә һуғышҡандар, шул ергә икәүһен дә алып барып, аяуһыҙ ҡамсыларға, танауҙарын киҫергә, тимер ҡыҙҙырып биттәренә яҙыу баҫырға һәм ғүмерлеккә һөргөнгә ебәрергә тигән ҡарар сығарҙылар.

Быуаттар үтһә лә, Салауат халыҡ хәтерендә йәшәй. Халыҡ үҙенең батыры тураһында йырҙар йырлай, әҫәрҙәр ижад итә.

(Степан Злобиндан)

● **1.** Текстан һүҙ төркөмдәренә өҫәр миҫал табып, күсереп яҙ. **2.** Күплектә торған исемдәрҙе табып уҡы. **3.** Текстан ярҙамсы һүҙҙәргә миҫалдар килтер.

2. Шиғырҙы уҡы.

Тыуған илем

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым,
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

(Салауат Юлаев)

● **1.** Шағир тыуған илен яратамы? Шул юлдарҙы табып уҡы.
2. Эйәлек заты ялғауы булған һүҙҙәрҙе табып яҙ.

3. Таблицаны ҡара. Эйәлек затының күплектә үҙгәреүен күҙәт.

Исемдәрҙең эйәлек заты менән күплектә үҙгәреше					
		Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
	һүҙ	а, о, у, ы	о — о	ә, ө, ү, и, е (э)	ө — ө
1-се зат беҙҙең	тарт. бөтһә	атай-ы-быҙ	ҡолон-о-боҙ	әсәй-е-беҙ	өй-өбөҙ
	һуҙ. бөтһә	алма-быҙ	һоло-боҙ	сейә-беҙ	бөрө-бөҙ
2-се зат һеҙҙең	тарт. бөтһә	атай-ығыҙ	ҡолон-о-ғоҙ	әсәй-егеҙ	өй-өгөҙ
	һуҙ. бөтһә	алма-ғыҙ	һоло-ғоҙ	сейә-геҙ	бөрө-гөҙ
3-сө зат улар-ҙың	тарт. бөтһә	ата-һы	ҡолон-о	әсә-һе	өй-ө
	һуҙ. бөтһә	алма-һы	һоло-һо	сейә-һе	бөрө-һө

● **Тыуған ил, батыр, йыр, көй** һүҙҙәрен эйәлек затында үҙгәрт.

4. Тексты уҡы.

Айыу менән алыш

Салауат тик һуңғы минутта ғына уның айыу икәненә төшөндө. Ул ағастан һикереп төштө лә, аттың теҙгенен ҡырҡыр өсөн айғырға ташланды. Ләкин ҡырҡып өлгөрмәне. Айыу ҡурҡыныс аҡырып, уға ҡаршы килә башланы. Батыр бысағын ҡыҫып тотоп, дошманды көтөп, урынында ҡатып ҡалды. Бына хәйләр айыуҙың тәненә еңел генә инеп китте. Салауаттың йөҙөнә ҡайнар тын бәрелде. Айыу уның өҫтөнә ауа башланы. Егеттең күкрәге ҡыҫылды, биле һынғандай тойолдо.

Салауат иҫенә килгәндә, уның эргәһендә еңелгән йыртҡыс ята, ә бәйле айғыр ҡурҡҡан күҙенең сите менән ҡарап, тын ғына тора ине.

Салауат ҡайтырға сыҡҡанда, уға бер ҡарт ҡурайсы тап булды. Ул, башын сайҡап, уның йәшен һораны. Салауат: «Ун дүрт йәштә», — тине.

(Степан Злобиндан)

● Һуңғы абзацтағы исемдәргә эйәлек заты ялғауҙарын ҡушып яҙ.

37. Башҡортостан рәссамдары

1. Тексты уҡы. Эстәлеген һөйлә.

Башҡорт һынлы сәнғәтенә нигеҙ һалыусы Ҡасим Дәүләткилдиев райондарға йөрөп, халыҡ тормошон өйрәнә һәм картиналар яҙа. Уның «Яңы Усман ауылы», «Башҡорт өйөнөң күтәрмәһе», «Зәңгәр күлдәкле баш-

ҡорт ҡыҙы», «Башҡорт Ибраһим» картиналары башҡорттарҙың үҙенсәлекле тормошон һәм көнкүрешен сағылдыра.

Ҡасим Дәүләткилдиевтең «Түбә руднигы», «Баймаҡ», «Инйәр заводы» һүрәттәре халыҡ хужалығының үҫешен тасуирлай.

Уның әҫәрҙәре Михаил Нестеров исемендәге художество музейында һаҡлана.

(«Башҡортостан календары»нан)

2. «Зәңгәр күлдәкле башҡорт ҡыҙы» картинаһы буйынса эш.



● **1.** Ни өсөн картинаның исеме **зәңгәр** һүҙе менән бәйләнгән? **2.** Картинаның алғы планында кемде күрәһегеҙ? **3.** Ҡыҙҙың кейемен тасуирлағыҙ. **4.** Ҡыҙҙың йөҙөнә ҡарап, ни әйтергә була? **5.** Арткы пландa ни күрәһегеҙ? **6.** Рәссам был картинаһы менән ни әйтергә теләгән?

3. Тексты уҡы. Кем тураһында белдең?

Әхмәт Лотфуллин картиналарында үҙенең яҡын кешеләрен, ата-әсәһен, ауылдаштарын һынландыра. Улар аша башҡорттарҙың тормошон, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын һүрәтләй. Уның «Әсәйемдең портреты», «Атайымдың портреты», «Ауылда байрам. 1930 йылдар», «Алтын көҙ», «Хушлашыу» картиналары халыҡтың йәшәү шарттарын, кешеләрҙең холоҡ-фиғел һыҙаттарын асып бирә.

Рәссамдың картиналары Мәскәүҙең Третьяков галереяһында, Санкт-Петербургтың Рус музейында, Өфөләге Михаил Нестеров музейында һаҡлана.

Әхмәт Лотфуллин Рәсәйҙең халыҡ, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

4. «Өс ҡатын» картинаһы буйынса эш.

1. Һүрәттә кемдәр төшөрөлгән? **2.** Уларҙың хеҙмәт кешеләре икәнен нимәнән күреп була? **3.** Йөҙҙәре, кейемдәре, йорт-йыһаз әйберҙәре һәм уларҙың төҫтәре нимәләр тураһында һөйләй?

5. Таблицаны ҡара. Ҡағиҙәне иҫкә төшөр? Өлгөгә ҡарап, һүҙҙәрҙе үҙгәртеп яҙ.

минең ҡалағым	минең көрәгем	минең яуабым
һинең ҡалағың	һинең көрәгең	һинең яуабың
уның ҡалағы	уның көрәге	уның яуабы
беҙҙең ҡалағыбыҙ	беҙҙең көрәгебеҙ	беҙҙең яуабыбыҙ
һеҙҙең ҡалағығыҙ	һеҙҙең көрәгегеҙ	һеҙҙең яуабығыҙ
уларҙың ҡалағы	уларҙың көрәге	уларҙың яуабы

Өлгө: ҡармаҡ — ҡармағы.

байраҡ, белəк, бүлəк, һуҡмаҡ, йөрəк, йомаҡ, күнəк, юртаҡ, күлдəк, умарталыҡ, төргəк, туп, еп, элмəк, бүрек, яуап

6. Бирелгəн һүҙҙəрҙе эйəлек затында үҙгəрт.

рəссам, картина, һүрəт, ижад, экспонат, музей

38. Утта янмай, һыуҙа батмай

1. Тексты уҡы. Һорауҙар төҙө.

Башҡорт атлы дивизияһы 1942 йылда ойоштороla. Уның командиры итеп полковник Миңлеғəле Шайморатов билдəлəнə.

Дивизия апрелдə Дим станцияһынан фронтҡа оҙатыла. Ул Курск өлкəһе, Сталинград, Чернигов ҡалалары өсөн ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Атлы дивизия Украина, Белоруссия, Польша ерҙəрен азат итеүҙə батырҙарса һуғыша. Дивизия һуғышты Берлинда тамамлай.

Уның күп егеттəре һуғыш яланында геройҙарса һəлəк булды. Дивизияның һикһəнгə яҡын һуғышсыһына Советтар Союзы Геройы тигəн маҡтаулы исем бирелгəн.

● **1.** Башҡорт атлы дивизияһы тураһында тағы нимəлəр белəһең? Интернет селтəренəн табып уҡы. **2.** Һуңғы абзацты күсереп яҙ, һөйлəм киҫəктəренең аҫтына һыҙ.

2. Йырҙың яҙмаһын тыңлағыҙ. Һүҙҙәрен уҡып сығығыҙ. Йыр һиндә ниндәй тойғолар уятты?

Шайморатов генерал

Ҡадир Даян шиғыры Заһир Исмәғилев музыкаһы

Башҡорттар китте
һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк **Урал**:
Ат уйнатып, алдан бара
Шайморатов генерал.
Совет иле өсөн яуҙа
Кисте **һыуҙы**, уттарҙы:
Дошмандарға ябырыл-
ғанда,
Утлы дауыл ҡуптарҙы.
Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән:
Утта янмай, һыуҙа батмай,
Һай, **батыр** ҙа ир икән.

● **1.** Генерал Шайморатов хаҡында белешмә әҙерлә. **2. Утта янмай, һыуҙа батмай** тигәнде нисек аңлайһың? **3.** Исемдәрҙе күсереп яҙ, килешен, һанын билдәлә.

3. Таблицаны ҡара. Эйәлек заты тағы ла нисек яһала? Һығымта яһа.

Эйәлек ялғауҙары	алмаш+исем	исем+алмаш
дәфтәр+ем	минең дәфтәр	дәфтәр минеке
дәфтәр+ең	һинең дәфтәр	дәфтәр һинеке
дәфтәр+е	уның дәфтәре	дәфтәр уныҡы
ручка+быҙ	беҙҙең ручка	ручка беҙҙеке
ручка+ғыҙ	һеҙҙең ручка	ручка һеҙҙеке
ручка+лары	уларҙың ручкалары	ручка уларҙыҡы

● Таблицаға ҡарап, **батыр, ат, һыу, ил** һүҙҙәрен үҙгәртеп яҙ.

4. Мәкәлдәрҙе уҡы. Мәғәнәләрен аңлат. Исемдәрҙең килешен әйт.

1. Илен ҡурсыған — ил ағаһы. 2. Ил яҙмышы ир ҡулында. 3. Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.

39. Стәрлетамаҡ

1. Уҡы. Текстан исемдәрҙе табып, уларҙың һанын билдәлә.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы — ҙурлығы буйынса Башҡортостанда икенсе урында тора. Ул **Ағиҙел** йылғаһының уң ярында, **Ашҡаҙар** һәм **Стәрле йылға**лары ҡушылған **ерҙә** урынлашҡан. «Стәрле» һүҙе фарсы телендә **һыу** тигәнде аңлата.

Ҡала сода сығарыу, **каучук** эшләү буйынса бөтә **ил** күләмендә танылған.

● **1.** Ҡала тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт туплап, класс алдында сығыш яһарға әҙерлән. **2. Сода, каучук** һүҙҙәре башҡорт теленә ҡайһы телдән ингән? Аңлатмалы һүҙлектән ҡарап әйт. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе әйәлек килештә үҙгәрт. **4.** Һүҙҙәргә фонетик анализ яһа: **Стәрле, халыҡ.**

2. Исемдәрҙең әйәлек килештә үҙгәрешен күҙәт.

Килештәр	Һорауы	Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә			
		а, ә, ы, е, о, ө, я	з, ж, л, м, н, ң	ҙ, р, у, ү, й, и, ю	б, в, г, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, х, һ, ц, ч, ш, щ
төп	кем? нимә?	—	—	—	—
әйәлек	кемдең? нимәнең?	-ның/-нең -ноң/-нөң	-дың/-дең -доң/-дөң	-ҙың/-ҙең -ҙоң/-ҙөң	-тың/-тең -тоң/-төң

● Әйәлек килеш ялғауҙары ҡушып яҙ.

ҡыҙ, ҡорот, ҡағыҙ, үгеҙ, ҡанат, Булат, конверт

? **3.** Һорауҙарға яуап яҙ.

1. Башҡортостандың ниндәй ҡалаһы исемендә өс «а» хәрефе бар?

2. Башҡортостанда ҡайһы ҡалаларҙың исеме «б» хәрефенән башлана?

3. Ниндәй ҡала исемендә «ч» хәрефе бар?

4. Ниндәй ҡала исеме ике яҡтан да бер төрлө уҡыла?

4. Был ҡалалар ниндәй илдәргә ҡарай. Картанан табып яҙ.

Токио ҡалаһында — 13 370 198, Джакартала — 9 607 787, Делиҙа — 16 753 235, Манилала — 1 660 714, Сеулда — 10 010 000 кеше йәшәй. Ҡытайҙа урынлашҡан Чунцин ҡалаһы майҙаны буйынса беренсе урында тора. Уның майҙаны 82 403 квадрат километр. Көнбайыштан көнсығышҡа 470 километрға, төньяҡтан көньяҡҡа 450 километрға һуҙылған.

40. Ишембай — нефтселәр ҡалаһы

1. Текстан исемдәрҙе тап. Уларҙың һанын, килешен билдәлә.

Башҡортостанда нефть булыуын ғалимдар күптән үк белгәндәр. Ерҙе бураулап ҡарағандар, ләкин нефть табылмаған. Тәбиғәт был **хазинаны** бик тәрәнгә йәшергән булған.

Тик 1932 йылда ғына Ишембай ауылы эргәһендә нефть фонтаны урғыла башлаған. Был кескәй генә ауыл хәҙер ҙур һәм матур ҡалаға әйләнгән.

Ишембай **ҡалаһында** нефть эшкәртеү, нефть табыу **ҡорамалдары**, машиналар эшләү заводтары, трикотаж фабрикаһы бар. Унда егәрле, тырыш халыҡ эшләй.

Ишембай ҡалаһы Башҡортостан ҡалалары араһында халыҡ һаны буйынса — һигеҙенсе, майҙаны буйынса етенсе урында тора.

(«Башҡортостан» энциклопедияһынан)

● **1.** Ишембай ҡалаһы тураһында өҫтәлмә мәғлүмәтте Интернет селтәренән, газета-журналдарҙан табып уҡы. **2. Хазина, урғыла** һүҙҙәренә синонимдар тап. **3.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер.

2. Һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙ.

Тора, нефть эшкәртеү, Башҡортостан, буйынса, алдынғы, урында, илебеҙҙә. Ҙур-ҙур, Өфө, Стәрлетамаҡ, заводтар, ҡалаларында, Салауат, һәм, бар.

● Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлат.

3. Таблицаны ҡара. Исемдәрҙең килештәрҙә үҙгәрешен күҙәт.

Килештәр	Һорауы	Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә			
		а, ә, ы, е, о, ө, я	з, ж, л, м, н, ң	ҙ, р, у, ү, й, и, ю	б, в, г, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, х, һ, ц, ч, ш, щ
төбәү	кемгә? нимәгә?	-ға/-гә	-ға/-гә	-ға/-гә	-ҡа/-кә
төшөм	кемде? нимәне?	-ны/-не -но/-нө	-ды/-де -до/-дө	-ҙы/-ҙе -ҙо/-ҙө	-ты/-те -то/-тө

4. Исемдәргә күплек, эйәлек, төбәү, төшөм килеш ялғауҙары ҡуш.

Өлгө: нефть — нефттәр, нефттең, нефткә, нефтте.

фонтан, майҙан, йорт

5. Бирелгән исемдәрҙе төшөм килештә үҙгәрт.

болот, торт, йондоҙ, ҡондоҙ, һалдат, ҡат, балауыҙ

6. Тексты уҡы. Исем бир. Һөйләргә әҙерлән.

Мастер Лебедев йоҡларға әҙерләнеп бөткән ине. Тындары бөткән, йөҙҙәре ағарған ике эшсе уға килеп инде:

— Иптәш Лебедев! Әллә нимә булды скважинала!.. Нимәлер сыға башланы. Һыу тиһәң, һыу түгел. Үҙенең еҫе бик яман...

Мастер эшселәр менән бергә буровойға йүгерҙе. Скважинанан газ ҡатыш нефть бәрә ине.

— Ошо буламы инде нефть тигән нәмә? — тип һоранылар эшселәр.

— Эйе, — тине мастер, киң йылмайып.

Был — 1932 йылдың ғинуары ине.

(Али Карнайҙан)

41. Белорет — металлургтар ҡалаһы

1. Тексты уҡы. Һорауҙар төҙө.

Белорет ҡалаһы 1762 йылда, суйын ҡойоу заводы төҙөлә башлағас, барлыҡҡа килгән. Заводты төҙөү һәм унда эшләү өсөн Волга, Кама буйҙарынан крепост-

ной крәҫтиәндәр килтерелә. Улар араһында Арский тигән помещиктың крәҫтиәндәре лә була. Хәҙерге «Ар ташы» тигән исем тап шул осорҙан һаҡланып ҡалған.

Белорет металлургия заводының тарихында ил тарихы сағыла. Завод крәҫтиәндәре Пугачёв яуында ҙур теләк менән ҡатнаша. 1773 йылдың октябрендә завод баш күтәргән крәҫтиәндәр ҡулында була. Завод биләмәһендә Емельян Пугачёв бер айҙан ашыу йәшәй һәм яу барышы менән етәкселек итә.

Хәҙер Белорет ҡалаһы матур, йәшәү өсөн бөтә шарттары булған ҡала. Белорет металлургия комбинаты бөтә донъяға танылған юғары сифатлы тимер һәм ҡорос сымдар, арҡандар эшләп сығара.

● **1.** Һуңғы һөйләмдең һүҙҙәрен ижектәргә бүлеп, күсереп яҙ. **2.** Исемдәрҙең килешен билдәлә. **3.** Текстан тамыр һәм яһалма һүҙҙәргә миҫалдар табып яҙ. **4.** Яңғыҙлыҡ исемдәр бармы? Улар нимә аңлата?

2. Таблицаны ҡара. Исемдәрҙең килештә үҙгәрешен күҙәт.

Килештәр	Һорауы	Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә			
		а, ә, ы, е, о, ө, я	з, ж, л, м, н, ң	ҙ, р, у, ү, й, и, ю	б, в, г, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, х, һ, ц, ч, ш, щ
урын-ваҡыт	кемдә? нимәлә?	-ла/-лә	-да/-дә	-ҙа/-ҙә	-та/-тә
сығанаҡ	кемдән? нимәнән?	-нан/-нән	-дан/-дән	-ҙан/-ҙән	-тан/-тән

● **Металлургия, тимер, ҡорос, сым, суйын, завод** һүҙҙәрен урын-ваҡыт, сығанаҡ килештәрҙә үҙгәртеп яҙ.

3. Күплек ялғауҙары ҡуйып, тексты уҡы.

Учалы ҡалаһы тау... араһында урынлашҡан. Ҡала үҫә, ҙурая, матурлана. Төҙөүсе... ҙур, бейек йорт... һала... . Матур, иркен мәктәп..., китапхана..., магазин... төҙөлә. Ҡалала ҙур завод... үҫеп сыҡты. Бында мәҙәниәт һарай...ы бар. Ҡала урам...ында ағас..., сәскә... ултыртылған. Учалы халҡы тырышып эшләй, яҡшы ял итә.

● **1.** Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Улар ниндәй һөйләм киҫәге булып килә? **2.** Текстан бер нисә һүҙбәйләнештe күсереп яҙ. Төп һүҙҙән эйәреүсеһенә һорау ҡуй.

42. «Минең ҡалам (ауылым)» проект эше

1. Үҙеңдең ҡалаң (ауылың) тураһында мәғлүмәттәр һәм фотографиялар табып, күргәҙмә хикәйә әҙерлә. Уны китап, стенд, стенгазета, презентация рәүешендә әҙерләргә мөмкин. Эште бер үҙең генә йәки парлашып, төркөмдәргә бүленеп йәки бөтә класс менән башҡарырға була. Проект эшен башҡарыу тәртибе:

— мәғлүмәт йыйыу, уларҙы өйрәнеү, кәрәклеһен һайлап алыу;

— фотографиялар әҙерләү;

— эште дөйөм тәртипкә килтереү;

— сығыш яһау.

2. Эште башҡарырға һиңә ошо план ярҙам итер.

1. Ҡалам (ауылым) тарихы.
2. Төп урамдары.
3. Иҫтәлекле урындары.

3. Үҙеңдең әшкә баһа бир. Проект уңышлы булдымы? Ниндәй ауырлыҡтар осраны? Нимә эшләргә өйрәндең?

4. Класс алдында сығыш яһарға әҙерлән.

5. Проект эшен портфолиола һаҡла.

43. Үҙ илең — алтын бишек

1. Уҡы. Был текст нимәгә өйрәтә? Төп фекерен әйт. Текстың төп фекере ҡайһы юлдарҙа сағыла.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, күп йылдар үткәс, яҙмыш ике башҡортто сит яҡтарҙа осраштыра. Уларҙың береһе һуғыштан һуң бында йәшәргә тороп ҡалған. Икенсеһе, Ишбулла исемле данлыҡлы ҡурайсы, илдәр буйлап йөрөй торғас, ситтә көн күргән яҡташын осрата.

Теге әҙәм үҙенең тыуған ерҙәрен иҫенә төшөрә. «Башҡортлоғом юғалмаһын өсөн мин бейәләр тотам... Миндә ҡымыҙ — башҡорт ҡымыҙы!» — ти.

Ишбулла уға: «Ҡымыҙ, бал — ерҙән килә, ҡурайҙы, ҡумыҙҙы сит ерҙә лә уйнап була, ләкин ер-һыу менән уйнап булмай. Кеше үҙ ерендә ҡәҙерле, уны уға тоғролоҡ тота», — ти.

«Илгә ҡайтмау — милләтеңде юғалтыу түгел әле», — ти икән теге кеше, үҙен аҡларға тырышып.

Беҙҙең кеше шулай шул: Уралын яттарға бирмәгән, үҙе ситкә китмәгән. Үҙ ере өсөн тир түккән, тыуған илем тип янып-көйгән, үҙ телем тип ҡайғырған.

(Хәсән Назарҙан)

1. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе табып яҙ. Уларҙы ни өсөн ҡулланалар?

2. Беренсе абзацтан тәүге ике һөйләмде күсереп яҙ. Һөйләм

киҫәктәренең аҫтына һыҙ. **3.** Текстан омонимдарға миҫалдар килтер. **4. Урал, баяғы** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа. **5. Милләтеңде, башҡортлоғом, ҡайғырмай** һүҙҙәрен составы буйынса тикшер.

2. Һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәрт. Ниндәй ҡағиҙәне иҫкә төшөрҙөң?

педаль, портфель, пристань, табель, слесарь, ноябрь

3. Таблицаны ҡара. Был һүҙҙәрҙең яҙылышын аңлат.

Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә					
-ль	-нь	-брь	-сь	-рь	-чь
нуль	пристань	ноябрь	перепись	лагерь	картечь
нулде	пристандәр	ноябрҙә	переписта	лагерҙа	картечты

1. Бирелгән исемдәргә берлек һандағы төшөм килеш һәм күплек ялғауҙары ҡушып яҙ.

Өлгө: йондоҙ+ҙо, йондоҙ+ҙар.

ҡондоҙ, ҡош-ҡорт, ҡарағош, ҡорот, төҙөлөш

2. Сығанаҡ килеш ялғауҙарын ҡушып яҙ.

ер, Стәрле, сәнәғәт, Ашҡаҙар, ҡала, йылға

3. Урын-ваҡыт килеш ялғауҙарын ҡушып яҙ.

руль, сирень, нефть, октябрь, фонарь, лагерь

4. Ребусты сисһәң, бер мәҡәл уҡырһың.



44. Башҡортостан буйлап сәйәхәт

1. Һорауҙарға яуап биреген.

Һин Башҡортостан тураһында нимә беләһең?

Ул ҡайҙа урынлашҡан?

Баш ҡалаһын әйт?

Башҡортостанда нисә район, нисә ҡала бар?

Иң бейек тауҙы беләһеңме? Уның бейеклеге күпме?

Башҡортостанда ниндәй дарыу үләндәре үҫә? Улар тураһында һөйлә.

Ниндәй файҙалы ҡаҙылма байлыҡтары бар?

2. Әгәр һин гид булһаң, ҡунаҡтарға Башҡортостандың ҡайһы урындарын күрһәтер инең? Улар тураһында һөйлә.

3. Башҡортостан шифаханалары тураһында белешмә әҙерлә.

4. Башҡортостандың тауҙары, йылғалары, күлдәре тураһында һөйлә.

5. Тыуған ил тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһең?

45. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Шиғырҙы тасуири уҡы. Исемдәрҙе тап, затын билдәлә.

Башҡортостан, һин беҙҙең
Тыуған-үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, өй биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.
Тауың бирә һары алтын,
Ерең бирә ҡара алтын.
Балыҡҡа бай һыуҙарың,
Ашлыҡҡа бай ҡырҙарың.
Ағасҡа бай урманың,
Таҡыр һинең юлдарың,
Матур һинең ҡыҙҙарың,
Батыр һинең улдарың.
Башҡортостан, беҙ һине
Һөйәбеҙ, яратабыҙ.
Һин бит тыуған еребеҙ.
Әсәйебеҙ, атабыҙ!

(Гөлфиә Юнысова)

2. Б-п, в-ф, г-к, ғ-ҡ, д-т, ҙ-ҫ, з-с, ж-ш парлы яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларға һүҙҙәр уйлап яҙ.

Өлгө: бала — парта, вагон — флаг.

3. Һүҙҙәрҙең һуңғы тартынҡы өндәрен үҙгәртеп, яңы һүҙҙәр уйлап яҙ.

Өлгө: көл, көт, көҙ.

кит, ер, ҡыш

4. Исемдәр тураһында һөйлә.

5. Һүҙҙәр араһынан исемдәрҙе күсереп яҙ.

класс, мәктәп, йөрөй, ручка, стена, һөйләй, парта, ҡара, бейей, ҡыҙыл, Яҡтыкүл, Гөльямал, килограмм, портфель, уйнай, ҡыш, уйын, Кремль, нефть, тоҙ, тоҙло, тоҙлай, уҡыу, уҡый

● Русса һәм башҡортса бер үк яҙылышлы һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ. Яҙылған һүҙҙәрҙе индереп, ике һөйләм яҙ.

6. Баҡса, нефть, уҡыу, таш, урман, итек, тәрбиә һүҙҙәренән **кем?** һорауына яуап биргән һүҙҙәр яһап яҙ.

7. Килештәр менән үҙгәрт: металл, грамм, кросс, грипп.

IV бүлек. Мин һәм минең ғаиләм

46. Үҙем тураһында

1. Һорауҙарға яуап бир, һуңынан яуаптарыңды дәфтәргә яҙ.

1. Һинең исем-фамилияң нисек? 2. Һин ҡасан һәм ҡайҙа тыуҙың? 3. Ниндәй мәктәптә уҡый башланың? 4. Хәҙер нисәнсе класта уҡыйһың? 5. Дәрестәрҙә ниндәй

билдәләр алаһың? 6. Һин ниндәй дәрестәрҙе яратаһың? 7. Ниндәй түңәрәктәргә йөрөйһөң? Нимә менән ҡыҙыҡһынаһың? Һинең өйҙә кемдәрең бар? 8. Атайыңдың исеме нисек? Әсәйеңдең? 9. Улар ҡайҙа, кем булып эшләйҙәр? 10. Ағайың (апайың) йәки ҡустың (һеңлең) бармы?

2. Тексты уҡы. Һеҙҙең өйҙә иң күңелле көн ниндәй көн? Шул турала хикәйә яҙ.

Икмәк бешкән көн өйҙә иң йәмле көн була. **Әсәйемдең** йөҙө ҡояш кеүек балҡый. Беҙгә өс ҡояш нур һибә. Ҡояш үҙе, ҡабарып бешкән тәмле икмәк, әсәйемдең нурлы йөҙө.

Беҙ икмәктең **валсығын** да әрәм итмәйбеҙ. Бөтәбеҙ ҙә бәләкәстән шулай **өйрәнгәнбеҙ.**

● **1.** Текстан сифаттарҙы тап. Улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә? **2.** Исемдәрҙең килешен билдәлә. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер.

3. Таблицаны ҡара. Был һүҙҙәрҙең яҙылышын аңлат.

Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә					
-ст	-сть	-зд	-фт	-ск	-нк
текст	власть	поезд	шрифт	Омск	танк
тексҡа	власҡа	поезға	шрифҡа	Омскиҙан	танкыла

● Һүҙҙәрҙе төбәү, сығанаҡ, төшөм килештә үҙгәрт. Ниндәй һығымта яһарһың?

прииск, отпуск, диск, банк, лифт, подъезд

4. Һүҙҙәрҙе руссаға тәржемә итеп, һәр береһенә һорауҙар яҙ. Тиң киҫәктәр индереп, ошо һүҙҙәр менән һөйләм төҙө.

Өлгө: әсәй (кем?) — мать (кто?).

атай, ағай, апай, ҡусты, һеңле, өләсәй, олатай, малай

5. Шиғырҙы уҡы. Нимә белдең? Һин атай-әсәйеңә нисек ярҙам итәһең?

Атай әйтә: «Таҡта йышам,
Әйҙә, улым, булыш, — ти. —
Хәлендән килгәнсә генә
Таҡталарҙы йышыш», — ти.

Тирләп-бешеп таҡта йышам,
Атайымдан ҡалышмай...
Атай әйтә: **«Эш — теләктә,**
Эшләһәң, эш ҡарышмай».

(Ҡадир Әлибаев)

● Билдәләнгән һөйләмдең һүҙҙәрен нисек аңлайһың?

47. Исемең матур. Кем ҡушҡан?

1. Уҡы. Исемеңдең мәғәнәһен беләһеңме?

Исемдәр донъяһы ҡыҙыҡлы. Донъялағы тәүге кешенең исеме — Әҙәм (Адам), йәһүд телендә «ҡыҙыл балсыҡ» тигән һүҙ. Һаува (Ева) «йәшәү» тигән мәғәнәне аңлата. Был башҡорттоң Йәнбикә тигән исеменә тап килә. Ғүмер биреүсе, йән тыуҙырыусы кеше, йәғни ҡатын-ҡыҙ.

Рустарҙың Олег исеме төрки теленән ингән. «Олуғ» (бөйөк) тигән һүҙҙе руслаштырыу күренеше ул.

Күп кенә исемдәрҙең ике төрлө әйтелеше бар. Мәҫәлән, Абдулла — Ғабдулла, Ғәли — Али, Ғайса — Айса, Ғимран — Имран, Ғосман — Усман — Осман. Ундай исемдәр күп. Төрки телдәрҙең ҡайһы берҙәрендә (төрөктәрҙә, әзербайжандарҙа) «ғ» өнө юҡ. Шунлыҡтан Абдулла, Али кеүек варианттар барлыҡҡа килгән.

(Йыһанур Яҡшыдәүләтов)

● Башҡорт исемдәре күберәк ҡайһы телдәрҙән үҙләштерелгән?

2. «Башҡорт исемдәре» китабын файҙаланып, түбәндәге исемдәрҙең мәғәнәһен асыҡла.

Азамат, Вәли, Ғәлимә, Дауыт, **Таһир**, Гөлсинә, **Мәрйәм**, Фәриҙә, Ибраһим, Зәһир, Зәкиә, Дәүләт, Ҡасим, Таибә, Рәжәп, Сөмбөл, Сафа, Зарифа, Фәүзиә

● Билдәләнгән һүҙҙәргә күплек ялғауы өҫтә, һуңынан килештәрҙә үҙгәрт. Ҡыҫымта яһа.

3. Текстан кеше исемдәрен күсереп яҙ.

Үмәр исемле ҡарттың Үҙәнбай, Үлмәҫбай, Үтәбай тигән улдары бар ине. Үмәр ҡарт: «Үлән үҫкән ерендә генә үҫә», — тип әйтергә ярата торғайны. Уның мәғәнәһе шул: «Кешеләр нәҫеленә ҡарап үҫә, тейешле һөнәр ала һәм тормошта таныла».

Үмәр ҡарт балаларын уҡытып, уларға һәйбәт һөнәрҙәр бирҙе. Үҙәнбайы — уҡытыусы, Үлмәҫбайы — табип, Үтәбайы — агроном булды. Тимәк, уларға һәләтлелек нәҫелдән бирелгән.

(Миңлейәр Дилмөхәмәтов)

● **1.** Текста **ү** хәрефле нисә һүҙ бар? **2.** Текстың төп мәғәнәһен билдәлә.

48. Исем серҙәре

1. Тексты уҡы.

Башҡорт исемдәре сығышы буйынса икегә бүленә: 1) төп башҡорт һүҙҙәренән яһалған исемдәр; 2) үҙләштерелгән (ғәрәп, фарсы һәм башҡа телдәрҙән ингән) исемдәр.

Башҡорт исемдәре йөкмәткеһенә ҡарап түбәндәгесә бүленә:

1. Йәнлек, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған исемдәр: Арслан, Сыртлан, Бүребай, Йылҡыбай, Ҡарлуғас, Атйетәр.

2. Табыныу йолаларына бәйле исемдәр: Имәнбай, Ҡарағай, Аҡбүре, Этҡол, Аҙнабай, Айнур.

3. Баланы һаҡлау йолаларына бәйле исемдәр: Ҡалдыбай, Торһонбай, Һатыбал, Иҫәнғол, Туҡтамыш, Үлмәҫбай.

4. Ваҡыт төшөнсәһенә бәйле исемдәр: Айһылыу, Таңсулпан, Таңғатар, Көнһылыу, Рамазан, Шәүәли, Зөлхизә.

5. Ваҡиғалар менән бәйле исемдәр: Байрамбикә, Күсәрбай, Ҡунаҡбай, Яубаҫар, Туйгилде, Күсемхан.

6. Төҫ атамаларына бәйле исемдәр: Аҡбаш, Аҡъегет, Аҡъяр, Аҡбулат, Ҡарасәс, Сыбарбай.

7. Ер-һыу атамаларына бәйле исемдәр: Иҙелбай, Туҡсура, Ирәндек, Урал, Яланбай, Урман.

8. Үҫемлек атамаларына бәйле исемдәр: **Байтирәк, Ҡурай, Сәсәк, Емеш, Зәйтүнә, Гөлназ.**

9. Таш, металл атамаларына бәйле исемдәр: Тимербәк, Биктимер, Алмас, Көмөшбай, Алтынсәс, Ынйы, Яҡут.

(«Башҡорт исемдәре» китабынан)

1. Был исемлекте тағы ла дауам итергә була. Һинең исемең ҡайһы төркөмгә ҡарай? Нимә аңлата? Был турала класта әңгәмәләшегеҙ. **2. Гөл** һәм **ил** тамырына башланған ниндәй исемдәрҙе беләһең? Дәфтәреңә яҙ. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә тәүҙә күплек, һуңынан сығанаҡ килеш ялғауҙары ҡушып яҙ.

2. Тексты уҡы. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

Ул — Иштуған. Уға ун ике генә йәш. Ләкин ул инде ғаиләнең өмөтө, ышанысы. Үҫер, атаһына иш булыр, ярҙамсы булыр. Уның атаһы Байгилде ағай шулай уйлай. Шуға күрә уға исемде лә Иштуған тип ҡушҡан бит ул. Өс ҡыҙ араһында бер генә малай — бер генә иш.

(Зәйнәб Биишеванан)

3. Ир-егет исемдәренән ҡатын-ҡыҙ исемдәре яһа.

Әмин, Аҙналы, Илнар, Алтын, Заһир, Рәис, Рәҡип, Вәсил, Фаиз, Заһит, Илһам, Зариф, Мәслим, Мөнир, Ғәйни, Хәлит

4. Һүрәттәргә ҡарап, кеше исемдәре яһа.

49. Һинең туғандарың кем?

1. Уҡы. Туғандарың тураһында һөйләргә әҙерлән.

Асмандың өләсәһенә бер ят инәй ҡунаҡҡа килде. Улар ҡосаҡлашып күрештеләр. Ҡунаҡ төрлө **тәмлекәстәр**, бүләктәр килтереп сығарҙы, малайға ла тотторҙо.

Тегеләр **күңелле** итеп сәй эсеп, оҙаҡ итеп **һөйләшкән** арала, инәй бүләк иткән машина менән Асман геү килде.

Инәй ял итергә ятҡас, Асман өләсәһенән шым ғына һораны:

— Был ҡунаҡ кем ул?

— Минең бер туған һеңлем. Һинең дә бит ана Фәзизә, Һәҙиә **апайҙарың** бар, улар һиңә бер туған. Һеҙҙең атайығыҙ, әсәйегеҙ бер. Беҙҙең дә был инәй менән атайыбыҙ, әсәйебеҙ бер.

— И-и, мин байыраҡ икән туғанға, һинең бер генә һеңлең бар, ә минең — ике апай.

— **Һеңлеләрем** өсәү, тағы бер ҡустым бар, мин һинән байыраҡ, — тип бирешмәне өләсәһе.

— Ә минең атайым да, әсәйем дә бар. Етмәһә, һинән башҡа өләсәйем, ике олатайым бар. Тимәк, мин еңеүсе, — ти Асман.

— Эйе шул, һин яҡын туғандарға минән байыраҡ, Аллаға шөкөр! — тип **ризалашты** өләсәһе. — Минең атайым менән әсәйем дә, олатай-өләсәйҙәрем дә юҡ инде. Һин еңдең.

(Гүзәл Ситдиҡованан)

● **1.** Текста ниндәй ярҙамсы һүҙҙәр ҡулланылған? **2.** Исемдәрҙең килешен, һанын билдәлә. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер. **4. Туған, ейән** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа.

2. Туғанлыҡ терминдарын аңлат. Аңлатмалы һүҙлек ҡуллан.

һеңле, ҡусты, еҙнә, еңгә, ҡоҙағый, ҡоҙа, бүлә, бүләсә

3. Исемгә морфологик анализ үткәреү өлгөһөн ҡарап, һүҙҙәргә анализ яһа.

Өлгө: ҡояшҡа — исем, нимәгә? ҡояш — тамыр, уртаҡлыҡ, берлектә, төбәү килеш, тултырыусы.

олатайым, туғандарға, апайҙарың

4. Шиғырҙы уҡы. Беренсе һөйләмдең һөйләм киҫәктәре аҫтына һыҙ.

— Атай-әсәй миңә ҡушҡан
Иң матур исем — Гөлшат.
Булһын тип, беҙҙең ҡыҙыбыҙ
Көләс, бәхетле, гел шат!

— Миңә оҙаҡ-оҙаҡ һайлап
Ҡушҡандар исем — Илшат.
Үҫеп еткәс, хеҙмәтемдән
Булһын тип бөтә ил шат.

(Рәмзәнә Әбүталипова)

50. Шәжәрәңде белә̆һеңме?

1. Тексты уҡы.

Башҡорттарҙа һәр кешенән үҙенең ете быуынын белеү талап ителгән. Берәүҙәр ата-бабаларының исемдәрен хәтерендә йөрөткән. Икенселәре исемләп яҙа барған. Бына шундай йылъяҙма шәжәрә тип аталған. Шәжәрәне берәүҙәр ағас, икенселәре ҡояш рәүешендә эшләгән. Ҡайһылары ябай яҙманан ғына торған.

Хәҙер шәжәрәне ғаиләләрҙә һирәк осратырға була. Ә бит шәжәрәһен белмәгән кеше — хәтерһеҙ тигән һүҙ.

● Үҙеңдең шәжәрәңде төҙө.

Сифаттар предметтың төҫөн, тәмен, формаһын, күләмен, урыны һәм ваҡыты буйынса билдәһен белдерәләр.

2. Мәғәнәләренә ҡарап, һүҙҙәрҙе төркөмлә.

йомро, уҫал, аҡ, әсе, ҙур, ҡыҙыл, сөсө, оҙон, тұңәрәк, бәләкәй, күк, дүрткел, йыуаш, оялсан, бейек, һоро, яуыз, тоҙло, көслө

● Бирелгән сифаттар менән һүҙбәйләнештәр уйлап яҙ. Ике һөйләм төҙө.

3. Яһалма сифаттар төҙөп яҙ. Өс һөйләм уйла.

1) -лы/ле, -ло/-лө: тәртип, яғым, көс, бик, өс; 2) -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк: көн, аҙна, бар, кирбес, ус; 3) -ныҙ/-неҙ, -ноҙ/-нөҙ: һөт, боҙ, ҡамыш, ел, болот, ай; 4) -ҡы/-ке, -кө, -ғы, -ге, -гө: ҡыш, йәй, кис, яҙ, төш, бөгөн.

4. Шиғыр һорауҙарына яуап бир.

Кем булған олатайың,
Олатайыңдың атаһы?
Уларҙан тыш нәҫелеңдә,
Йә, кемдәр булған тағы?

Ниндәй һөнәр белгәндәр,
Ниндәй кейем кейгәндәр?
Был яҡҡа, был ауылға
Улар ҡайҙан килгәндәр?

(Риф Мифтахов)

● **1.** Эйәлек затында торған исемдәрҙе күсереп яҙ. **2.** Шиғырҙа ниндәй һөйләмдәр осраны? **3.** Ҡайһы һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереп булмай?

51. Олатайҙар һүҙе — аҡылдың үҙе

1. Тексты уҡып, исем бир. План төҙөп һөйлә.

Өс улы менән бер ҡарт йәшәгән. Ҡарттың үлер ваҡыты еткән. Ул улдарын саҡырып васыят әйткән. Оло улына:

— Улым, һин ауыл һайын һарай һал.

Икенсе улына:

— Аҙна һайын ҡатын ал.

Өсөнсө улына:

— Ерҙе һөргәс, баш-баштарын ҡауырһын менән билдәләп ҡуй, — тигән.

Бабай үлеп киткән. Аталарын хөрмәтләп ерләгәндәр, һуңынан васыятты иҫтәренә төшөрөп, аптырап ҡалғандар. Аҡыл эйәһенә барып, васыятты һөйләп биргәндәр.

— Атайығыҙ бик яҡшы васыят әйтеп ҡалдырған. Уны үтәһәгеҙ, кеше булырһығыҙ. Улым, ауыл һайын һарай һалыу, ул ауыл һайын дуҫ-иш булдырыу, кеше килгәндә, уларҙы яҡшы ҡаршылау икәнлекте аңлата. Һиңә, уртансы егет, аҙна һайын ҡатын ал, йәғни өйҙә тик ятма, ҡатының янына һағындырып ҡына, аҙнаһына бер генә ҡайт, тип ҡушҡан. Һиңә, кесе егет, ерҙе бик яҡшы итеп эшкәртергә, еренә еткереп эшләргә, биш-алты ҡабат һөрөргә ҡушҡан.

Өс туған, аҡыл эйәһенә рәхмәттәр әйтеп, аталарының васыятын үтәргә тотонған.

Ата һүҙен тотҡанға тормоштары етеш, дуҫ-иштәре күп, ғаиләләре татыу булған, ти.

(Башҡорт халыҡ әкиәте)

● **1.** Атай-олатайҙарығыҙ, әсәй-өләсәйҙәрегеҙ һеҙгә ниндәй аҡыллы кәңәштәр бирә? Һин ололар һүҙен тыңлайһыңмы? **2.** Исемдәрҙең килешен, һанын, эйәлек затын билдәлә. **3.** Ниндәй ҡушма һүҙҙәр осраны?

2. Сифат дәрәжәләрен иҫкә төшөр.

Төп	Сағыштырыу	Артыҡлыҡ	Аҙһытыу
ҡыҙыл	ҡыҙылыраҡ	ҡып-ҡыҙыл	ҡыҙғылт
күк	күгерәк	күм-күк	күкһел
тәрән	тәрәнерәк	бик тәрән	тәрән генә
батыр	батырыраҡ	үтә батыр	батыр ғына
шәрбәт	шәрбәтерәк	ныҡ шәрбәт	шәрбәт кенә
ҡара	ҡарараҡ	ҡап-ҡара	ҡараһыу

● **Оло, гүзәл, шәп, яҡшы, күренекле, оҙон** һүҙҙәрен дәрәжәлә үҙгәрт.

3. Синоним сифаттарҙы төркөмләп яҙ. Өс сифатты индереп, һөйләм төҙө. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе дәрәжәлә үҙгәрт.

атаҡлы, **ҙур**, матур, һөйкөмлө, яҡшы, күренекле, **оло**, һылыу, мөләйем, арыу, данлыҡлы, өлкән, **күркәм**, сибәр, гүзәл

4. Был исемдәргә сифаттар уйлап яҙ.

болот, ҡуян, үлән, яр, ауыл, дуҫ

52. Һиңә ниндәй сифаттар хас?

1. Тексты исемлә. Планын төҙө һәм һөйлә.

Бер тейен ботаҡтан ботаҡҡа һикереп йөрөгән дә, бүре өҫтөнә йығылып төшкән. Бүре тейенде эләктереп алған, ашамаҡсы булған. Тейен бүрегә: «Ебәр мине!» — тип ялбарған. Бүре: «Ярар, мин һине ебәрермен. Тик һин шуны әйт әле. Ниңә һеҙҙең тейен халҡы бик шат була? Миңә бына һәр ваҡыт күңелһеҙ!» — тигән.

Тейен уға: «Тәүҙә һин мине ағас башына ебәр, шунан әйтермен. Юҡһа, мин һинән ҡурҡам», — тигән.

Бүре уны ебәргән. Тейен ағас башынан: «Һин уҫалһың. Гел яуызлыҡ уйлап ҡына йөрөйһөң. Яуызлыҡ йөрәгеңде яндыра. Ә беҙ мәрхәмәтлебеҙ. Яуызлыҡ теләмәйбеҙ. Шуға беҙгә күңелле!» — тигән.

(Лев Толстойҙан)

● **1.** Әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр осраны? **2.** Алты һүҙбәйләнеш яҙып ал, төп һүҙҙән әйәреүсеһенә һорау ҡуй. **3.** Бишәр тамыр һәм яһалма һүҙ табып яҙ. **4.** Тексстан антонимдарға миҫал килтер.

2. Әгәр үҙеңдә яҡшы сифаттар тәрбиәләргә теләһәң, кәңәштәргә ҡолаҡ һал.

Әңгәмәсеңә **иғтибарлы** бул.
Фекереңде **ҡыҫҡа** һәм **аңлайышлы** итеп белдер.
Күп һөйләргә тырышма. Кешегә лә һүҙ бир.
Әңгәмәсеңде бүлдермә, һүҙен тыңлап бөт.
Эш эшләгән ваҡытта мөрәжәғәт итһәләр, эшеңде ҡуйып тор. Мөмкин булмаһа, бер аҙ көтөп тороуҙы һора.

Әңгәмә ваҡытында ҡулдарҙы болғап һөйләү килешмәй. Әңгәмәсеңә ҡағылыу, уның төймәләрен борғослау, ҡулбашына һуғыу — **насар** ғәҙәт.

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙе дәрәжәләрҙә үҙгәрт.

3. Нөктәләр урынына тейешле исемдәрҙе ҡуйып, күсереп яҙ.

аҡ ... — ҡара ..., яҡты ... — ҡараңғы ..., йәш ... — ҡарт ..., еүеш ... — ҡоро ..., эре ... — ваҡ ..., буш ... — тулы ...

4. Уҡы. Өләсәй нимәгә өйрәтә?

Ата һүҙен тотмағандың
Юлы һис ҡасан уңмаҫ.
Әсәйеңдең рәхмәтен ал,
Юлың һәр ваҡыт уңыр.

(Динә Талхина)

53. Яҡшы эшкә ярыш юҡ

1. Тексты исемлә. Планын төҙө һәм һөйлә.

Юра йоҡонан иртүк уянды. Ҡояш балҡып тора. Көн шундай һәйбәт! Малайҙа берәй яҡшы эш эшләү теләге уянды. Ул хыяллана башланы: «Әгәр һеңлем һыуға бата башлаһа, ә мин уны ҡотҡарһам!»

Шунда уҡ һеңлеһе килеп етте.

— Юра, әйҙә мине урамға алып сыҡ! — тине.

— Кит әле, уйланырға ҡамасаулама!

Һеңлеһе үпкәләп, китеп барҙы.

Юра тағы хыялға сумды.

«Бына Трезорка ҡоҙоҡҡа йығылып төштө ти, ә мин уны сығарҙым...»

Шунда уҡ Трезорка ла, ҡойроғон болғай-болғай, малай эргәһенә килде. «Миңә эсергә бир әле, Юра», — тимәксе ине ул.

— Кит әле бынан! Ҡамасаулама, мин уйлайым!

Трезорка ҡыуаҡ араһына инеп китте. Юра әсәһе эргәһенә килде.

— Берәй яҡшылыҡ эшләргә ине миңә!

Әсәһе Юраның башынан һыйпаны ла:

— Һеңлеңде урамға алып сыҡ, өләсәйеңә һауыт-һаба йыуыш, Трезоркаға һыу бир, — тине.

(Валентина Осееванан)

● **1.** Эйәлек затындағы исемдәрҙе тап, затын билдәлә. **2.** Әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр бар? **3.** Тамыр, яһалма һүҙҙәргә бишәр миҫал табып яҙ. **4.** Исемдәрҙе күсереп яҙ, килештәрен билдәлә.



2. Сифаттарҙы дәрәжәлә үҙгәртеп буламы?

ҡышҡы, кирбесле, әҙәби, ауылдағы, иртәнге, өйлөк, ағасһыҙ, алтын, көҙгө, Уралдағы, ебәк, ташлы

3. Нөктәләр урынына тейешле сифаттарҙы ҡуйып яҙ.

Өлгө: йәй йылы — ҡыш һалҡын.

тоҙ ... — бал ..., ағас ... — ҡыуаҡ ..., күмер ... — аҡбур ..., тимер ... — мамыҡ ..., йәй ... — ҡыш ...

4. Шаян һүрәттәргә ҡарап, һөйләмдәр төҙөп яҙ. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр ҡуллан.

54. Тештәреңде бәләкәстән һаҡла

1. Уҡы. Текстың планын төҙө. Һөйләргә әҙерлән.

Кеше матурлығының нигеҙендә сәләмәтлек ята. Шуға бәләкәйҙән гигиена талаптарын үтәргә кәрәк.

Һәр иртәне гимнастиканан башлау, һалҡын һыу менән йыуыныу, ҡаты таҫтамал менән ышҡыныу — көндәлек **ҡағиҙәгә** әйләнергә тейеш. Ундай кеше грипп, ангина менән ауырымай, эшкә һәләте арта, кәйефе лә күтәренке була.

Ештәргә айырым иғтибар кәрәк. Теш араһында ҡыҫылып ҡалған аҙыҡ ҡалдыҡтары микробтар өсөн бик яҡшы мөхит. Улар бик тиҙ үрсеп китәләр. Шуға **уларҙы** иртәле-кисле һәм ашағандан һуң бик ентекләп таҙартыу мөһим.

(Һәҙиә Яҡупова)

1. Текстан сифаттарҙы тап, дәрәжәлә үҙгәрт. **2.** Алты һүҙбәйләнеш яҙып ал. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик һәм фонетик анализ яһа.

2. Текстны уҡы.

Кешенең тештәре ике ҡабат үҫә. Тәүҙә 20 һөт тештәре, аҙаҡтан улар төшкәс, 32 ысын тештәр барлыҡҡа килә.

Тәүге теш пастаһы 5000 йыл элек Египетта барлыҡҡа килгән.

Тәүге теш щёткалары Ҡытайҙа 500 йыл элек уйлап табылған.

Тәүге электр теш щёткаһы Швейцарияла ҡулланыла башлай.

(«Мәктәп календары»нан)

● **1.** Ни өсөн тештәрҙе һаҡларға кәрәк? **2.** Текстан өс һөйләмде күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

3. **Ҡаты, һалҡын, күбекле** сифаттарына морфологик анализ яһа.

Өлгө: көҙгө — сифат, ниндәй? яһалма, шартлы, аныҡлаусы.

4. Сифаттарға антонимдар уйлап яҙ. Дүрт һөйләм төҙө.

иркен, киң, аҫыл, затлы, эҫе, ҡайнар, шаян, шуҡ

5. Таблица буйынса сифат тураһында һөйлә.



55. Сығыу

1. Тексты уҡы. Һин был сығыу ҡағиҙәләре менән килешәһеңме?

Сәләмәтлекте һаҡлауҙа организмды сыныҡтырыу, тәбиғәткә яҡын булыу мөһим. Был йәһәттән Порфирий Иванов һәм уның уҡыусылары түбәндәге ҡағиҙәләрҙе тәҡдим итә:

1. Көнөнә ике тапҡыр тәбиғи һыуҙа: күлдә, йылғала ҡойон. Мөмкинлек булмаһа — душ аҫтында. Йылы һыу менән һалҡын һыуҙы сиратлап ҡойон.

2. Һыу инер алдынан, шарттар булһа, тәбиғәткә сыҡ, ялан аяҡ йөрө. Ҡышын бер-ике минутҡа булһа ла ҡарға баҫ.

3. Иҫерткес эсемлек эсмә, тәмәке тартма.

4. Йәкшәмбе көн сәғәт 12-лә ялан аяҡ тәбиғәткә сыҡ, һауа һула, уйлан. Ингәс, нимә теләһәң, шуны аша.

5. Үҙеңде уратып алған тәбиғәтте ярат.

6. Бөтә кеше менән, бигерәк тә өлкәндәр менән, һәр ерҙә һәм һәр ваҡыт иҫәнләш.

7. Кешеләргә ҡулыңдан килгәнсә ярҙам ит.

8. Үҙеңдәге һаранлыҡты, ялҡаулыҡты, маһайыуҙы, ҡурҡаҡлыҡты еңә бел.

9. Уйҙарың эшеңдән айырылмаһын.

(«Башҡортостан календары»нан)

● **1.** Текстан һандарҙы тап. Улар ниндәй һорауға яуап бирә?
2. Исемдәрҙең килешен, һанын билдәлә.

Һан предметтың иҫәбен белдерә. **Нисә? күпме?** һорауҙарына яуап бирә.

2. Һандарҙы һүҙҙәр менән яҙ. Сығарыу темаһына бәйләп дүрт һөйләм төҙө.

2, 175, 67, 1050, 4, 8, 12, 20, 31

3. Тексты һандар менән тулыландырып, үҙгәртеп яҙ.

Һаулыҡ наҡлауҙы бәләкәйҙән башларға кәрәк. Көн дә бер үк ваҡытта йоҡонан тороғоҙ. Иртәнге зарядканы саф һауала эшләү файҙалы. Мөмкинлек булмаһа, зарядканы асыҡ форточка янында эшләргә кәрәк. Һалҡынса һыу менән йыуыныу ҙа кешегә көс-дәрт бирә. Иртәнге аштың һәр ваҡыт ашарға кәрәк. Ул һиңә эшкә, уҡыуға көс бирәсәк.

Өлгө: Көн дә бер үк ваҡытта, сәғәт 7-лә, йоҡонан тороғоҙ.

56. Спортты яратаһыңмы?

1. Тексты уҡы. Исем бир. План төҙөп, һөйләргә әҙерлән.

Йәй көнө мин иртәнге зарядканы саф һауала яһайым. Урман буйлап йүгерәм, шунан Ҡариҙелгә төшөп, һыуҙа ҡойонам. Рәхәт!

Бер үҙемә күңелһеҙ булғас, **күрше Сәлимде иптәшкә саҡырырға булдым.**

Ишекте уның әсәһе асты.

— Сәлим өйҙәме? — тип һораным мин.

— Залда. Яңы гимнастика комплексын өйрәнә.

Зал ишеге ябыҡ ине. Унан спорт мастерының «Бер, ике, өс!» тигән командалары ғына ишетелеп ҡала.

— Сәлим минең менән йүгерергә сыҡмаҫмы икән?

— Юҡ, юҡ! Ул ҡатмарлы күнегеүҙәр яһай!

Шул саҡ йоҡо бүлмәһенән Сәлимдең атаһы килеп сыҡты.

— Әгәр һин, дуҫ кеше, — тине ул миңә, — ысынлап сынығырға уйлаһаң, спорт менән етди шөғөлләнә. Ана беҙҙең Сәлим шикелле.

Ата-әсәһенең:

— Ул ҡамасаулағанды яратмай, гимнастика бөткәнде көт, — тигән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалманым, зал ишеген асып ебәрҙем... һәм ғәжәп күренешкә тап булдым: Сәлим йомшаҡ креслола телевизорҙан иртәнге гимнастиканы ҡарап ултыра ине.

(Марсель Сәлимов)

● **1.** Ҡайһы малай спорт менән нығлап шөғөлләнә? **2.** Сифаттарҙы күсереп яҙ. **Ғәжәп, ултыра** һүҙҙәренә морфологик анализ яһа. **3.** Билдәләнгән һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

Һандар ябай һәм ҡушма була. Ябай һан бер һүҙҙән тора: ун, йөҙ. Ҡушма һан бер нисә һүҙҙән тора: ун бер, мең дә бер йөҙ. Һәр һан айырым яҙыла.

2. Тәүҙә ябай, һуңынан ҡушма һандарҙы күсереп яҙ. Рус теленә тәржемә ит.

ун биш, егерме, утыҙ ете, илле, етмеш, туҡһан, йөҙ ҙә алтмыш бер, ике йөҙ алтмыш алты, ике йөҙ

3. Тәүҙә ябай, һуңынан ҡушма һандарҙы һүҙ менән яҙ.

25, 46, 2, 4, 10, 3, 30, 5, 56, 67, 201, 287

4. Мәкәлдәргә һандар өҫтәп, күсереп яҙ. Ниндәй һандар ҡулландың?

1. ... ҡат үлсә, ... ҡат киҫ. 2. Ил өҫтөндә ... дуҫың булһын. 3. ... һум аҡсаң булғансы, ... дуҫың булһын. 4. ... йәшәр юлдан ҡайтһа, ... йәшәр күрә барыр. 5. ... тинлек ҡуян — ... тинлек зыян. 6. Беләге йыуан ...ҙе йығыр, белеме булған ...де йығыр. 7. ...те эшләгәнсе, ...ҙе еренә еткер. 8. Уҡығандың теле ... .

Белешмә өсөн һүҙҙәр: ете, бер, илле, йөҙ, етмеш, мең, биш, ике.

57. Алдашыу — насар ғәҙәт

1. Уҡы. Тексҡа исем бир. Планын төҙө һәм һөйлә.

Ғәйшә инәй **ҡапҡа** төбөндәге эскәмйәгә сығып ултырҙы.

Күрше ҡыҙҙары Зифа менән Гүзәл һикереп йөрөй ине, уйынды туҡтатып, улар Ғәйшә инәй эргәһенә йүгереп килделәр. Инәй ҡыҙҙарға кеҫәһенән кәнфит сығарып бирҙе.

— Балаҡайҙар, һөйләгеҙ әле, донъяла ниндәй яңылыҡтар бар?

— Әлләсе, — тине Зифа.

— Беҙҙең һыйыр быҙауланы, — тине Гүзәл.

— Ҡотло булһын быҙауығыҙ! — Инәйҙең шатлығы йөҙөнә сыҡты. — Әйтегеҙ әле, бөгөн өйҙә ни эш бөтөрҙөгөҙ?

— Мин иҙән йыуҙым, — тине лә Зифа, тынып ҡалды.

— Мин дә иҙән йыуҙым, — тип ҡабатланы Гүзәл. — Кер йыуҙым. Аш бешерҙем. Ихатаны һеперҙем. Утын ярҙым. Һыйыр һауҙым. Шәл бәйләнем. **Картуф** утаным.

Ғәйшә инәй тыңлап торҙо-торҙо ла:

— Көн дә шулай эшләйһеңме? — тип һорап ҡуйҙы.

— Эйе, — тине Гүзәл.

— Бер эш тә ҡалдырмайһың икән. Әсәйең **ҡурсаҡ** менән уйнап ҡына ултыралыр инде, былай булғас. — Ғәйшә инәй мәғәнәле итеп көрһөнөп ҡуйҙы. — Әсәйеңдән һорашайым әле.

— Өйҙә юҡ ул. Ҡалаға китте.

— Бая ғына беҙгә инеп сыҡҡайны ла баһа!

Гүзәл өндәшмәне.

Ғәйшә инәй Зифаға ҡарап:

— Уңған ҡыҙ икәнһең һин, рәхмәт! — тине. — Иртәгә килеп иҙәнемде йыуып кит әле.

● **1.** Ғәйшә инәй ни өсөн Зифаға рәхмәт әйтте? Ни өсөн Гүзәлде түгел, Зифаны саҡырҙы? Һин Гүзәлдең һүҙҙәренә ышанаһыңмы? **2.** Йыйнаҡ һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. **3.** Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылы бишәр һүҙ күсереп яҙ. Ижектәргә бүл. **4.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәрт.

2. Таблицаны ҡара. Һан төркөмсәләре тураһында һөйлә.

Төп һандар					
бер	туғыҙ	етмеш	туҡһан	йөҙ	мең
Рәт һандары					
-ынсы	-нсы	-енсе	-нсе	-өнсө	
туғыҙ-ынсы	алты-нсы	бер-енсе	ике-нсе	өс-өнсө	

● Бирелгән һандарҙы төп, рәт һандарына айырып яҙ. Дүрт һөйләм төҙө.

бишенсе, ун беренсе, йөҙ, етмеш туғыҙ, егерменсе, икенсе, бер мең, ун ике, ҡырҡ, өс

3. Тексты уҡы. Һандарҙы тап. Улар ниндәй һандар?

Башҡортостанда бейеклеге бер километрға еткән тауҙар бар. Иң бейек иҫәпләнгән Ямантауҙың бейеклеге бер мең алты йөҙ ҡырҡ метр, Ирәмәлдең бейеклеге бер мең биш йөҙ һикһән ике метр.

● Башҡортостан менән бәйле тағы ниндәй мәғлүмәттәрҙе миҫалға килтерә алаһың?

58. Минең аҙналыҡ планым

1. Таблицаны ҡара. Үҙеңдең аҙналыҡ планыңды төҙө. Класс алдында сығыш яһа.

	Иртән	Көндөҙ	Кис
дүшәмбе	8.00—13.30 Мәктәптә уҡыу	15.00—16.30 Музыка мәктәбе	18.00 Әхирәтемдең тыуған көнө
шишәмбе		14.00—15.00 Китапханала шөғөлләнеү 16.00 Киноға барыу	19.00 Катокта шыуыу
шаршамбы		15.00—16.30 Музыка мәктәбе	17.00 Өй эштәрендә ярҙам итеү

кесаҙна		15.00—16.30 «Оҫта ҡулдар» түңәрәге	18.00 Бассейн
йома		15.00—16.30 Музыка мәктәбе	17.00 Өй эштәрендә ярҙам итеү
шәмбе	10.00 Өй эштәрендә ярҙам итеү	13.00 Пикник	19.00 Мунса
йәкшәмбе		13.00 Сана шыуыу	19.00 Ғаилә менән киноға барыу

● Һорауҙарға яуап әҙерлә.

Һин иртәнсәк нимәләр эшләнең?
Кисен ниндәй эштәр башҡарырға йыйынаһың?
Иртәгә нимә эшләйәсәкһең?

2. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүен күҙәт. Уларға ниндәй ялғауҙар ҡушыла?

төп килеш	бер	өс	ун	егерме биш
эйәлек килеш	берҙең	өстөң	ундың	егерме биштең
төбәү килеш	бергә	өскә	унға	егерме бишкә
төшөм килеш	берҙе	өстө	унды	егерме биште
урын-ваҡыт килеш	берҙә	өстә	унда	егерме биштә
сығанаҡ килеш	берҙән	өстән	ундан	егерме биштән

● **Йөҙ, илле, алты, һиҡһан** һүҙҙәрен килеш менән үҙгәрт.

3. Тейешле ялғауҙар ҡушып, һандар өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсер. Һандарҙың килешен билдәлә.

1. **Ҡырҡ...** илле... ҡушһаң, ... була. 2. Алтмыш... утыҙ... алһаң, ... ҡала. 3. Һиҡһән... **ике...** бүлһәң, ... була. 4. **Утыҙ...** өс... ҡабатлаһаң, ... була. 5. Беҙ көндөҙгө сәғәт ике... ялға туҡтаныҡ. 6. Илле — йөҙ... яртыһы.

4. «Минең бер көнөм» тигән ҡыҫҡа ғына хикәйә яҙ. Һандарҙы ҡуллан.

Ошолай башла: Мин көн һайын ителә торам...

59. Минең ялым

1. Тексты уҡы. Исем бир. Унда нимә тураһында һүҙ бара?

Кисә ял көнө булды. Өләсәйем бәлеш бешерҙе. Әсәйем өй йыйыштырҙы, кер йыуҙы. Мин уға булыштым. Атайым менән Мөнир ағайым утын быстылар. Ирек ағайым утынды өйөп торҙо. Төштән һуң тышта уйнаныҡ. Мин санала шыуҙым. Кис күмәкләшеп кино ҡаранык.

Ял күңелле үтте.

● Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

2. Исемдәрҙе күсереп яҙ. Килешен, һанын билдәлә. Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик һәм фонетик анализ яһа.

Йәкшәмбе көн уҡыусылар экскурсияға **Ағиҙел** буйына төштөләр. Улар ҙур ерек ағасы янына әйберҙәрен ҡуйып, йылғаны күҙәттеләр. Ағиҙел буйында сәскәле туғайлыҡ. Бына матур **ҡайын**. Ана **ерек** ағасы.

Малайҙар елкәнле кәмә яһап, уны йылғаға ебәрҙеләр. Ҡыҙҙар гөлләмә йыйҙылар.

3. Юл йөрөү ҡағиҙәләрен бергәләп иҫкә төшөрөгөҙ. Тағы ла ниндәй ҡағиҙәләр бар?

Юл йөрөү ҡағиҙәләрен һәр кем үтәргә тейеш. Юлды тейешле урында ғына сығырға кәрәк. Сығыр алдынан иң тәүҙә һулға, унан уңға ҡара. Машина юҡлығына ышанғас ҡына, юлды аша сық. Светофорлы ерҙә йәшел ут янғанын көтөргә кәрәк. Һары ут янғанда ашыҡма, машинаның ҡапыл килеп сығыуы бар. Каникулың хәүефһеҙ үтһен!

● Һинең ялың нисек үтә? Шул тураһында һөйләп.

4. Һанға морфологик анализ яһа.

Өлгө: егерменсе — һан, нисәнсе? ябай, егерме, рәт, аныҡлаусы.

Алтыны утыҙға ҡабатлаһаң, **йөҙ ҙә һикһән** була.

5. Һандарҙы тап. Һорау бир.

Беҙ алтынсы мәктәптең 4-се класында уҡыйбыҙ. Класыбыҙҙа 28 уҡыусы. Бөгөн 5 дәрес булды. Башҡорт теле дәресе 3-сө булды. Бер хикәйә, ике шиғыр уҡныҡ.

● **1.** Үҙеңдең класың тураһында һөйләп. **2.** Класығыҙҙа нисә парта, нисә тәҙрә бар? Беренсе рәттә кемдәр ултыра?

60. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ

1. Текстка исем бир. План төҙө һәм һөйлә.

Рөстәм әсәһен урамда ҡаршы алды. Әсәһе, ҡапҡаны асып:

— Иртәнсәк өйҙө йыйыштыра алмай киттем, тағы ла бына һуң ҡайттым. Башлаған эште бөтөргө килә шул. «Ҡалған эшкә ҡар яуа», тигәндәр бит ҡарттар, — тип һөйләнә-һөйләнә өйгә инде.

Ул, өйгә ингәс, аптырап ҡалды һәм йылмайып улына ҡараны.

— Улым, иҙәнде кем йыуҙы? Әллә өләсәйең килдеме?

— Юҡ, берәү ҙә килмәне, мин үҙем йыуҙым, — тине Рөстәм.

— Һин йыуҙыңмы?! — тине әсәһе, ҡыуанып. — Һиңә йыуырға кем ҡушты?

Рөстәм ҡапыл ғына яуап бирмәне. Унан, тулҡынланып, ҡыҙып-ҡыҙып һөйләргә тотондо:

— Бер кем дә ҡушманы. Үҙем тоттом да йыуҙым. Утын да ярҙым, һыу ҙа ташыным, ҡош-ҡорттарҙы ла ашаттым.

Әсәһе улын ҡосаҡлап алды.

— Бына рәхмәт! Бына рәхмәт, улым! — тине ул.

Рөстәм әсәһенең шатлыҡлы йөҙөнә ҡарап ҡыуанды.

— Әсәй, мин шулай һәр ваҡыт һиңә ярҙам итермен.

(Әхтәм Ихсан)

● **1.** Әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр осраны? **2.** Текстан алмаштарҙы тап. Улар ниндәй һүҙ төркөмөн алмаштырып килгән? Алмаштар булған һөйләмдәрҙе күсереп яҙ. **3.** Һин өйҙә нисек ярҙам итәһең?

Алмаштар исемде, сифатты, һанды алмаштырып киләләр.

2. Тексты уҡы. Үҙеңә оҡшаған кәңәштәрҙе күсереп яҙ.

Өләсәйем өйрәткән аҡыл

Балам, кешеләрҙе рәнйетмә! Кешеләргә яҡшылыҡ эшлә, улар һинең үҙеңә кире ҡайтыр. Кеше бәхетһеҙлегенә ҡыуанма: үҙеңдән бәхет, уңыш китер. Һау һәм сәләмәт булыр өсөн, башҡаларҙан көнләшмә, насар эштәр башҡарма, рәнйемә. Үҙеңде ярат, шул саҡта башҡалар ҙа һине яратыр.

● **Бәхет, ярат** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа.

61. Яратҡан шөғөлөм

1. Мәҡәләләрҙе уҡы. Улар нимә тураһында?

Мин Ғәлиә Абдуллина булам. Көйөргәҙе районының Таймаҫ ауылында тыуғанмын. Әлеге ваҡытта 11-се класта уҡыйым. Яратҡан шөғөлөм — бейеү. Бейеү буйынса махсус мәктәпте тик «бишле» билдәләренә генә тамамланым. **2009** йылда «Байыҡ» балалар бейеү конкурсында ҡатнашып, «Тамашасы һөйөүе» номинацияһына лайыҡ булдым. Артабан да был матур **шөғөлдө** ташламаҫҡа уйым бар. Хыялдарым бик күп.

Иң ҙурҙарының береһе — берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырып, институтҡа уҡырға инеү.

(«Йәшлек» газетаһынан)

— Бешеренеү — бәләкәйҙән яратҡан шөғөлөм. Өйҙә лә, эштә лә аш-һыу бешереүгә ижади ҡарайым. Ашнаҡсы булараҡ, ябай ғына аҙыҡты әҙерләгәндә лә, үҙемдән ниндәйҙер яңылыҡ өҫтәп, ҡыуаныс табам, — тип һөйләй ашнаҡсы Венера Ғәбитова. Күмәс, ҡалас, ҡабартма, **ваҡ** бәлеш кеүек ҡамыр аштарын ул бар күңелен һалып бешерә. Шуға ла Венера **Рәжәп** ҡыҙының тәмле аштарын ауыҙ иткән бәләкәстәр ҙә, өлкәндәр ҙә уға рәхмәтле.

(«Башҡортостан» газетаһынан)

● **1.** Был мәҡәләләрҙә кемдәр тураһында һүҙ бара? Һинең яратҡан шөғөлөң бармы? **2.** Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. **3.** Иң күп хәрефле һүҙҙе тап. Унда нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы бар? **4.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа.

2. Алмаш төркөмсәләре менән таныш. Уҡылған мәҡәләләрҙән алмаштарҙы тап. Улар ниндәй һүҙ төркөмөн алмаштыра?

Зат	Эйәлек	Һорау		Күрһәтеү	
мин	минең	кем	ҡайҙа	был	бындай
һин	һинең	нимә	ниндәй	теге	тегеләй
ул	уның	нисә	ни эшләй	шул	шундай
беҙ	беҙҙең	ҡасан	ҡайһы	ошо	ошондай
һеҙ	һеҙҙең	күпме	ни ҡәҙәр	бынау	ундай
улар	уларҙың	нисек	нилектән	анау	шулай

● Алмаштарҙы ҡулланып, һөйләмдәр төҙө.

3. Тест һорауҙарына яуап бир. Унда ниндәй алмаштар ҡулланылған?

1. Уҡыусыларҙың ниндәй эше бар?
а) белем алыу б) йорт төҙөү в) поезд йөрөтөү
2. Тырышып уҡыған кеше кем була?
а) президент б) кәрәкле белгес в) бер кем дә
3. Спорт менән ни эшләйҙәр?
а) йыялар б) үҫтерәләр в) шөғөлләнәләр
4. Хобби — ул нимә?
а) буш ваҡытта мауығып шөғөлләнгән эш
б) билдәле ваҡытта башҡарыла торған эш
в) йылына бер тапҡыр ғына эшләнә торған эш

62. Минең буласаҡ һөнәрем

1. Шиғырҙы уҡы.

Кем ул?

— Кем ул, кем эшсе?
Тауҙар аҡтара,
Ҡорос ҡайната,
Атом көсөнән,
Ҡояш сығарып,
Нурын тарата!

— Кем ул игенсе?
Һөрә һәм сәсә,
Икмәк үҫтерә.
Йөрәк йылыһын,
Бөтә булмышын
Уға күсерә!

(Файыҡ Мөхәмәтйәнов)

● Шиғырҙан алмаштарҙы тап. Йыйнаҡ һөйләмдәрҙе яҙып ал.

2. Уҡы. Ниндәй һөнәр тураһында һүҙ бара?

Уҡып бөткәс, ниндәй һөнәр һайларға тип, оҙаҡ уйландым. Атайым — рәссам, әсәйем — уҡытыусы,

ағайым — инженер. Миңә атайым да, әсәйем дә: «Яҡшылап уйла, әле ваҡыт бар. Яратҡан эш бер ваҡытта ла ауыр булмай», — ти. Күп уйлай торғас, таптым. Кешеләрҙе һауыҡтырыу өсөн нимә эшләргә кәрәк, шуны өйрәнә башланым.

(«Аманат» журналынан)

● **1.** Киләсәктә кем булырға хыялланаһың? Нимә менән мауығаһың? **2.** Алмаштарҙы тап, төркөмсәһен билдәлә.

3. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәрешен ҡара.

Килештәр	Алмаштар		
төп	мин	был	нимә
эйәлек	минең	бының	нимәнең
төбәү	миңә	быға	нимәгә
төшөм	мине	быны	нимәне
ур-ваҡ.	миндә	бында	нимәлә
сығанаҡ	минән	бынан	нимәнән

● **Беҙ, һин, ул, ошо, теге, кем, ни** алмаштарын килеш менән үҙгәрт.

4. Һорауҙарға бер генә һүҙ менән яуап яҙ.

1. Кем автомашиналар йөрөтә? 2. Кем мәктәптә уҡый? 3. Кем заводта эшләй? 4. Кем яланда эшләй? 5. Кем комбайн йөрөтә? 6. Кем итек тегә? 7. Кем һыйыр һауа? 8. Кем балалар уҡыта? 9. Кем иген үҫтерә? 10. Кем малдар көтә? 11. Кем урмандарҙы ҡарай? 12. Кем емеш ағастары үҫтерә? 13. Кем балыҡ тота? 14. Кем тимерлектә эшләй? 15. Кем йорттар төҙөй?

63. Яратҡан яҙыусым

1. Тексты уҡы. План төҙө.

Мин китап уҡырға яратам. Китапты китапхананан алып уҡыйым. Өйҙә лә китаптарым күп. Рус яҙыусыларынан Корней Чуковский, Эдуард Успенский, Андрей Усачёв, Кир Булычов әҫәрҙәре оҡшай. Кир Булычов яҙған китаптарҙа Алиса исемле ҡыҙҙың төрлө мажаралары бигерәк тә ҡыҙыҡлы.

Сит ил яҙыусыларынан швед яҙыусыһы Астрид Линдгрендың ҡыйыҡта йәшәгән Карлсон тураһындағы, шулай уҡ «Пеппи — Оҙон ойоҡ» китаптарын бер нисә ҡат уҡып сыҡтым.

Башҡорт яҙыусыларынан Зәйнәб Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» повесы, Мостай Кәримдең шиғырҙары, «Өс таған» повесы бигерәк оҡшай.

● **1.** Һин китап уҡырға яратаһыңмы? **2.** Үтелгән һүҙ төркөмдәренә бишәр миҫал табып яҙ. **3.** Уҡыған әҫәрҙәр буйынса көндәлек алып бар. Уны түбәндәгесә эшләргә була.

Автор	Әҫәрҙең исеме	Ҡыҫҡаса эстәлеге	Төп геройҙары	Геройҙарға характеристика

2. Уҡы.

Ризаитдин Фәхретдин кәңәштәренән

Матур китаптар — улар көҙгө. Улар аулаҡта — серҙәш, яңғыҙлыҡта — иптәш, көсһөҙлөктә — ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән заманҙарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы әйберҙәр. Улар тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы

кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә. Шуға китап алғанда һаранланмағыҙ. Китаптарҙан айырылмағыҙ.

● Текстан алмаштарҙы тап, уларға морфологик анализ яһа.

Өлгө: минең — алмаш, кемдең? сифатты алмаштырған, эйәлек алмашы, 1-се зат, берлек, эйәлек килеш, аныҡлаусы.

3. Мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен аңлат. Һөйләм киҫәктәре аҫтына һыҙ.

1. Китап уҡыһаң, белемең артыр, уҡымаһаң — белгәнең дә онотолор. 2. Китап — һинең яҡын дуҫың, юлдашың. 3. Китап — тормош көҙгөһө.

4. Тексты уҡы. Ул нимә тураһында? Исемдәрҙе күсереп яҙ. Килешен, һанын билдәлә.

Китапты яратығыҙ. Ул һеҙҙең тормошоғоҙҙо еңеләйтер, тәрән фекерҙәр тыуҙырыр, нескә тойғолар тәрбиәләр, тормошоғоҙҙо аңларға ярҙам итер. Китап үҙегеҙҙе һәм башҡа кешеләрҙе хөрмәт итергә өйрәтер. Китап аҡылды һәм йөрәкте донъяға, кешегә ҡарата мөхәббәт тойғоһо менән ҡанатландыра.

(Максим Горький)

64. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Һорауҙарға тулы яуаптар яҙ.

1. Һин ҡайҙа йәшәйһең? 2. Һеҙҙең ҡала (ауыл) ниндәй? 3. Һеҙҙең ҡалала (ауылда) кемдәр йәшәй? 4. Унда нимәләр бар? 5. Һинең исемең нисек? 6. Һеҙҙең ғаиләлә кемдәр бар? 7. Улар ҡайҙа һәм кем булып

эшләйҙәр? 8. Мәктәбегеҙ ниндәй? 9. Һеҙҙең класта нисә уҡыусы бар? Улар нисек уҡыйҙар? 10. Һинең дуҫың кем? Ул нисек уҡый?

2. Нөктәләр урынына һорау алмаштарын ҡуйып яҙ.

1. Ҡаланан ... ҡайтҡан? 2. Экскурсияға ... барҙығыҙ? 3. Ауылға артистар ... килә? 4. Бөгөн дәрестә ... юҡ? 5. ... сәскәне бигерәк тә яратаһың? 6. Урманда ... күрҙең? 7. Фәһим ... йүгерә? 8. Һин ... класта уҡыйһың?

3. Уҡы. Исемдәрҙе күсереп яҙ.

Борон ата-бабаларыбыҙ балаларына ниндәй исемдәр ҡушҡан? Тимерхан, Йәнбикә, Йомағол, Йылҡыбай, Байгилде, Йомабикә ... Бик күп башҡорт исемдәре йәнлек, ҡош атамаларынан да килеп сыҡҡан: Ҡобағош, Айыухан, Бүребай, Арыҫлан, Ҡарлуғас, Һандуғас.

4. Тексты уҡы. Исем бир. Һөйләргә әҙерлән.

Мәктәптән һуң ял итергә кәрәк. **Саф** һауала уйнарға, атай-әсәйеңә ярҙам итергә онотма. Был эштәр һине физик яҡтан нығытыр. Компьютер артында оҙаҡ ултырырға ярамай. Кеҫә телефоны менән оҙаҡ һөйләшеү һәм уйнау һаулыҡҡа зыян килтерә. **Телевизорҙы** ла оҙаҡ ҡарама. Китап уҡыу бик файҙалы шөғөл. Тик ятып уҡырға ярамай. Һаулығың тураһында бәләкәйҙән ҡайғырт.

● **1.** Һин һаулығыңды нисек һаҡлайһың? **2.** Текстан ике һөйләмде күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа.

5. Бирелгән һүҙҙәргә сифаттар өҫтәп яҙ.

урман, ағас, япраҡ, ҡар, ямғыр, ел, көн, төн, ауыл

6. Һандарҙы цифрҙар менән яҙ.

дүртенсе, ун, утыҙ ике, егерме алты, йөҙ ҙә бер, ҡырҡ, илле, егерменсе

V бүлек
Мин һәм минең дуҫтарым

65. Тыуған көнөң менән!

1. Текстағы һүрәттәр урынына һүҙҙәр ҡуйып яҙ.

Асияның бөгөн тыуған көнө. Ғаиләләре менән табынға йыйылдылар. Әсәһе ҡыҙына бүләк итте. Атаһы алған. Өләсәһе бәйләгән. Олатаһының бүләге — . Ҡартатаһы биреп шатландырҙы. Ҡартәсәһе һүрәт төшөрөргә бирҙе.

Һый күп ине. Аш ашанылар, бик тәмле булды. Аҙаҡтан менән сәй эстеләр.

Өҫтәл артынан торғас, Асия кейеп ҡараны. ла тап-таман. Өләсәһе бәйләгән йылы. Матур кейемдәрҙе кейеп алғас, олатаһы менән уҡынылар. Ҡартатаһы, ҡартәсәһе менән һүрәт төшөрҙөләр.

Атаһы олатаһын, өләсәһен, ҡартатаһын, ҡартәсәһен бергә ултыртып, фотоға төшөрҙө. Тыуған көн бик күңелле үтте.

(Факиһа Туғыҙбаева)

● **1.** Текстан ҡылымдарҙы тап. Һорауҙары менән күсереп яҙ. **2.** Алты һүҙбәйләнеш уйлап яҙ. **3.** Һуңғы абзацты күсереп яҙ, һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ. **4.** Текстан 2, 3, 4 ижекле һүҙгә бишәр миҫал яҙып ал. Хәреф, өн һанын әйт. **5.** Тыуған көн байрамын яратаһыңмы? Шул турала әңгәмәләшегеҙ.

Ҡылымдар эште, хәрәкәтте йәки хәлде белдерәләр.

2. Төшөп ҡалған ҡылымдарҙы ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡы.

1. Күл тамсынан .... 2. Эш оҫтанан .... 3. Аҙ ..., күп ... . 4. Йөрөгән таш ... .

3. Һүҙбәйләнештәргә ҡапма-ҡаршы мәғәнәлеләрен табып яҙ.

аҡрын яҙа — ..., түбән төшә — ..., тырышып эшләй — ..., йылдам атлай — ..., яҡын йәшәй — ..., ары китте — ...

? **4.** Бирелгән ҡылымдарҙы ҡулланып, ҡотлау яҙ.

ҡотлайым, теләйем, китмәһен, уҡырмын, ҡыуандырырмын

66. Батырҙар ниндәй була?

1. Өҙөктө уҡы. Әкиәттәге батырҙар ниндәй? Ысын тормошта шундай батырҙар осраймы?

...Ир менән ҡатындың ир балалары тыуа. **Малайҙың** сәсе оҙон, ап-аҡ, ти. Уға Аҡъял батыр тип исем ҡушҡандар.

Был малай ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып еткән, айыуға ла, бүрегә лә бирешмәгән. **Ун алты** йәшендә инде бик ҙур кәүҙәле, киң күкрәкле батыр булған.

Бер саҡ ул саң борҡотоп, тау-таш аҡтарып йөрөгән кешене күрә.

— Эй, ағай, һин кем? Нишләп улай саң борҡотоп йөрөйһөң?

— Мин Тау батыр булам, бына **тауҙарҙы** күсереп йөрөйөм, — тигән, ти, кеше.

...Ҡитеп баралар, китеп баралар, ти. Ҙур ҡалын урманға барып еткәндәр. ...Бында берәү ағасты тамыры менән ҡуптарып алып, икенсе урынға ултыртып йөрөй, ти.

— Ағай, ни эшләйһең былай? — тип һоранылар, ти.

— **Бынау** ерҙән анау ергә ағастарҙы күсереп ултыртам. Был ерҙең урманы ҡуйырып киткән, тегендә бик һирәгәйгән, — тип яуап ҡайтарҙы, ти. — Мин Урман батыр булам.

(«Аҡъял батыр» әкиәтенән)

● **1.** «Аҡъял батыр» әкиәтен тулыһынса уҡып сыҡ. Уның артабанғы мажараларын һөйләргә әҙерлән. **2.** Өйрәнелгән һүҙ төркөмдәренә бишәр миҫал күсереп яҙ. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа.

2. Бирелгән һүҙҙәр нисек яһалған?

йыр-ла, аш-а, теш-лә, ағ-ар, йәш-әр, ҡыҙ-ар, һаҡ-ла, уй-ла

3. Былар ҡыҙыҡлы.

Әкиәттәге кеүек көслө кеше беҙҙә лә бар. Ул — Эльбрус Ниғмәтуллин. Рәсәй спортсмены, йәмәғәт эшмәкәре, актёр. «Донъяның иң көслө кешеһе» исемен йөрөтә. Дүрт тапҡыр «Рәсәйҙең иң көслө кешеһе» исемен яулай. «Гиннес рекордтары» китабына ингән.

● **1.** Көслө кешегә генә батыр тип әйтәләрме? Ошо хаҡта класта әңгәмә ойоштороғоҙ. **2.** Эльбрус Ниғмәтуллин тураһында Интернет селтәренән мәғлүмәт табып, иптәштәреңә һөйлә.

67. Егет һүҙе

1. Был хикәйәне сәхнәләштереп ҡарағыҙ.

Мәҡәләләр, ҡотлауҙар яҙылып бөттө. Эш һүрәттәрҙә һәм газетаның исемен яҙыуҙа ҡалды, ә Наил юҡ та юҡ. Көтә торғас, газетаға исем уйлай башланылар.

— «Осҡон», — тип тәҡдим яһаны Морат.

— Бармай, ул икенселәр газетаһының исеме, — тине Таһир.

— «Ялҡын» булһын, — тип ҡушылды Сәғит.

— Яңырағын эҙләйек, — тип ризалашманы Фәҙел.

— Улайһа, «Алмашсы» булһын, — тине Морат.

— Ул бит дүртенселәр газетаһы.

Малайҙар бер фекергә килә алмай тынып ҡалдылар. Наил һаман юҡ.

— Эх, егет һүҙен бирмәһен ине, — тип көрһөндө Таһир.

— Улай тигәс, килер, көтәйек, — тине малайҙар.

...Наил килмәне. Ултыра торғас, Морат һикереп торҙо:

— Таптым, газетаның исемен таптым!

Иртәгәһен Наил дәрескә һуңлап ҡына килеп инде. Инеү менән күҙе стеналағы газетаға төштө. Газетаның башына ҡыҙыл буяуҙар менән «Егет һүҙе» тип яҙылғайны. Наилдың кисә биргән вәғәҙәһе иҫенә төштө. Оялыуҙан ҡаушап, сумкаһын төшөрөп ебәрҙе.

(Берйән Байым)

● **1.** Наилдың ҡылығы һиңә оҡшанымы? Ни өсөн? Һеҙҙең класта шундай хәл булғаны юҡмы? **2.** Текстан ҡылымдарҙы тап, һорау бир, заманын билдәлә. **3. Ярҙамсы, алмашсы, ризалашманы** һүҙҙәрен составы буйынса тикшер. **4.** Күплектәге исемдәрҙе табып, күсереп яҙ, ялғауҙар яҙылышын аңлат.

2. Ҡылымдың заман формаларын ҡара.

	Үткән заман		Хәҙерге заман	Киләсәк заман	
	ни эшләне?	ни эшләгән?	ни эшләй?	ни эшләйәсәк?	ни эшләр?
I з.	ярыш-тым	сыҡ-ҡанмын	ултырам	яҙа-саҡмын	асырмын
II з.	ярыштың	сыҡ-ҡанһың	ултыра-һың	яҙа-саҡһың	асырһың
III з.	ярышты	сыҡҡан	ултыра	яҙасаҡ	асыр

I з.	ярыш-тыҡ	сыҡ-ҡанбыҙ	ултыра-быҙ	бараса-ҡбыҙ	асырбыҙ
II з.	ярыш-тығыҙ	сыҡҡан-һығыҙ	ултыра-һығыҙ	бараса-ҡһығыҙ	асыр-һығыҙ
III з.	ярыш-тылар	сыҡҡан-дар	ултыра-лар	бараса-ҡтар	асырҙар

● Ҡылымдарҙың заманын билдәлә.

ҡайтты, урлаған, барыр, эшләйәсәк, көлә, бәйләй, уйланың, уҡыған, ашай, кейенә, типте

68. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар

1. Уҡы. Ни өсөн хикәйә шулай атала? Малайҙар тураһында һөйлә.

Илдус менән Сәғит беренсе кластан уҡ бергә уҡыйҙар. Быйыл уларҙың класына Әмир исемле малай килде. Тик Әмирҙең уҡыуға күңеле бик төшмәй. Дәрестә иғтибарһыҙ ултыра, өйгә бирелгән эштәрҙе үтәмәй килә. Өҫтәүенә, һуғышырға ғына тора.

Ахыр сиктә, класс йыйылышы үткәрергә булдылар. «Кем дә кем Әмиргә ярҙам итергә теләй, шулар ҡулдарын күтәрә», — тине класс етәксеһе. Бөтә класс дәррәү ҡул күтәрҙе. Ләкин был бурыс Илдус менән Сәғиткә йөкмәтелде. Улар Әмиргә гел ярҙам итергә һүҙ бирҙе.

Дәрестән һуң ике дуҫ Әмиргә ярҙамға китте. Әмирҙәр тапҡырында Илдус менән Сәғиттең ҡолаҡ янынан

бәләкәй таш шыйылдап үтеп китте. Ҡараһалар, ҡулына рогатка тотоп, Әмир тора. Малайҙарға: «Ай-һай, шәп кешеләр! Ярҙам итәләр, имеш!» — тип ҡысҡырҙы. Малайҙар ҡайтып китте.

Икенсе көндө әҙәбиәт дәресендә уҡытыусы «Нимә ул дуҫлыҡ?» тигән темаға инша яҙырға ҡушты.

Уҡыусылар инша яҙҙы. Ҡапыл илаған тауыш ишетелде. Ул Әмир ине. Уҡытыусы Әмирҙән ни булғанын һораны. Ул: «Мин Сәғит менән Илдустан ғәфү үтенәм», — тине.

(«Аманат» журналынан)

● Үтелгән һүҙ төркөмдәренә өсәр миҫал табып яҙ.

2. Ҡылымдарҙың үткән заманда үҙгәрешен күҙәт.

Үткән заман берлек һан. **Ни эшләне?**				
Һүҙҙең тамыры шул хәрефкә бөтһә	Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			
	а, о, у, ы	о-о	ә, ө, ү, и, е	ө-ө
а, о, ы, ә, ө, е	ҡара-ны	ҡоро-но	бейе-не	йөрө-нө
л, м, н, ң	ҡал-ды	йом-до	шиң-де	көл-дө
к, ҡ, п, с, ҫ, т, ш	ҡырҡ-ты	тот-то	киҫ-те	төш-тө
р, ҙ, й, у, ү	бар-ҙы	тор-ҙо	теҙ-ҙе	төр-ҙө

● **Һайра, дуҫлаш, күр** ҡылымдарын таблица буйынса үҙгәрт.

3. Уҡы. Тексҡа исем бир. Һөйләргә әҙерлән.

Сабирйән менән Тимербулат бик дуҫтар. Үткән йәй булған ваҡиға уларҙың дуҫлығын тағы ла нығытты.

Улар икәүләп күлгә һыу инергә килделәр. Сабирйән беренсе булып һыуға һикерҙе, йөҙҙә башланы. Күл уртаһында уның хәле бөттө. Бер нисә тапҡыр һыу йотоп та алды. Ул сәсәй башланы. Быны күргән Тимербулат уға ярҙамға ашыҡты һәм ярға алып сыҡты.

● **1.** Ә һин дуҫыңа ярҙам итә алыр инеңме? **2.** Ҡылымдарҙың заманын билдәлә.

69. Уҡыуҙа ла, ялда ла бергә

1. Тексты уҡы. Төп фекер ниндәй юлдарҙа сағыла? Табып уҡы.

Ағалы-энеле ике малай, мәктәпкә бармайынса, яҡындағы урманда уйнарға булдылар. Тәүҙә уларға ҡуңыҙ осраны. Малайҙар уға:

— Әйҙә, уйна беҙҙең менән! — тинеләр.

— Бик уйнар инем дә, ваҡытым юҡ шул, аҙыҡ эҙләп йөрөйөм, — тине ҡуңыҙ. Балалар бал ҡортон осратып:

— Беҙҙең менән уйна! — тип ҡаранылар. Бал ҡорто тик башын ғына сайҡаны:

— Уйнап йөрөргә бер ҙә ваҡытым юҡ, бал йыйырға кәрәк, — тине.

Малайҙар ҡырмыҫҡаны, тейенде, күгәрсенде, ҡуянды уйнарға саҡырып ҡаранылар. Бөтәһе лә эштән бушамай. Береһенең дә уйнарға ваҡыты юҡ. Ә ҡарабаш турғай уларға асыуланып:

— Һеҙ бөгөн нимә эшләнегеҙ, ялҡау балалар? Мәктәпкә барманығыҙ, уҡыманығыҙ! Етмәһә, башҡаларға ҡамасаулап йөрөйһөгөҙ. Барығыҙ, ҡайҙа ебәргәндәр, шунда китегеҙ! Эш бөткәс кенә ял күңелле ул, — тине ҡошсоҡ...

(Константин Ушинскийҙан)

● **1.** Текстан ярҙамсы һүҙҙәрҙе табып, бәйләнгән һүҙҙәре менән әйт. **2.** Ҡылымдарға һорау бир, затын, заманын билдәлә.

2. Таблица буйынса ҡылымдарҙы затта үҙгәрт.

Берлек һан			Күплек һан		
1-се зат	2-се зат	3-сө зат	1-се зат	2-се зат	3-сө зат
ни эшләнем?	ни эшләнең?	ни эшләне?	ни эшләнек?	ни эшләнегеҙ?	ни эшләнеләр?
ҡараным	йөрөнөң	ҡалды	йүгерҙек	барҙығыҙ	көлдөләр

көйләне, һөйләне, оҙайҙы, йылмайҙы

3. Тексты уҡы. Исем бир. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ. Исемдәрҙең килешен, ҡылымдарҙың заманын билдәлә.

Сафия мәктәптән ҡайтты. Ә әсәһе эштән һаман ҡайтмаған. Сафия сисенде лә аяҡ кейемен таҙартып ҡуйҙы. Тыштан утын индерҙе. Унан ике бүлмәнең иҙәнен йыуып алды. Сәй ҡуйҙы. Бына әсәһе лә ҡайтып инде. «Һай, минең уңғаным, бәләкәй ярҙамсым минең», — тип маҡтаны уны әсәһе.

70. Телефондан кемгә шылтыратаһың?

1. Уҡығыҙ. Диалогта ниндәй әҙәп һүҙҙәре бар?

— Һаумыһығыҙ!
— Һаумыһығыҙ!
— Салауат Ғәли улы, һеҙҙе борсоғаным өсөн ғәфү итегеҙ. Мөмкин булһа, Зөлфиәне саҡырығыҙ әле.
— Рәхим итегеҙ.
— Зөлфиә, хәйерле көн! Зинһар, миңә башҡорт теленән өйгә эште эшләргә ярҙам ит әле.
— Ихлас күңелдән ярҙам итәм.
— Рәхмәт.
— Осрашҡанға тиклем.

2. Уҡығыҙ. Тәлғәт Русланға шылтырата. Телефонды Руслан-дың атаһы ала. Тәлғәт уның менән ошолай һөйләшә:

— Һаумыһығыҙ, Сәлим ағай! Мин Тәлғәт.
— Һаумы, Тәлғәт!
— Сәлим ағай! Русланды телефонға саҡырығыҙ әле, зинһар, беҙ уның менән конькиҙа шыуырға барабыҙ тип һөйләшкәйнек.

1. Тәлғәт телефондан дөрөҫ һөйләшкәнме? **2.** Телефондан һөйләшкәндә ниндәй ҡағиҙәләрҙе белеү кәрәк?

3. Тексты уҡы.

Телефон — алыҫ тауыш

1876 йылда Америкала һөйләгәнде ярты километрҙан ишетергә мөмкинлек биреүсе аппарат уйлап тапҡандар. «Теле» — алыҫ, «фон» — тауыш тигән һүҙҙәрҙе бергә ҡушып, уны «телефон» тип атағандар.

1881 йылда Түбәнге Новгородта, 1882 йылда Мәскәүҙә коммутаторлы тәүге телефон станциялары төҙөлгән. Өфөлә 1894 йылда телефон киң ҡулланыла башлаған.

(«Башҡортостан календары»нан)

● Ҡылымдарҙы тап, затын билдәлә. Улар нисек яһалған? Һандарҙы тап. Улар нисек яһалған?

4. Таблицаны ҡара. **Ни эшләгән?** һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр нисек яһала? Ҡылымдарға ялғауҙар ҡушып яҙ.

Үткән заман берлек һан			
Һорау	Һүҙ	Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)
ни эшләгән?	һуҙ. бөтһә яңғ. тарт. бөтһә	уйла+ған яҙ+ған	телә+гән күр+гән
	һаң. тарт. бөтһә	ҡайт+ҡан	кит+кән

бар, ултыр, һөрт, осра, һелк, һирп, күкрә, ҡалҡ, йомшарт

71. Ниндәй музыка тыңлайһың?

1. Тексты уҡы. Һиңә ниндәй музыка оҡшай? Шул турала һөйлә.

Музыканы классик һәм заманса төрҙәргә бүләләр. Классик музыка ҙур залдарҙа симфоник оркестр ярҙамында башҡарыла. Ул — етди музыка, уны аңлап тыңлау талап ителә.

Заманса музыкаға поп, диско, рэп, техно, рок һәм башҡалар инә. Рок музыкаһына нигеҙ һалыусы — Элвис Пресли һәм «Битлз» төркөмө. Улар рок музыка яратыусыларҙың кумиры.

Төрлө башҡарыусыларҙың йырҙары пластинкаларҙа, аудиояҙмаларҙа, дискыларҙа һаҡлана. Күп йырсылар музыкаль клип сығаралар. Ул көй оҙатыуы буйынса төшөрөлгән ҡыҫҡа фильм. Күптәр клип ҡарарға ярата, сөнки музыка тыңлау менән бер рәттән унда ҡыҙыҡлы мәғлүмәт тә бирелә.

Мин дә музыка тыңларға яратам. Музыка тыңлағанда мин ял итәм.

(Луиза Моталова)

● **1.** Ниндәй музыка төрҙәре була? Классик музыка ҡайҙа башҡарыла? **2.** Классик музыка яҙған композиторҙар тураһында мәғлүмәт әҙерлә. **3.** Текстан ҡылымдарҙы тап, затын, заманын билдәлә. **4.** Алты һүҙбәйләнеш күсереп яҙ. Төп һүҙҙән эйәреүсеһенә һорау ҡуй.

Заһир Исмәғилев — Советтар Союзының халыҡ артисы, Михаил Глинка исемендәге дәүләт премияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Ул бөтә ғүмерен музыка ижадына бағышлай. Уның йөҙәрләгән йырҙары, романстары, «Салауат Юлаев», «Шәүрә», «Ағиҙел тулҡындары», «Урал илселәре», «Аҡмулла», «Ҡаһым түрә» опералары башҡорт сәнғәтен юғары кимәлгә күтәрҙе.

2. Таблицаны ҡара.

Хәҙерге заман берлек һан				
Заты	Һорауы	Һүҙ	Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
			а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)
I	ни эш-ләйем?	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	ҡарай-ым бара-м	һөйләй-ем бирә-м
II	ни эш-ләйһең?		ҡарай-һың	һөйләй-һең
III	ни эш-ләй?	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	бар-а ҡара-й	бир-ә һөйлә-й

● **Уйна, йырла, яҙ, тыңла, бейе, һөйлә, ҡара** һүҙҙәрен затта үҙгәрт.

3. Һүҙҙәрҙе **ни эшләй?** һорауына яуап бирерлек итеп үҙгәртеп яҙ. Һөйләмдәр төҙө.

Өлгө: эшләү — эшләй.

уҡыу, бейеү, йырлау, һоҡланыу, маҡтаныу, тырышыу, ҡайтыу, йөрөү, шыуыу, көлөү, тегеү, килеү, барыу, яҙыу, һайрау

72. Ниндәй театрҙа булдың?

1. Театрҙа үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫеңә төшөр.

Беренсе тапҡыр опера һәм балет театрына барғаным хәтерҙә нык ҡалған. Ул саҡта дуҫым менән Пётр Чайковскийҙың «Аҡҡош күле» балетын ҡарарға

барҙыҡ. Алдан уҡ билет алып, спектакль башланырға ярты сәғәт ҡалғас театрға килеп еттек. Театр эсе тулы халыҡ. Күп апайҙарҙың, инәйҙәрҙең ҡулында гөлләмә. Бөтәһе лә тамаша башланыуын көтәләр. Сәғәт етелә спектакль башланды.

Сәхнәләге күренеш мине әсир итте. Сәхнә эсендә тылсымлы әкиәт донъяһымы ни! Төптә, алыҫта, мөғжизәле урман, бер яҡ ситтә ҡамышлы күл һүрәтләнгән. Уның тирәһендә сағыу кейемдәр кейгән артистар матур-матур хәрәкәттәр башҡарып, аяҡ остарында ғына йүгереп, еңел һәм оҫта итеп бейейҙәр. П. Чайковскийҙың музыкаһы принц Зигфрид менән сихырланған батша ҡыҙы Одеттаның бер-береһен яратыуын һүрәтләй.

Бейеү һәм музыка мине нығ тулҡынландырҙы. Балет миңә ысын әкиәтте хәтерләтте. Унан да һоҡландырғыс тамаша күргәнем юҡ ине әле! Минең дуҫым да балетты бирелеп ҡараны.

Спектакль аҙағында, шаршау ябылғас, залды көслө алҡыштар күмде. Бейеүселәрҙе ҡабат-ҡабат сәхнәгә саҡырҙылар. Уларға гөлләмәләр бүләк иттеләр. Спектакль бик уңышлы үтте.

(«Аманат» журналынан)

● **1.** Ниндәй театрҙа булғаның бар? **2.** Ҡылымдарҙы күсереп яҙ. Затын, заманын билдәлә. **3.** Һуңғы абзацты күсереп яҙ. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

2. Таблицаны ҡара. Бирелгән һүҙҙәрҙе затта үҙгәрт.

Хәҙерге заман күплек һан				
Заты	Һорауы	Һүҙ	Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар	
			а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)
I	ни эш-ләйбеҙ?		ҡарай-быҙ	һөйләй-беҙ
II	ни эш-ләйһегеҙ?		ҡарай-һығыҙ	һөйләй-һегеҙ
III	ни эш-ләйҙәр?	тарт. бөтһә һуҙ. бөтһә	ҡарай-ҙар бара-лар	һөйләй-ҙәр бирә-ләр

яңғырай, бейей, һикерә, күтәрә, йөрөй, уйнай, йөҙә, саҡыра, һоҡлана, көлә, шатлана

3. Тексты уҡы. Был йортта нимә урынлашҡан?

1909 йылда Өфөлә Аксаков халыҡ йорто төҙөргә ҡарар ителә. Бөтә Өфө губернияһынан, хатта күршеләрҙән дә аҡса йыйыла. Хәҙерге Ленин һәм Пушкин урамдары мөйөшөндә ҡыҙыл кирбестән бина ҡалҡып сыға. Бында башҡорт драма, рус, йәш тамашасы, ҡурсаҡ театрҙары эшләй башлай. Хатта данлыҡлы Фәйзи Ғәскәров етәкләгән халыҡ бейеүҙәре ансамбле лә тәүге аҙымдарын ошо сәхнәлә яһай.

73. Кино яратаһыңмы?

1. Текст буйынса һорауҙар төҙө.

Башҡортостан тураһындағы тәүге фильмдар халыҡтың тормошона, ғөрөф-ғәҙәттәренә бәйле була:

«Урал күренештәре», «Ырымбур», «Алтын приискылары эшкәртеү», «Ҡымыҙ».

Граждандар һуғышы осоронан документаль фильмдар һаҡланған: «Өфөлә 1 Май», «Һабантуй», «Ҡыҙыл Башҡортостан», «Башҡорт ҡыҙы». 1940 йылда төп ролдә Арыҫлан Мөбәрәков уйнаған «Салауат Юлаев» фильмы төшөрөлә.

1959 йылда Башҡортостан телевидениеһы эшләй башлай. Уның кино төшөрөү төркөмө байтаҡ фильмдар ижад итә. Улар араһында «Башҡорт балы», Заһир Исмәғилев тураһындағы «Тыуған моңдар» фильмдары иң уңышлыларынан һанала.

1990 йылда «Башҡортостан» киностудияһы эш башлай. Уның режиссёры Әмир Абдразаҡов була. Ул яҙыусы Яныбай Хамматов романы буйынса «Бөртөкләп йыйыла алтын» тигән 4 сериялы нәфис фильм төшөрә.

Беренсе башҡорт сериалы — «Ай ҡыҙы» исемле 33 сериялы телевизион фильм.

Һуңғы йылдарҙа режиссёр Булат Йосоповтың «Быяла юлсы», «Ауыл өҫтөндә йәйғор», «Сөмбөлдөң етенсе йәйе», Мостай Кәрим әҫәре буйынса «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» фильмдары экранға сыҡты.

● **1.** Ябай һәм ҡушма һандарҙы тап. **2.** Текстан яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. **3.** Ҡылымдарҙың затын, заманын билдәлә, юҡлыҡ формаһында затта үҙгәрт.

I	һөйләмәнем	һөйләмәгәнмен	һөйләмәйем
II	һөйләмәнең	һөйләмәгәнһең	һөйләмәйһең
III	һөйләмәне	һөйләмәгән	һөйләмәй

2. Текстағы ҡылымдарҙы юҡлыҡ формаһына ҡуйып яҙ.

Мин киноға йөрөргә яратам. Буш ваҡытым булһа, киноға барам. Барыр алдынан программаларҙы ҡарайым. Аҙаҡ дуҫыма шылтыратып, ниндәй киноға барырға тип кәңәшләшәбеҙ. Беҙ нәфис фильм ҡарайбыҙ, шулай уҡ йәнһүрәт һәм детектив ҡарау оҡшай.

● Яратҡан актёрҙар тураһында мәғлүмәт әҙерлә, уны иптәшең менән интервью формаһында һөйләп, класс алдында сығыш яһа.

74. Музейҙа булғаның бармы?

1. Текст буйынса һорауҙар төҙө. Бер-берегеҙҙең һорауына яуап бирep, әңгәмә ҡороғоҙ.

Башҡорт дәүләт сәнғәт музейына нигеҙ һалыусы булып Михаил Васильевич Нестеров һанала.

Ул Өфөлә тыуа. Бала саҡ йылдары ла Өфөлә үтә. Шунда белем ала, сәнғәткә тәүге аҙымдарын яһай. Аҙаҡ Мәскәү сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Рәссам туғандары, **ата-әсәһе** янына йыш ҡайтып йөрөй.

М. В. Нестеров тыуған яғын нык ярата. Һәр саҡ илһамланып, ижади эшләй. Шул ваҡытта эшләгән һүрәттәре Өфөлә сәнғәт музейында һаҡлана. Өфөлә сәнғәт музейы булдырыу **рәссамдың** хыялы була.

Был музейҙа «Йәш үҫмер Варфоломейҙың күҙ алдына килгәне» картинаһы тотош бер стенаны биләй. Картина эшләнеп бөтмәгән. Өҫкө пейзаж өлөшө генә тамамланған. Эшләгән ваҡытта рәссам картинаны яңылыш боҙа. Шуға күрә **уны яңы туҡымаға** эшләргә мәжбүр була. Яңыһы Мәскәүҙәге Третьяков галереяһында һаҡлана.

Музейҙа рәссамдың Өфө тәбиғәтен һүрәтләгән картиналары күп.

● **1.** Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. **2.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа.

2. Киләсәк замандың затта үҙгәреүен ҡара. Текстың икенсе абзацындағы ҡылымдарҙы өлгө буйынса үҙгәртеп яҙ.

Киләсәк заман берлек һан			Киләсәк заман күплек һан		
Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар		
	а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)
I	уҡ-ыр-мын	эш-ләр-мен	I	уҡ-ыр-быҙ	эш-ләр-беҙ
II	уҡ-ыр-һың	эш-ләр-һең	II	уҡ-ыр-һығыҙ	эш-ләр-һегеҙ
III	уҡ-ыр	эш-ләр	III	уҡ-ыр-ҙар	эш-ләр-ҙәр

Өлгө: һанала — һаналмай, һаналған, һаналыр.

3. Көләмәсте уҡы. Һин нисек яуап бирерһең?

Ҡылымды өйрәнгәндә, уҡытыусы Сәлихкә таҡтала ҡылымды үҙгәртергә ҡушты. Сәлих яҙа башланы:

Мин йыуынырмын	Беҙ йыуынырбыҙ
Һин йыуынырһың	Һеҙ йыуынырһығыҙ
Ул йыуыныр	Улар йыуынырҙар

Сәлих яҙып бөткәс, уҡытыусы унан:

— Был ҡылымдар ҡайһы заманды белдерәләр? — тип һорай.

— Иртәнсәк.

75. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Байрам менән ҡотлап, матур теләктәр яҙ.

2. Ысын дуҫ ниндәй булырға тейеш? Һөйлә.

3. Кинотеатрҙа, театрҙа, музейҙа ниндәй ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға кәрәк? Һанап сыҡ.

4. Телефондан һөйләшеүгә диалог яҙ.

5. Ҡарау, төшөрөү ҡылымдарын затта, һанда, барлыҡ-юҡлыҡта үҙгәрт.

6. Ҡайт, бар ҡылымдарын киләсәк заманда затта, һанда, барлыҡ-юҡлыҡта үҙгәрт.

7. Хикәйәне уҡы. Киләсәк заман ҡылымдарын тап. Ҡылымдарҙы **ни эшлә?** һорауына яуап булған һүҙҙәр менән алмаштыр. Мәғәнә үҙгәрҙеме?

Уҡытыусы балаларға бурыстарын аңлатты:

— Бөгөн дәрестәрҙән һуң спорт майҙансығына эшкә сығабыҙ.

— Бер төркөм уҡыусылар юлды ҡарҙан таҙартыр, икенсе төркөм кескәйҙәргә тау яһар, өсөнсө төркөм шул тауға һыу һибер.

8. Ҡушма һүҙҙәрҙе төркөмдәргә бүлеп яҙ. Һөйләмдәр төҙө.

йүгерә-йүгерә, матур-матур, тиҙ-тиҙ, көлә-көлә, тарта-тарта, һирәк-мирәк, ағай-эне, дуҫ-иш, яҙа-яҙа, иртәле-кисле, икһеҙ-сикһеҙ, аҙыҡ-түлек, ашай-ашай

9. Схема буйынса ҡағиҙәне һөйлә.



VI бүлек
Мине уратып алған донъя

76. Тәбиғәт — үҙ йортобоҙ

1. Уҡы. Тексҡа ҡарата фекереңде әйт.

Йылға буйында, тирә-яҡҡа йәм биреп, муйыл ағасы үҫте. Бер саҡ ап-аҡ сәскәләргә күмелде. Хуш еҫ йыраҡтарға таралды. **Муйыл** ағасына **егәрле** бал ҡорттары, сибәр күбәләктәр ҡунаҡҡа килделәр. Сәскә һуты ашап һыйландылар ҙа, рәхмәттәр әйтеп, кире остолар.

— Их, шәп букет сығыр ине, — тине һыуға килгән ҡыҙҙарҙың береһе.

Бер аҙҙан ҡосаҡтары муйыл сәскәһе менән тулған ҡыҙҙар, көлөшә-көлөшә, йылға буйынан ҡайтып киләләр ине. Бик тә рәнйене муйыл ағасы.

Көндәр үтте. Ул, илауынан туҡтап, ҡалған сәскәләрен ҡойҙо. Улар урынына йәшел генә булып емештәр тумаланды. Һутлы емештәре менән һыйларға уйланы килгән **ҡунаҡтарҙы**. Ҡап-ҡара булып, ҡояшта йылтырап, муйылдары етеште.

Теге ҡыҙҙар тағы килеп еттеләр. Улар тартынып торманылар, иң емешле ботаҡтарҙы һындырып-һындырып алдылар ҙа ҡайтып киттеләр. Муйыл ағасының иларлыҡ та хәле ҡалманы.

Тағы ла яҙ килде. Муйыл ағасы быйыл япраҡ та ярманы, сәскә лә атманы.

(Гөлфиә Юнысова)

● **1.** Һуңғы ике абзацты күсереп яҙ, һөйләм киҫәктәре аҫтына һыҙ. **2.** Алты һүҙбәйләнеш яҙ, төп һүҙҙән әйәреүсеһенә һорау

ҡуй. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә фонетик, морфологик анализ яһа. **4.** Ҡушма һүҙҙәрҙе күсереп яҙ. Улар ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

Гөлфиә Юнысова — Башҡортостандың халыҡ шағирәһе, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Студент йылдарында уҡ балалар өсөн шиғырҙар ижад итә. «Миңә бары өс кенә», «Зәңгәр тубым», «Яҙ хаҡында әкиәт», «Тылсымлы бүләк» тигән китаптары донъя күрә.

2. Таблицаны ҡара.

Киләсәк заман берлек һан			Киләсәк заман күплек һан		
Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар			Һүҙ тамырындағы һуҙынҡылар		
	а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)		а, о, у, ы	ә, ө, ү, и, э (е)
I	бар-асаҡ-мын	бир-әсәк-мен	I	бар-асаҡ-быҙ	бир-әсәк-беҙ
II	бар-асаҡ-һың	бир-әсәк-һең	II	бар-асаҡ-һығыҙ	бир-әсәк-һегеҙ
III	бар-асаҡ	бир-әсәк	III	бар-асаҡ-(тар)	бир-әсәк-(тәр)

- **Уҡы, төҙө, һөйлә** ҡылымдарын киләсәк заманда, затта, һанда, барлыҡ-юҡлыҡта үҙгәрт.

3. Ҡылымдарҙы киләсәк заманға ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡы, мәғәнәләрен аңлат.

1. Эшле килһә, эш арттыр..., эшһеҙ килһә, эш ҡалдыр... . 2. Эшлеклене иген баҫ..., эшлекһеҙҙе йоҡо баҫ... . 3. Беҙ ҡапсыҡта ятма... . 4. Аҡыллы атын маҡта..., аҡылһыҙ ҡҙен маҡта... .

77. Алтын көҙҙө яратам

1. Тексты уҡы. Һорауҙар төҙөп, иптәшең менән диалог ҡор.

Сентябрҙе халыҡта «алтын ай» тиҙәр. Ағас япраҡтары һарғая, ай урталарында япраҡтар ҡойола. Урманда күпләп бәшмәктәр үҫә.

Ҡоштар йылы яҡҡа оса. Бөжәктәр ағас ҡабығы аҫтына ҡаса. Ярғанаттар өндәренә йәшенә. Ҡырағай хайуандар ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләй. Балыҡтар, күмәк йыйылып, йылға-күлдәрҙең тәрәнерәк урындарына төшә.

22 сентябрҙә көн менән төн тигеҙләшә. Шунан көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙая башлай.

(Евгений Кучеровтан)

1. Нимә ул «әбейҙәр сыуағы»? Аңлатмалы һүҙлектән тап. **2.** Көҙҙөң тағы ниндәй билдәләре әйтелмәгән? Шул турала һөйлә. **3.** Тексты киләсәк заманға ҡуйып һөйлә.

2. Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр, һөйләмдәрҙән текст төҙөп, дәфтәреңә яҙ.

1. Көндәр, башлай, ҡыҫҡара. 2. Ҡырҙар, сума, тынлыҡҡа. 3. Тамамлана, баҫыуҙарҙа, эш. 4. Яҡҡа, китә, ҡоштар, йылы. 5. Ҡоя, япраҡтарын, ағастар. 6. Һарғая, болондарҙа, үләндәр.

3. Таблица буйынса киләсәк заман тураһында һөйлә.



4. Көҙ тураһында мәҡәл, әйтемдәрҙе уҡы.

1. Көҙгө ашлыҡты көлгә сәс, яҙғы ашлыҡты боҙға сәс. 2. Алтын көҙ арты — һалҡын көҙ. 3. Себеште көҙ һанайҙар.

78. Ҡар шығырлай табанда

1. Тексты уҡы. Ҡылымдарҙы табып, уларҙың ҡайһы заманда тороуын әйт.

Ҡарҙар яуа! Тирә-яҡ ап-аҡ. Тиҙҙән ул ҡар боҙҡәләмгә әйләнәсәк, сыңлап-йырлап тамсы булып тамасаҡ. Әгәр шуны ишетә алһаң, һин йырсы булырһың.

Ҡар аҫтында шаулап ултырған игенде күҙ алдыңа килтерһәң, һин игенсе булырһың. Әгәр бәҫ ҡаплаған ағас ботаҡтарында йәм-йәшел япраҡтар, аллы-гөллө сәскәләр күрһәң, һин рәссам буласаҡһың.

Ҡарҙар яуа! Яуһын, яуһын! Ул беҙгә шаулатып яҙ килтерер, сәскәле йәйҙе алып килер, мул уңышлы алтын көҙҙө яҡынайтыр.

(Кәүсәриә Шафиҡованан)

● **1.** Текстан тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе тап. **2.** Ниндәй ҡушма һүҙҙәр осраны? Улар ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

2. Шиғырҙы уҡы.

Матур көн

Ынйы-ынйы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн!
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.

Бәүелеп-бәүелеп төшә,
Ҡар яуа — матур ниндәй!
Әйтерһең дә, кемдер күктә
Ҙур иләктән он иләй.

(Сафуан Әлибай)



Сафуан Әлибай — шағир һәм журналист, Башҡортостан Республикаһының балалар һәм үсмерҙәр әҙәбиәте өлкәһендәге Һаҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Ул «Башҡорт балалар антологияһы»ның икенсе китабын төҙөп сығарған. Башҡорт теленә Александр Пушкин, Рәсүл Ғамзатов һ. б. шағирҙарҙың әҫәрҙәрен тәржемә иткән.

3. Ҡылымға морфологик анализ өлгөһөнә ҡарап, бирелгән һүҙҙәрҙе тикшер.

яуҙы, оса, төшмәй, ҡайтыр

4. Тамыры тик **о, ө** хәрефтәренән торған ҡылымдар уйла, уларҙың икәүһен затта үҙгәрт.

5. Бөгөнгө көндө тасуирлап, дәфтәреңә яҙ.

79. Ҡарҙар ирей, һыу таша

1. Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

Умырзая

— Тып-тып! Тып-тып! — Тамсылар тамды.

— Сырҡ-сырҡ! Яҙ килде, яҙ! — Турғайҙар күңелле сырҡылдашты.

Ҡарҙан эшләнгән Ҡыш бабай гөрләүек булып аҡты.

— Фьют-фьют! Фьют-фьют! — Сыйырсыҡтар һайраны.

Ҡалҡыулыҡта берәү ипләп кенә башын ҡалҡытты. Тик күҙен асманы. Шаян яҙғы елдән, һыуыҡ тейеүҙән ҡурҡты. Ҡояштың йылы нурҙары иркәләп битенән һыйпаны.

— Ас күҙеңде, батыр бул, ҡурҡма.

— Хәҙер... хәҙер, — тип ашыҡмай ғына тирә-яғына күҙ һалды.

— Һинең исемең нисек? — тип һораны берәү көслө тауыш менән, ә үҙе: — ә мин Ҡуян, — тине.

— Минме?.. Мин үҙемдең исемемде белмәйем.

— Мин дә һинең исемеңде белмәйем. Мин әле бәләкәй... Һине лә беренсе тапҡыр күрәм, — тип Ҡуян көлдө.

— Хәҙер мин һинең исемеңде әсәйемдән һорап киләм, — тине ниндәйҙер нәҙек кенә тауыш. Ҡуян уға ҡарап:

— Ә һин үҙең кем һуң?

— Мин — Ҡырмыҫҡа.

Ҡырмыҫҡа китеп тә өлгөрмәне, баш өҫтөндә сыбар Күбәләк әйләнә башланы.

— Шуны ла белмәйһеңме? — тине. — Сәскә бит ул.

— Ниндәйҙер тауыш ишетелә, — тине Ҡуян, — әсәйем мине көтәлер инде... Һау бул, Сәскә!..

— Урманға ҡайын бөрөләрен йыйырға килгән уҡыусылар араһында бәләкәй генә ҡыҙыҡай ҙа бар ине. Ул сәскәне күргәс, шатлығынан ҡулдарын сәпәкәйләп, һоҡланып ҡысҡырҙы.

— Эй, бында килегеҙ! Ниндәй матур күк Умырзая үҫеп сыҡҡан. Ишетәһегеҙме, Умырзая! Тик өҙмәгеҙ!.. Умырзая үҫә бында.

(Айһылыу Йәғәфәрованан)

● **1.** Һин умырзаяны нисек күҙ алдына килтерҙең? Һүрәтен төшөр. **2.** Текста телмәрҙең ниндәй төрө ҡулланылған? Телмәр төрҙәрен иҫеңә төшөр. **3.** Әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр осраны? **4.** Текстың планын төҙө. План буйынса һөйлә. **5.** Текстан ҡылымдарҙы тап, заманын, затын билдәлә. **6.** Газета-журналдарҙан, әҙәби китаптарҙан йыл миҙгелдәре тураһында шиғырҙар уҡып ишеттерегеҙ.

2. Таблица буйынса ҡылым тураһында һөйлә.



80. Онотмаһын мине Тыуған ил!

1. Ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Телмәр төрөн билдәлә. Текст төрө ниндәй?

— Ҡайһы яҡтарҙа тыуып үҫтең һин, батыр?

— Мине һәр кем үҙенең яҡташы тип уйлай. Һин дә шулай уйла, егет.

— Исемең нисек һинең, яҡташ?

— Исемем Билдәһеҙ һалдат минең.

— Йәшһеңме, ҡартһыңмы һин?

— Ил яҙмышын иңемә алғанда, мин тап һинең йәшеңдә инем.

— Тимәк, һин әле лә йәш. Үлгәндәр ҡартаймай, үлгәндәр мәңге йәш ҡала.

— Йәштәме ни эш, егет!

— Ҡайһы ерең яраланды һуң һинең?

— Йөрәгем, егет, йөрәгем. Ул яра әле лә төҙәлмәгән. Сөнки ерҙә атыш-үлтереш һаман дауам итә.

— Ана, күрәһеңме, баш осонда йәп-йәш ике егет һаҡта тора. Ул егеттәр илебеҙҙең күген һаҡлар. Һин тыныс йоҡла, яҡташ!

— Рәхмәт, егет.

— Иҫән бул, яҡташ, мин тағы килермен әле.

— Мин көтөрмөн, хуш!..

(Рәшит Ханнанов)

● Өҙөктән үҙ аллы һүҙ төркөмдәренә миҫалдар яҙып ал. Тағы ла ниндәй геройҙарҙы беләһең?

2. Тексты уҡы. Тағы ла ниндәй геройҙарҙы беләһең?

Башҡорт ыласындары

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Башҡортостан егеттәре һәм ҡыҙҙары ҙур батырлыҡ күрһәтте. Улар араһында лётчиктар ҙа бар: Муса Гәрәев, Ғәли Мәжитов, Мәғүбә Сыртланова, Михаил Шишков һәм башҡалар.

Батырлыҡтары өсөн лётчик-штурмовик Муса Гәрәев ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды.

Советтар Союзы Геройы Мәғүбә Сыртланова ла бик күп ҡыйыулыҡ күрһәтте. Ул төнгө бомбардировщиктар

полкында хеҙмәт итте. Үҙенең бәләкәй генә әкрен осоусы самолётында Мәғүбә Сыртланова төндәрен фашистарҙың окоптарын бомбаға тотто. Хәҙер Бәләбәй ҡалаһындағы бер мәктәп Мәғүбә Сыртланова исемен йөрөтә.

(Раил Бикмөхәмәтов)

● **1.** Текстан яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. **2.** Был геройҙар тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте Интернет селтәренән уҡып бел. **3.** Текстың планын төҙө.

81. Гүзәл ваҡыттар етте

1. Шиғырҙы уҡы.

Йәйем

Белмәй ҡалдым, һиҙмәй ҡалдым
Йәйҙең нисек үткәнен.
Әле генә үтһә лә йәй,
Мин яңынан көтәмен.
Йәшел йәйем, һин үҙең бит
Йәмдәрҙең дә иң йәме.
Киләһе йыл ашығып кил,
Оҙаҡҡа кил һин, йәме.

(Берйән Байым)

● **1.** Йәй миҙгеле нисек һүрәтләнгән? Ни өсөн автор йәйҙе көтә тип уйлайһың? Һиңә йәй оҡшаймы? Уны көтәһеңме? **2. Й** хәрефенә шиғырҙан ниндәй һүҙҙәр таптың? Уҡы.

2. Өҙөктө уҡы, ҡылымдарҙы тап.

Йәй — күңелле ялдар, йыраҡ сәфәрҙәр мәле. Кемдер болоттарға тиңләшеп, самолётта гиҙә, кемдер, аҡ

тулҡындар ярып, караптарҙа йөҙә. Тик күпселек пассажирҙар поезда юл йөрөүҙе хуп күрә. Сәфәр ваҡытында тәбиғәттең матурлығы менән һоҡланырға, ауыл һәм ҡалалар менән тәҙрә аша булһа ла танышырға була. Поезд туҡтаған арала сығып аҙыҡ һатып алырға, вокзал ҡаршыһында иҫтәлеккә фотоға төшөргә мөмкин.

(«Башҡортостан календары»нан)

● **1.** Текстың һөйләмдәрен һорау һөйләмдәргә әйләндереп уҡы.
2. Тарҡау һөйләмдәрҙән йыйнаҡ һөйләмдәр төҙө.

3. Һүҙҙәрҙә баҫымдар ҡуй. Һүҙ төркөмдәрен билдәлә.

матурлыҡ, бесәндәгеләр, көҙгө тынлыҡ, һутлы бесән, бәләкәйерәк, иң матуры, һарғылт төҫ, тарихи дата, унар ҡәләм, бөтә кеше, һәр кем, ошондай, ҡайһылай, әллә кем, ниҙәрҙе, уҡығыҙ, йөҙәһең, килермен, барғанһың, бөткәнсе, ваҡыт-ваҡыт, бөтөнләй, ләкин, сөнки, тағы, машина, трамвай, ракета, мотороллер

● Ошо һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып һөйләмдәр, һөйләмдәрҙән текст төҙө.

82. Ямғыр, яу, яу!

1. Текста нимә тураһында һүҙ бара? Ямғыр ни өсөн кәрәк?

Көн боҙолдо. Ергә эре-эре тамсылар төштө. Һорғолт ҡара болоттарҙы сыймаҡлап, йәшен балҡыны, күк күкрәне. Шунан, биҙрә менән ҡойғандай ташып, ямғыр яуырға тотондо. Бишитәк тауы башындағы ҡарағайҙарҙың береһен йәшен атты. Ямғыр һаман

туҡтаманы. Соҡорҙарға һыу тулды. Юл буйлап шарлауыҡтар аҡты.

(Яныбай Хамматовтан)

● Ҡылымдар ҡайһы заманда ҡулланылған? Тексты үткән заманның икенсе формаһына ҡуйып яҙ.

? **2.** Һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, «Йәй көнө» темаһына инша яҙ. Һөйләмдәр әйтелеү маҡсаты буйынса төрлө булһын.

тырышып уҡыныҡ, көндәр йылынды, мәктәп баҡсаһы, уҡыуҙар тамамланды

беҙҙең ғаилә, картуф, сөгөлдөр утарбыҙ, лагерға барҙылар, китаптар уҡырмын, телевизор ҡарармын, мал-тыуар үҫтерербеҙ, бәпкәләр ҡарармын

3. Нөктәләр урынына белешмәләге һүҙҙәрҙе ҡуйып, йомаҡтарҙы күсереп яҙ. Яуабын тап.

1. ... һыйыр тороп китте, ... һыйыр ятып ҡалды. 2. ... турғай боҙ тишә. 3. ... килен һыуға бара, тәңкәләре ҡойолоп ҡала. 4. ... юрғанын ташлай, һыртын күрһәтә башлай.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: йыл, аҡ, моронһоҙ, ҡара, йәш.

● **Ниндәй?** һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ.

83. Телмәр үҫтереү. Изложение

● Уҡы. Тексҡа исем бир.

Ларион олатай урманда һунар итә ине. Көтмәгәндә көйөк еҫе сыға башланы. Ел сыҡты. Урманда янғын башланды. Янғын ерҙән ҙур тиҙлек менән таралды.

Олатай тұңғактәргә абына-йығыла йүгерҙе. Төтөн уның күҙҙәрен әсеттерҙе. Артта янғындың шаулауы һәм шарт-шорт килеп ағастарҙың яныуы ишетелә ине. Ҡапыл олатайҙың аяҡ аҫтынан ҡуян килеп сыҡты. Ҡуян аяғын көскә һөйрәп, әкрен генә йүгерә ине.

Олатай ҡуянға бик шатланды. Сөнки ул белә, хайуандар кешегә ҡарағанда, янғындың ҡайһы яҡтан килеүен яҡшы тоя. Һәр саҡ уттан ҡотолоп ҡала. Ларион ҡуян артынан йүгерә. Олатай үҙе илай, үҙе йүгерә, ҡуяндың әкренерәк йүгереүен үтенә.

Ҡуян олатайҙы янғындан алып сыға. Улар урмандан сығып, бер күл янына арыуҙан килеп йығылалар. Олатай ҡуянды өйөнә алып ҡайта. Уның аяҡтары һәм эсе утҡа бешкән була. Олатай ҡуянды дауалай һәм үҙендә ҡалдыра.

(Константин Паустовскийҙан)

● **1.** Текстың төрөн, темаһын, төп фекерен билдәлә. **2.** План төҙө. Текст буйынса изложение яҙ.

84. Был ҡай саҡ була?

1. Тексты уҡы.

Йылдың ҡайһы миҙгеле матур? Быны әйтеүе ауыр. Һәр миҙгелдең үҙенең матурлығы бар.

Ҡышын ер аҡ юрған ябына. Балалар санала, саңғыла шыуа. Көҙ мул уңыш килтерә. Яҙ менән йәй әйтеп бөтөргөһөҙ гүзәл. Шулай ҙа кешеләрҙең күбеһенә йәй оҡшай.

● **1.** Һиңә ҡайһы миҙгел оҡшай? Шул турала әңгәмә ҡороғоҙ. **2.** Икенсе абзацты һөйләм киҫәктәре буйынса тикшер.

2. Уҡы. Бирелгән һөйләмдәрҙе өндәш һүҙҙәр булырлыҡ итеп үҙгәртеп яҙ.

Гөрләүектәр аға. Йылғаларҙа боҙ ҡуҙғала. Улар шатыр-шотор килеп ярыла. Ағиҙелдә өй ҙурлығы боҙҙар аға. Йылға, күлдәр таша. Туғай, яландарҙы һыу баҫа. Кешеләр кәмә әҙерләй. Ағастарҙың төҫө үҙгәрә. Улар бөрөләнгән. Улар йылы көн көтәләр. Япраҡ ярырға, тирә-йүнде йәмгә күмергә ашығалар.

Өлгө: Гөрләүектәр, ағығыҙ!

3. Һынамыштарҙы атай-әсәйеңә уҡып күрһәт.

1. Көҙ оҙаҡ килһә, яҙ һуң килер. 2. Иртәнсәк ҡояшты болот ҡаплаһа, аяҙ булыр. 3. Йәй көнө бик ҡыҙҙырһа, ямғыр яуыр. 4. Кисен һауа йылынып китһә, ямғыр яуыр. 5. Ҡарға ҡарҙа ҡойонһа, көн боҙола. 6. Ҡаҙ һыңар аяғында торһа — һалҡынға.

4. Йөрөй, өшөй, онотмай, көлмәй, тота, бөтә ҡылымдарын замандарҙа үҙгәрт. Биш һөйләм төҙөп яҙ.

85. Ауылда һабантуй

Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Исем биреген.

Һабантуйҙың ҡыҙған мәле. **Оло яландың бер яҡ ситендә юртаҡтар тора.**

Мин юртаҡтар эргәһенә яҡынлаштым. Ни ишетәм, улар үҙ-ара һөйләшә икән!

— Ни хәл, Турыҡай, был юлы алдынғылыҡты миңә бирәһеңме? — тине шаяртып Ерәнсәй.

— Көс һынашып ҡарайыҡ та, унан күҙ күрер, — тине тегеһе.

— Әҙерләндегеҙме һуң?

— **Хужам менән йыл буйына шөғөлләндек инде.** Тауҙарҙы, яландарҙы буйланыҡ. Ә һин бөгөн бик етеҙ булырға оҡшайһың.

Шул саҡ улар янына, һалмаҡ ҡына атлап, Саптар килде.

— Йә, дуҫтар, ярышҡа сығабыҙмы?

— Бәй, Ерәнсәй, һин дә минең кеүек йөк аты ла баһа. Ә үҙең ярышҡа әҙерләнәһең шикелле?

— Һин, Саптар, күп нәмәне белмәйһең икән әле. Бына һин — йөк аты. Ауыр йөктәрҙе лә еңел тартаһың. Ә Турыҡай — сабыш аты. Һабантуйҙарҙа уға тиң юҡ. Ә беҙҙең тоҡом — сабыш аты ла, йөк аты ла.

— Ҡыҙыҡ икән. Һин Турыҡайҙы ла уҙаһыңмы, улай булғас?

— Бына бөгөн күрерһең инде. **Элек беҙҙең атай-олатайҙар яуға йөрөгәндәр.** Турыҡайҙың туғандары үтә алмаған таулы-ташлы ерҙәрҙе лә беҙ еңел үтәбеҙ.

— Шулай шул, — тип һүҙгә ҡушылды Турыҡай. — Үтә лә сыҙамлы, үтә лә сая булғанға, Ерәнсәйҙең тоҡомон «башҡорт аты» тип йөрөтәләр бит. Ә һин үҙең нишләп йөрөйһөң һуң, Саптар? Әллә һин дә сабышып ҡарамаҡсыһыңмы?

— **Юҡ, мин еңеүселәрҙең барыһына ла бүләктәр алып килдем.**

Аттарҙың шулай бик татыу, ихлас һөйләшкәндәрен ишетеп, ҡыуандым да ярышты түҙемһеҙлек менән көтә башланым.

(Салауат Кәримов)

● **1.** Текста ниндәй һөйләмдәр осраны? **2.** Өндәш һүҙҙәр булған һөйләмдәрҙе уҡып ишеттер. **3.** Билдәләнгән һөйләмдәрҙе һөй-

ләм киҫәктәре буйынса тикшер. Уларҙан йыйнаҡ һөйләмдәр төҙөп буламы? **4.** Үтелгән һүҙ төркөмдәренә 5-әр миҫал һайлап яҙ. **5.** Һабантуй байрамы тураһында һөйлә.

86–87. Ниндәй газета-журналдар уҡыйһың?

1. «Аҡбуҙат» журналының һуңғы һанын уҡы. Журналға анализ яһарға әҙерлән.

— «Аҡбуҙат» һүҙе нимә аңлата? Ниңә журнал шулай атала?

— Кемдәр журнал алдыра һәм һәр һанын уҡып бара?

— Журналда һеҙгә нимәләр оҡшай?

— «Аҡбуҙат» журналында кемдәрҙең мәҡәләләре баҫыла?

— Һеҙҙең райондан, ҡаланан яҙышҡан уҡыусылар бармы?

— Һинең журналға мәҡәлә яҙғың киләме?

— Журналдың биҙәлеше оҡшаймы?

— «Йыл миҙгелдәре» темаһына арналған әҫәрҙәр, шиғырҙар, һүрәттәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар тап. Үҙеңә оҡшаған әҫәрҙәрҙе уҡы.

2. «Йәншишмә» газетаһының һуңғы ике һанын ал. Уҡы. Текстарҙа осраған ҡушма һүҙҙәрҙе яҙа бар.

Планға таянып сығыш яһарға әҙерлән:

1. Бөтәһе нисә һүҙ табылды?
2. Нисә һүҙ ҡушып яҙылған?
3. Нисә һүҙ дефис аша яҙылған?
4. Башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәр йыш осраймы әллә һирәкме?

3. Тексты уҡы. Исем бир.

«Йәш төҙөүсе», «Башҡортостан пионеры», «Йәншишмә» — былар барыһы ла республикала балалар һәм үҫмерҙәр өсөн сыҡҡан газетаның өс исеме.

1930 йылдың 12 февралендә «Йәш төҙөүсе»нең беренсе һаны донъя күрә. Шағир Хәй Мөхәмәтйәров газетаның мөхәррире була.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронан башлап туҡталып торғандан һуң, 1959 йылдың 1 ғинуарынан ул «Башҡортостан пионеры» исеме менән яңынан сыға башлай. Мөхәррире итеп шағир Шәриф Биҡҡол билдәләнә.

1991 йылда газетаның исеме «Йәншишмә» тип алмаштырыла. Газета был осорҙа рухи яҡтан матур, дөрөҫ тәрбиә биреүҙе үҙенең төп эше итеп һайлай. Туған телде, халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен сағылдыра. Газета йәш хәбәрселәр өсөн конкурстар, семинарҙар, слёттар ойоштора. «Йәншишмә» мәктәбен үткән уҡыусылар журналистиканы үҙ һөнәре итеп һайлай.

«Йәншишмә» йылдан-йыл матурлана, уның йөкмәткеһе байый бара. Хәҙер ул төҫлө булып сыға.

(Зөһрә Ҡотлогилдинанан)

● **1.** Үтелгән һүҙ төркөмдәренә 5-әр миҫал һайлап яҙ. **2.** Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙ. **3.** Текста ниндәй һандар бар? **4.** Текстан тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе тап.

4. Алмаштар урынына өндәш һүҙҙәр ҡуйып, күсереп яҙ.

1. Һин сәскә яратаһыңмы? 2. Ләкин неҙ уларҙы артыҡ өҙмәгеҙ! 3. Һин еләк йыйырға яратаһыңмы? 4. Еләктән нимәләр әҙерләйһегеҙ?

88–89. Телевидение программаһы

1. Уҡы. Һорауҙарға яуап бир.

Телевизорҙа һәр кем өсөн **төрлө** тапшырыуҙар бик күп. **Беҙ** бөтә ғаиләбеҙ менән телевизор ҡарарға яратабыҙ.

Атайым спорт ярыштары ҡарарға ярата. Хоккей, футбол, волейбол ярыштары башланһа, ашауын да онота. Әсәйем аш-һыу әҙерләү, һаулыҡ тураһындағы тапшырыуҙарҙы ҡарай. Оҡшаған рецептарҙы яҙып ала. Үҙе лә **аш-һыу** әҙерләргә оҫта.

Ҡустым йәнһүрәт ҡарай. Көнө буйы ҡараһа ла, бер ҙә **ялҡмай**. Ә ағайым «Музбаҙар», «Тай-тулаҡ», «Мегаполис», «КВН» тапшырыуҙарын ярата. Мин «Сулпылар», «Семәр» тапшырыуҙарын ҡарайым. Был тапшырыуҙарҙа ҡатнашҡан тиҫтерҙәремдең оҫталығы, таланты хайран ҡалдыра. Үҙем дә бер нисә һүрәтемде ебәрҙем әле.

● **1.** Һин ниндәй каналдарҙы ҡарайһың? Ниндәй тапшырыуҙар оҡшай? **2.** Икенсе абзацты күсереп яҙ, һөйләм киҫәктәре аҫтына һыҙ. **3.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа. **4. Һүрәттәремде, тапшырыуҙарҙы, ҡалдырмай** һүҙҙәрен составтары буйынса тикшер.

2. Уҡы. Текста ниндәй яңғыҙлыҡ исемдәр осраны? Улар нимә аңлата?

Радиотапшырыуҙар

Хәйерле көн, Өфө һөйләй! Радионы асҡан һәр кеше ошо яғымлы **һүҙҙәрҙе** ишетә. Миңә лә ошо **сәләмләү** оҡшай. Уны «Юлдаш» каналын алып барыусылар

әйтә. «Юлдаш» каналы тәүлек әйләнәһенә эшләй. Унда балалар өсөн дә, ололар өсөн дә **ҡыҙыҡлы** тапшырыуҙар күп. Был каналда **яңылыҡтарҙы** белергә, яңы йыр тыңларға, уйындарҙа ҡатнашып, бүләктәр оторға мөмкин.

Мин был каналда барған «Иләү» тапшырыуын бик яратып тыңлайым. Радио аша төрлө ерҙә йәшәгән туғандарға сәләмдәр, ҡотлауҙар, бик кәрәкле **хәбәрҙәрҙе** ебәрергә була. Ул беҙҙе юлда барғандар менән дә тоташтыра, сит илдәргә лә алып сыға.

● **1.** Текстан тамыр, яһалма, ҡушма һүҙҙәргә 5-әр миҫал һайлап яҙ. **2.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшер. **3. Юлдаш, иләү** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа.

90–91. «Һүҙ төркөмдәре» проект эше

1. «Йәншишмә» газетаһынан бер хикәйәне һайлап ал. Уҡы.

2. Класс төркөмдәргә бүленһен. Ошо хикәйәнән беренсе төркөм — исемдәрҙе, икенсе төркөм — сифаттарҙы, өсөнсө төркөм ҡылымдарҙы һайлап яҙып алһын.

3. Төркөмдә эштәрҙе бүлешеп алығыҙ: мәғлүмәт йыйыу; эште дөйөм тәртипкә килтереү; сығыш яһау.

4. Планға таянып, сығыш яһа.

1. Бөтәһе нисә һүҙ табылған?
2. Беренсе төркөм: исемдәр ниндәй һанда, килештә ҡулланылған?

Икенсе төркөм: сифаттар төп (дәрәжәләре) йәки шартлымы?

Өсөнсө төркөм: ҡылым ниндәй заманда, затта, һанда килә?

3. Йомғаҡлау: текста ниндәй һүҙ төркөмө йышыраҡ осрай.

5. Эшеңә баһа бир (эш ниндәй булды: ҡыҙыҡмы, ауырмы әллә еңелме, үҙ аллымы әллә ололар ярҙам иттеме, класташтарың менән бәйләнеш нисек булды, проект уңышлы булдымы).

92. Минең тормошта компьютер

1. Компьютерҙың файҙаһы һәм зыяны тураһында һөйлә. Ниндәй ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға кәрәк?

Компьютерҙа уйнайым,
Уйнап-уйнап туймайым.
Дүрт булды ике күҙем,
Дүртәүгә әле түҙҙем.
Уйнап-уйнап туймағас,
Ваҡытты ла тоймағас,
Алты булды бит күҙем,
Алтыға әле түҙҙем.
Эй компьютер, компьютер,
Минән китсе, ары тор.

(Факиһа Туғыҙбаева)

1. Ни өсөн баланың күҙе дүрт, алты булған? **2.** Һин компьютерҙа күпме ваҡыт уйнайһың? **3.** Ҡылымдарҙы күсереп яҙ, затын, һанын, заманын билдәлә.

2. Тексты уҡы, һөйлә.

Мин **компьютерһыҙ** бер көн дә йәшәй алмаҫ кеүекмен. Мин һәр ваҡыт компьютер **ҡулланам**. Ул минең өсөн яҙыу машинкаһы ла, адрестар китабы

ла, яҙыуҙағы хаталарымды тикшереүсе лә. Шулай уҡ теләгән ваҡытта Интернет селтәренә инеп, кәрәкле мәғлүмәтте табып була. Компьютерҙа уйнап та, **уның** ярҙамында уҡып та була. Минеңсә, ул тормошта ҙур ярҙамсы!

1. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ. **2.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа, составы буйынса тикшер. **3. Минеңсә, әйбер** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа.

3. Йәйәләрҙе асып, ҡушма һүҙҙәр яһа. Һүҙлектән тикшер.

арлы (бирле), бары (бер), йөҙ (түбән), баш (түбән), ашыҡ (бошоҡ), бер (аҙ), һирәк (һаяҡ), аяҡ (өҫтө), аяҡ (үрә), аллы (артлы), илке (һалҡы)

93–94. Почтала. Поликлиникала

1. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Ошоға оҡшатып иптәшең менән телеграмма ебәреү, посылка һалыу темаларына диалогтар ҡороғоҙ.

— Әйтегеҙ әле, маркалы конверт күпме тора?
— Ун биш һум.
— Ә открытка?
— Егерме биш һум.
— Миңә бер конверт һәм тыуған көн менән ҡотлау өсөн ике открытка бирегеҙ.
— Бөтәһе 65 һум.
— Рәхмәт! Һау булығыҙ!

1. Почта ни өсөн кәрәк? Хат ташыусы һөнәре тураһында һөйлә. **2.** Нимә ул **посылка, бандероль**? Аңлатмалы һүҙлектән табып уҡы. Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙө. Баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе табып, аҫтына һыҙ.

2. Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Поликлиникала булғаның бармы? Унда ниндәй табипҡа мөрәжәғәт иттең?

— Миңә теш табибына күренергә ине.
— Адресығыҙ, фамилияғыҙ?
— Минең карточкам юҡ. Мин һеҙҙә беренсе тапҡыр.
— Улай булғас, карточка тултырайыҡ.
— Фамилияғыҙ, исемегеҙ, тыуған йылығыҙ?
— Ҡыҙырасов Урал Салауат улы, 2000 йылғы.
— Ҡайҙа уҡыйһың?
— Авиация техникумында.
— Өй адресығыҙ?
— Баязит Бикбай урамы, 84-се йорт, 38-се фатир.
— Булды. Бына табипҡа талон. Беренсе ҡат, 112-се кабинетҡа үтегеҙ.

● **1.** Процедура кабинетында ни эшләйҙәр? Ошо темаға парталашың менән диалог ҡороғоҙ. **2. Дарыу, төнәтмә** һүҙҙәренә фонетик анализ яһа. **3.** Үтелгән һүҙ төркөмдәренә бишәр миҫал һайлап яҙ. Шулар менән өс һөйләм төҙө.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: укол алыу өсөн, йүнәлтмә, ҡасан уңайлы.

95. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек?

1. Текст буйынса һорауҙар төҙө. Парталашың менән әңгәмәләшегеҙ.

Һеҙ дүрт йыл буйына башҡорт телен уҡынығыҙ. Өндәрен, хәрефтәрен, һүҙҙәрен, һөйләмдәрҙе өйрәндегеҙ. Ундағы терминдар ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң?

Һөйләшеүҙе, фекер алышыуҙы телмәр тип атағандар. Телмәр «тел» һүҙенән килеп сыҡҡан. Уға тамырҙаш һүҙҙәр булып «телләшеү», «телһеҙ ҡалдым» тигән һүҙҙәр бар.

Ә «һөйләм» тигән термин ҡайҙан барлыҡҡа килгән? Ул «һөйлә, һөйләш, һөйләшеү» тигәндән алынған. Тамыры — «һөйлә».

Телмәрҙәге һүҙҙәр төрлө-төрлө төркөмдәргә бүленә. Шунан һүҙ төркөмө килеп сыҡҡан.

Әйберҙең, предметтың, ваҡиғаның, күренештең нисек аталғанын аңлатҡан һүҙҙәр исем тип йөрөтөлә.

Ҡылым тигәне «ҡыл» (эшлә) һүҙенән килеп сыҡҡан. Эш-хәрәкәтте, хәл-торошто белдерә.

Сифат — «билдә» тигән һүҙ. Әйберҙең билдәһен белдерә.

● Исемгә, сифатҡа, ҡылымға 5-әр миҫал уйлап яҙ. Өс һөйләм төҙө. Һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙ.

2. Шиғырҙы уҡы.

Мин — алма

Алма, алма, тиһәләр ҙә,
Бик алалар бит әле.
Беҙҙе ҡулдарында тотоп,
Ҡыуаналар бит әле.

Йәшелебеҙ, һарыбыҙ бар,
Һәр саҡ ал булмай алма,
Алдыңдағы алманы ал,
Алданып тороп **ҡалма**.

(Гөлфиә Юнысова)

● **1.** Шиғырҙан омонимдарҙы тап. Улар ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай? **2.** Билдәләнгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһа.

3. Һүҙҙәргә тейешле ялғауҙарын ҡушып, һөйләмдәрҙе уҡы. Мәғәнәләрен аңлат. Былар нимәләр?

1. Яҙ менән көҙ... (нимәгә?) ышанма. 2. Яҙ киреләнһә, көҙ... (нимәнән?) яман. 3. Яҙғы ҡар... (нимәне?) ямғыр йыуа. 4. Ҡар баш... (нимәһенә?) ҡар етер. 5. Ҡарға килгәс тә юл... (нимәгә?) төшһә, иген уңыр. 6. Апрель ярты... (нимәһендә?) торна ҡысҡырһа, йыл яҡшы килә.

4. Был ниндәй һүҙҙәр? Ошо һүҙҙәр менән дүрт һөйләм төҙөп яҙ.

көслө — көсһөҙ, шат — бойоҡ

5. Үҙеңә оҡшаған йыл миҙгеле тураһында һөйлә.

6. Һиңә ниндәй байрам оҡшай?

7. Телевизорҙан ниндәй тапшырыуҙар ҡарарға яратаһың?

8. Ҡылымдарҙы үткән һәм киләсәк заманға ҡуйып яҙ.

ҡайт, ултыр, бир, ал, эшлә

Һүҙлек

1-се дәрес

осрашҡанға тиклем — до встречи
хужабикә — хозяйка
ир-ат — мужчина
ҡарамаҫтан — несмотря
күптән — давно

2-се дәрес

халыҡ шағирәһе — народная поэтесса
дәүләт — государство, государственный
баш мөхәррир — главный редактор
мәғәнә — значение
фекер — мысль
тулҡындар — волны
тынысланды — успокоился(-ась)

3-сө дәрес

сал һаҡаллы — с седой бородой
эскәмйә — скамья
ҡысҡырғанһың — кричал
һүҙгә килешкәнһең — спорил

4-се дәрес

иғтибар бирмәй — не обратив внимания
танымай — не признаёт
бала саҡ — детство
оҙатығыҙ — провожайте
ҡарт-ҡоро — старики
арып бөттөм — устал
хәтерләргә тырышалар — хотят вспомнить
ҡаршы алам — встречаю

5-се дәрес

ашыҡты — торопился(-ась)
аптырап ҡарай — смотрит с удивлением
онотҡан — забыл(-а)
өндәш һүҙ — обращение
яҙыусы — писатель

6-сы дәрес

ҡурҡытты — напугал
изге юл — священный путь

7-се дәрес

тамағыңды туйҙыр — поешь, покушай
күңел — душа
таяныу — опереться

8-се дәрес

һүндереү һорала — просят отключить
шылтыратырға — позвонить
тауышһыҙ шылдырыу — двигать без шума
бөкләү — сгибать, мять
йыртып алыу — вырывать

балсыҡ — глина
махсус — специальный

9-сы дәрес

һайлап алырға — выбирать
талабын үтә — выполняй требование
ҡамасаулама — не мешай
йыуыу урыны — моечная
хеҙмәткәр(-ҙәр) — сотрудник(и)
ҡулъяулыҡ — носовой платок
холоҡ — характер
ғәҙәт — привычка

10-сы дәрес

сәғәт нисә? — сколько времени?
ярты — половина
бушҡа — зря
эшләп бөт — заверши

11-се дәрес

түҙемһеҙләнеп көттө — ждал с нетерпением
тәжрибәле — опытный

12-се дәрес

кипкән сыбыҡтар — высохшие сучья
ашлама — удобрение
башҡарылыу рәүеше — способ выполнения
сәбәп — причина
маҡсат — цель

14-се дәрес

игеҙәктәр — близнецы
айыра алмай — не различает
күңелһеҙләнеп — с грустью

15-се дәрес

аптыраған — удивился
аңлай алмай — не понимает
эҙләп ҡараған — поискал
эшкә алмағандар — не брали на работу
асығып — проголодавшись

16-сы дәрес

теймә — не трогай
ҡул күтәрмә — не поднимай руку
үпкәләмә — не обижайся
бәхәсләшмә — не спорь
көнләшмә — не ревнуй
ошаҡлама — не ябедничай
тәкәббер — высокомерный, надменный
ағас ҡабығы — кора дерева
ҡоротҡостар — вредители

17-се дәрес

ғүмер кисергән — прожили жизнь
өмөт — надежда
ышаныс — доверие, надежда
аҡлағыҙ — оправдайте
боҙмағыҙ — не нарушайте

төп (эйәртеүсе) һүҙ — главное слово
эйәреүсе һүҙ — зависимое слово

18-се дәрес

ата-бабаларыбыҙ — предки
туҡтаған — остановился
кәңәшләшеп — посоветовавшись
төйәк — родная земля, родина
һунарсылыҡ — охота
солоҡсолоҡ — бортничество
малсылыҡ — скотоводство

19-сы дәрес

сик — граница
кәртә — препятствие
дәртләндерә — воодушевляет, окрыляет
гәлсәр — хрусталь

20-се дәрес

алмаштыра — заменяет
сәнғәт эшмәкәре — деятель искусства
ҡаҙаныш — достижение
етерлек — достаточно
һабаҡ ала — учится

21-се дәрес

умартасылыҡ — пчеловодство
төбәк — край
уңайлы — удобный
һеркә — перга
ҡорт елеме — прополис
ҡорт һөтө — маточное молочко
юғары баһалай — высоко ценит
аҡһым — белок
ҡатнаш бал — смешанный мёд

22-се дәрес

бейә — кобыла
ҡымыҙ бешеү — взбивать кумыс
туҡтауһыҙ — беспрестанно

23-сө дәрес

тире — кожа
һуғыш аса — объявляет войну
ҡаршы тора алмай — не могут противостоять
баштарын һалғандар — погибли
бәлә — горе, беда
һөйөнгән — обрадовался

24-се дәрес

ынйы — жемчуг
кәрәҙ — соты
солғай — окружает

25-се дәрес

тар — узкий
күҙ ташлаһам — если брошу взгляд

хәсрәт — печаль, горе
тиреҫ — навоз
йәлеп ит(-егеҙ) — привлекай(-те)

26-сы дәрес

мәмерйә — пещера
дымлылыҡ — влажность
юғалмаған — не исчезли, не пропали
ҡушма һүҙ — сложное слово
боҙлауыҡ — гололёд
ашҡаҙан — желудок

27-се дәрес

дауыл — буря
ер һелкенеп торған — земля тряслась
убылған — провалился(-ась)
барлыҡҡа килгән — образовался(-ась)
ағышы — течение

28-се дәрес

аҡсарлаҡ — чайка
буйға — вдоль
арҡырыға — поперёк
урындыҡ — нары
яҫы — плоский
үҫмер — подросток

29-сы дәрес

тәңкә — монета
һайрай — поёт
моңһоуланып ҡала — с грустью
өйөр-өйөр — стаями
хәл йыя(-лар) — отдыхает(-ют)
азатлыҡ — свобода
ижад итә — творит

30-сы дәрес

тау итәге — склон горы
уйһыулыҡ — низменность
өлкә — область
ҡорбан — лещ
ҡушбаш — голавль (рыба)
ҡараған ат — подлещик (рыба)

31-се дәрес

бер эш тә ҡушмай — не даёт работу
ялҡытты — надоело
көтөү — стадо
тирһен һыҙырып алыу — содрать шкуру
төрөнөп ятырға — укутаться
ҡайыш — ремень
тырнаҡ — зд.: когти
күтәрелгән — поднялся
өҙгәләй башлағандар — начали рвать
хәлдән тайып йығылған — упал без сил

32-се дәрес

тәпәш — низкий
тулыһынса — полностью

тәбиғәт ҡомартҡыһы — природный памятник
махсус — специальный
ҡанһыҙ — беспощадный
урлап ҡаса — похищает
ант итә — клянётся
терелә — оживает

33-сө дәрес

шифахана — санаторий
юныстҡы — щепка
көтөүсе — пастух
аяҡтары һыҙлай — ноги болят
һауыға — выздоравливает
тау ярығы — расщелина
йыл әйләнәһенә — круглый год
туңмай — не замерзает

34-се дәрес

ҡыйыу — смелый
яҡлаусы — защитник
фәһем алыу — извлекать урок
сағылдырған — отражает
быуындан быуынға — из поколения в поколение
мираҫ — наследие

35-се дәрес

һыу баҫыу — наводнение (потоп)
хәлһеҙ — без сил
мөгөҙ — рог
кәкрәйгән — искривился
мәңге — вечно
тояҡ — копыто

36-сы дәрес

яугир — воин
йонсоно — устал
яңыртырбыҙ — возобновим, начнём
шымсылар — сыщики (шпионы)
эҙәрләне(-ләр) — преследовал(-и)
хөкөм итте(-ләр) — судил(-и)
һөргөн — каторга
теҙген — узда
хәнйәр — кинжал
йыртҡыс — хищник

37-се дәрес

һынлы сәнғәт — изобразительное искусство
үҙенсәлекле — своеобразный
көнкүреш — быт
тасуирлай — описывает
ғөрөф-ғәҙәт — обычаи, нравы
шарт — условие

38-се дәрес

ойоштороla — организуется
билдәләнә — назначается
яҙмыш — судьба

39-сы дәрес

ил күләмендә танылған — известен во всей стране
көнсығыш — восток

40-сы дәрес

быраулап ҡарағандар — пробовали бурить
тәрәнгә йәшергән — глубоко спрятал
урғыла — извергается, бьёт, бурлит
ҡорамалдары — оборудование
йөҙҙәре ағарған — побледневшие лица
еҫе яман — плохой запах

41-се дәрес

суйын ҡойоу — плавить (лить) чугун
һаҡланып ҡалған — сохранился
баш күтәргән — восставшие
биләмә — территория
етәкселек итә — руководит
ҡорос сым — стальная проволока, канат

43-сө дәрес

әҙәм — человек
тоғролоҡ — верность
яҙмыш — судьба
яҡташ — земляк
аҡларға тырыша — пытался оправдать себя
башҡортлоҡ — быть башкиром
милләт — нация

45-се дәрес

таҡыр — ровный
тәрбиә — воспитание

46-сы дәрес

ҡабарып бешкән икмәк — пышный хлеб

47-се дәрес

нәҫел — род
тормошта таныла — получает признание
һәләтлелек — способность

48-се дәрес

исем серҙәре — тайны имени
табыныу йолалары — обряды поклонения
иш булыр — будет помощником

49-сы дәрес

ят инәй — незнакомая бабушка
бер туған һеңлем — родная младшая сестра
ризалашты — согласился(-ась)
еңгә — невестка
еҙнә — зять
ҡоҙа(-ғый) — сват(-ха)
бүлә(-сәр) — правнук, правнучка
көләс — приветливый

50-се дәрес

талап ителә — требуется
йылъяҙма — летопись
тәм — вкус
күләм — объём

51-се дәрес

васыят — завещание
аҡыл эйәһе — мудрец
еренә еткереп — сделать качественно
етеш — в достатке
күренекле — известный
күркәм — привлекательный

52-се дәрес

мәрхәмәтле — милосердный
фекер — мысль
мөрәжәғәт — обращение
боғослау — крутить
ҡулбаш — плечо
ҡараңғы — темнота
ҡот — уют; удача

53-сө дәрес

дәрәжә — степень
төп сифат — качественное прилагательное
шартлы сифат — относительное прилагательное

54-се дәрес

таҫтамал менән ышҡыныу — обтираться полотенцем
аҙыҡ ҡалдыҡтары — остатки пищи
сағыштырыу дәрәжәһе — сравнительная степень
артыҡлыҡ дәрәжәһе — превосходная степень
аҙһытыу дәрәжәһе — уменьшительная степень

55-се дәрес

тәҡдим итә — предлагает
иҫерткес эсемлек — алкогольный напиток
ялан аяҡ — босиком
һауа һула — дыши воздухом
маһайыу — зазнайство
сынығыу — закаляться
мөмкинлек булмаһа — если нет возможности

56-сы дәрес

ҡатмарлы — сложный
етди шөғөлләнә — занимайся серьёзно
ҡамасаулағанды — когда мешают
ғәжәп күренеш — странное явление
йыуан — толстый

57-се дәрес

утын ярҙым — колол(-а) дрова
һауҙым — доил(-а)
иҫәпләнгән — считается

59-сы дәрес

булыштым — помогал(-а)
бысты(-лар) — пилил(-и)

өйөп торҙо(-лар) — складывал(-и)
күмәкләшеп — все вместе
ерек — ольха
елкәнле — парусный
хәүефһеҙ — без происшествий

60-сы дәрес

ҡушманы — не велел
тоттом да йыуҙым — взял да помыл
алмаш — местоимение
рәнйетмә — не обижай
бәхетһеҙлек — несчастье

61-се дәрес

лайыҡ булдым — был удостоин
берҙәм дәүләт имтиханы — единый государственный экзамен
уңышлы — успешно
күмәс — булочка
ҡабартма — лепёшка
ҡамыр — тесто
ауыҙ иткән — попробовал
мауығып — с увлечением

62-се дәрес

һөрә — пашет
сәсә — сеет
күсерә — переводит
төркөмсә — разряд
тимерлек — кузница

63-сө дәрес

мажаралары — приключения
ҡыҫҡаса эстәлек — краткое содержание
аулаҡта серҙәш — в одиночестве собеседник
хәсрәт — горе
нескә тойғо — нежные чувства

64-се дәрес

зыян — вред
ятып уҡыу — читать лёжа
нығытыр — укрепит
онотма — не забудь

65-се дәрес

ный — угощение
йылдам атлай — шагает быстро

66-сы дәрес

бирешмәгән — не поддавался
саң борҡотоп — поднимая пыль
тау-таш аҡтарып — разбирая глыбы камней
күсереп — передвигая
тамыры менән ҡупта-рып — вырывая с корнем
ҡуйырып киткән — загустел

67-се дәрес

осҡон — искра
егет һүҙе — слово джигита

ҡылыҡ — поведение

68-се дәрес

күңеле төшмәй — нет желания
шыйылдап үтеп китте — пролетел со свистом
ваҡиға — событие
хәле бөттө — устал, обессилел
сәсәй башланы — начал захлёбываться (водой)
заман — время

69-сы дәрес

ҡуңыҙ — жук
киң ҡулланыла — широко применяется
мөмкинлек — возможность
уйлап тапҡандар — придумали

70-се дәрес

борсоғаным өсөн — за беспокойство
ихлас күңелдән — от души
тауыш — звук
ҡылымдың зат менән үҙгәреүе — спряжение глагола по лицам

71-се дәрес

етди — серьёзный
нигеҙ һалыусы — основоположник
бағышлай — посвящает
юғары кимәлгә — на высокий уровень

72-се дәрес

сәхнә — сцена
күренеш — действие
сихырланған — заколдованный
хәтерләтте — напомнил
һоҡландырғыс — удивительный
алҡыштар — аплодисменты
йәш тамашасы — юный зритель
ҡурсаҡ театры — театр кукол
тәүге аҙымдарын — первые шаги

73-сө дәрес

тормош — жизнь
күренеш — вид
бөртөкләп — по крупицам
нәфис — художественный
йәнһүрәт — мультфильм

74-се дәрес

илһамланып — вдохновлённо
хыял — мечта
биләй — занимает
яңылыш боҙған — нечаянно испортил

75-се дәрес

барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы — категория утверждения и отрицания

алмаштыр — замени
һирәк-мирәк — изредка
икһеҙ-сикһеҙ — бескрайний

76-сы дәрес

йыраҡ — далеко; даль
ҡосаҡ — объятия
рәнйене — обиделся(-ась)
емештәр тумаланды — завязались плоды
йылтырап — заблестев
етеште — поспели
атҡаҙанған хеҙмәткәр — заслуженный деятель
беҙ — шило

77-се дәрес

тигеҙләшә — выравнивается
әбейҙәр сыуағы — бабье лето
тынлыҡ — тишина
киләсәк заман — будущее время
көл — зола

78-се дәрес

ҡар шығырлай — снег скрипит
табан — подошва
бәҫ — иней
иләк — сито, решето

79-сы дәрес

сырҡылдашты — чирикали

80-се дәрес

билдәһеҙ һалдат — неизвестный солдат
иңемә — на плечи
үлгәндәр йәш ҡала — мёртвые остаются молодыми
яраланды — ранен
ыласын — сокол

81-се дәрес

белмәй ҡалдым — не знал
һиҙмәй ҡалдым — не почувствовал
сәфәр — путешествие
гиҙә — плывёт
күпселек — большинство
хуп күрә — одобряет

82-се дәрес

сыймаҡлап — чиркая
соҡор — яма
шарлауыҡ — водопад
килен — сноха
һырт — хребет

83-сө дәрес

көйөк еҫе — запах гари
тоя — чувствует
уттан ҡотолоп — спасаясь от огня
арыуҙан — от усталости
уттҡа бешкән — опалённый

84-се дәрес

боҙ ҡуҙғала — лёд трогается

йылға таша — река разливается
бөрөләнгән — набухли почки
ҡойона — купается
көн боҙола — погода портится
һыңар аяғында — на одной ноге

85-се дәрес

мәл — время
юртаҡтар — скакуны
көс һынашып ҡарайыҡ — померимся силами
һалмаҡ атлап — шагая степенно (неторопливо)
йөк аты — конь-тяжеловес
тоҡом — порода
сабыш аты — конь-скакун
сыҙамлы — терпеливый
сая — бойкий, смелый
түҙемһеҙлек — с нетерпением

86—87-се дәрестәр

биҙәлеш — оформление
арналған — посвящённый
донъя күрә — издаётся
билдәләнә — назначается
сағылдыра — отражает
хәбәрсе — корреспондент

88—89-сы дәрестәр

тапшырыу — передача
тиҫтер — сверстник
хайран ҡалдыра — удивляет
яңылыҡ(-тар) — новость(-и)
оторға — выиграть
иләү — род

90—91-се дәрестәр

сығыш яһау — выступление
баһа биреү — оценивать
бәйләнеш — связь

92-се дәрес

уйнап туймайым — не наиграюсь
ваҡытты тоймағас — не почувствовав время
ҡулланам — использую
тикшереүсе — проверяющий
минеңсә — по-моему
йөҙ түбән — ничком
баш түбән — вниз головой

93—94-се дәрестәр

мөрәжәғәт — обращение
йүнәлтмә — направление
төнәтмә — настойка
ҡасан уңайлы — когда удобно

95-се дәрес

телләшеү — пререкаться (ругаться)
телһеҙ ҡалыу — без слов
ышанма — не верь
киреләнһә — если упрямится

Яуаптар

4-се бит. Балалар, оло кеше, танышы, уҡытыусылар һәм уҡыусылар. **11-се бит.** Йылы һүҙ ташты иретер. **15-се бит.** Һәр һүҙҙе уңдан һулға уҡы. **17-се бит.** Кисә бик һуң Зөфәр автобусҡа ултырып, ҡаланан ауылға ҡайтты. **26-сы бит.** Ваҡыттың ҡәҙерен бел. **28-се бит.** Тура әйткән ҡотолор, алдап әйткән отолор. **31-се бит.** Ҡор, от, ҡос, тар, ҡорот, ҡоро, ос, тор, тос, ҡар, ҡаҡ, осто, ат, аҡ, оса, ҡора һ. б. **42-се бит.** Алма — омоним, синонимы — тотонма, антонимы — ал; ҡуян, синонимы — ҡылый; һыйыр — омоним; бейәләй; юл — омоним. **48-се бит.** Таны — (-ш, -ҡлыҡ), бүл — (-ек, -мә, -ексә, -кә), уй — (-ла, -сан, -маҡ, -ым). **49-сы бит.** Бишбармаҡ, ҡулъяулыҡ, меңьяпраҡ, Янғантау. **48-се бит.** Аса, ҡаҡ, ҡаҙаҡ, ҡабаҡ, сәс, күк, әсә, ҡалаҡ, тот, тут һ. б. **63-сө бит.** Ҡара, һыйыр, йөҙ, өй, көл, ҡат, ярма, йәшен, ашлама һ. б. **76-сы бит.** Салауат, Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Благовещен, Бәләбәй; Учалы, Өфө. **80-се бит.** Хан, тана, кит, тар, лар, ала, тала, ит, китап, тап, ат, хат, карап, пар һ. б. **82-се бит.** Тыуған ил — ирек, сит ил — ситлек. **89-сы бит.** Алтынсәс, Ҡояшбикә, Ҡарлуғас, Алмабикә, Хөрмәбикә.

Йөкмәткеһе

I бүлек. Танышыу 3

1-се дәрес. Хәйерле көн! 3
2-се дәрес. Яҡшы һүҙ матурлай донъяны 5
3-сө дәрес. Татлы һүҙ — йән аҙығы 7
4-се дәрес. Иғтибарлы булыу — үҙе изгелек 9

II бүлек. Минең мәктәбем 11

5-се дәрес. Мәктәпкә тәү барған көн 11
6-сы дәрес. Мәктәп — белем усағы 13
7-се дәрес. Белем — хазина 15
8-се дәрес. Китапханала 17
9-сы дәрес. Мәктәп ашханаһы 19
10-сы дәрес. Сәғәт нисә? 21
11-се дәрес. Мәктәп алды майҙансығы 23
12-се дәрес. Мәктәп баҡсаһы 25
13-сө дәрес. Минең мәктәбем (инша яҙыу) 26
14-се дәрес. Ялғанлыҡ алға алып бармай 27
15-се дәрес. Ялҡауҙың зиһене лә тарҡау 28
16-сы дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 30

III бүлек. Минең республикам 32

17-се дәрес. Нимә ул Ватан? 32
18-се дәрес. Беҙ үҙебеҙ башҡорттар 34
19-сы дәрес. Башҡорт йыры 35
20-се дәрес. Башҡорт бейеүе 37
21-се дәрес. Башҡорт балы 39
22-се дәрес. Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы! 41
23-сө дәрес. Моңло ҡурай, серле ҡурай 42
24-се дәрес. Телең барҙа — илең бар 44
25-се дәрес. Йәмле Ағиҙел буйҙары 47
26-сы дәрес. Шүлгәнташ мәмерйәһе 48

27-се дәрес. Асылыкүл — Башҡортостан ынйыһы 50
28-се дәрес. Талҡаҫ күле 51
29-сы дәрес. Аҡкүл 53
30-сы дәрес. Гүзәл Дим йылғаһы 55
31-се дәрес. Ирәндек 57
32-се дәрес. Шихандар — тәбиғәт һәйкәлдәре 60
33-сө дәрес. Янғантау — шифалы тау 62
34-се дәрес. Уралып ятҡан Уралда... 64
35-се дәрес. «Урал батыр» эпосы 65
36-сы дәрес. Башҡортомдоң улы 68
37-се дәрес. Башҡортостан рәссамдары 70
38-се дәрес. Утта янмай, һыуҙа батмай 73
39-сы дәрес. Стәрлетамаҡ 75
40-сы дәрес. Ишембай — нефтселәр ҡалаһы 76
41-се дәрес. Белорет — металлургтар ҡалаһы 78
42-се дәрес. «Минең ҡалам (ауылым)» проект эше 80
43-сө дәрес. Үҙ илең — алтын бишек 81
44-се дәрес. Башҡортостан буйлап сәйәхәт 83
45-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 83

IV бүлек. Мин һәм минең ғаиләм 84

46-сы дәрес. Үҙем тураһында 84
47-се дәрес. Исемең матур. Кем ҡушҡан? 86
48-се дәрес. Исем серҙәре 88
49-сы дәрес. Һинең туғандарың кем? 90
50-се дәрес. Шәжәрәңде беләһеңме? 91
51-се дәрес. Олатайҙар һүҙе — аҡылдың үҙе 93
52-се дәрес. Һиңә ниндәй сифаттар хас? 95
53-сө дәрес. Яҡшы эшкә ярыш юҡ 96
54-се дәрес. Тештәреңде бәләкәстән һаҡла 98
55-се дәрес. Сынығыу 100
56-сы дәрес. Спортты яратаһыңмы? 101
57-се дәрес. Алдашыу — насар ғәҙәт 103

58-се дәрес. Минең аҙналыҡ планым 105
59-сы дәрес. Минең ялым 107
60-сы дәрес. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ 109
61-се дәрес. Яратҡан шөғөлөм 110
62-се дәрес. Минең буласаҡ һөнәрем 112
63-сө дәрес. Яратҡан яҙыусым 114
64-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 115

V бүлек. Мин һәм минең дуҫтарым 117

65-се дәрес. Тыуған көнөң менән! 117
66-сы дәрес. Батырҙар ниндәй була? 119
67-се дәрес. Егет һүҙе 120
68-се дәрес. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар 122
69-сы дәрес. Уҡыуҙа ла, ялда ла бергә 124
70-се дәрес. Телефондан кемгә шылтыратаһың? 126
71-се дәрес. Ниндәй музыка тыңлайһың? 127
72-се дәрес. Ниндәй театрҙа булдың? 129
73-сө дәрес. Кино яратаһыңмы? 131
74-се дәрес. Музейҙа булғаның бармы? 133
75-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 135

VI бүлек. Мине уратып алған донъя 136

76-се дәрес. Тәбиғәт — үҙ йортобоҙ 136
77-се дәрес. Алтын көҙҙө яратам 138
78-се дәрес. Ҡар шығырлай табанда 139
79-сы дәрес. Ҡарҙар ирей, һыу таша 141
80-се дәрес. Онотмаһын мине Тыуған ил! 142
81-се дәрес. Гүзәл ваҡыттар етте 144
82-се дәрес. Ямғыр, яу, яу! 145
83-сө дәрес. Телмәр үҫтереү. Изложение 146
84-се дәрес. Был ҡай саҡ була? 147
85-се дәрес. Ауылда һабантуй 148

86—87-се дәрестәр. Ниндәй газета-журналдар уҡыйһың? 150
88—89-сы дәрестәр. Телевидение программаһы 152
90—91-се дәрестәр. «Һүҙ төркөмдәре» проект эше 153
92-се дәрес. Минең тормошта компьютер 154
93—94-се дәрестәр. Почтала. Поликлиникала 155
95-се дәрес. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? 156

Һүҙлек 159

Яуаптар 170

Учебное издание

Нафикова Закия Галиахметовна
Муртазина Фаузия Фагимовна

БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

Учебное пособие для 4 класса для изучения родного (башкирского) языка
и литературы в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения

(на башкирском языке)

Уҡыу баҫмаһы

Нафиҡова Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы
Мортазина Фәүзиә Фәһим ҡыҙы

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының
4-се класы өсөн туған (башҡорт) телен
һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *З. М. Ғәлишина*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *Л. Ф. Саниева, Г. Р. Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.10.2017. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы.
Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 12,87.
Шартлы буяу отт. 52,65. Иҙәп-нәшер таб. 5,19. Тиражы 4770 дана.
Заказ 1.0196.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.